ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

1-7 июль (майай) 2017
№26 (756)

15 йыл

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Башҡорт телеме?**

Ул мотлаҡ уҡытылырға тейеш!



5-6

**Өфөлә тыуыуым,**

үҙ фатирыбыҙҙа йәшәүем менән бәхетлемен



8

**Һеҙҙә кейеҙ баҫалармы?**

Беҙҙә кейеҙ баҫалар!..



9

**Йоҡонан да яҙма,**

ғүмереңде йоҡлап та уҙғарма



12

**Шифа** 11-14

***Ғүмер - ул кешеләр өсөн йәшәү мәктәбе. Артҡа боролоп ҡарағыҙ һәм унда күпме фәһем, һабаҡ булғанын аңларһығыҙ. Ул һабаҡтар менән ваҡытында ҡуллана белеү мөһим. Шуға ла үткән тормош юлығыҙҙы өйрәнегеҙ, үҙегеҙҙең тәжрибәгеҙгә таянып эш итегеҙ, бигерәк тә күңелһеҙ, аяныс тәжрибәгә.***

***(Али Апшерони).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йәйге мәшәҡәттәр, ауыл хужалығы һәм баҡса эштәре хаҡында һөйләшеп алайыҡ әле...

***Артур НОҒОМАНОВ, БР Йәшелсәселәр берлегенең үҫемлекселек буйынса эксперты:*** Быйыл ауыл хужалығы эштәре өсөн йыл уңай килде, тип әйтеп булмай, әлбиттә. Күптәрҙе күңел төшөнкөлөгө биләне, быйыл уңыш булмаҫ, ахыры, тигәнерәк һүҙҙәр ишетелгеләй. Бигерәк тә баҡсасылар өмөтһөҙләккә бирелде. Ә минеңсә, бында артыҡ хәүефләнергә бер ниндәй сәбәп тә юҡ. 1969 йылда хәл быйылғынан күпкә хөртөрәк тә булғайны әле, барыбер уңышһыҙ ултырып ҡалманыҡ. Июндә һауа температураһы үҫемлекселек культураларының вегетация осоро өсөн бик уңайлы булды, тип иҫәпләйем. Тупраҡтың дымлылығы ла улар өсөн файҙаға ғына. Әлбиттә, шул яғы бар: үлән-бесән бик уңһа ла, мал аҙығы әҙерләү өсөн шарттар булмай торҙо, ләкин хәҙер был йәһәттән теләһә ниндәй һауа шарттарында ла сеймалдың дымлылығын иҫәпкә алып, силос, сенаж әҙерләүҙең төрлө отошло технологиялары тәҡдим ителә. Мәҫәлән, шундай яңылыҡтарҙың береһе - һулыған үләнде силослау (провяленый силос) быйылғы кеүек яуымлы, ҡояш йылыһы етмәгән осорҙа бик ҡулайлы ысул. Иген культураларына килгәндә, быйыл уңыш йылдағынан күпкә ҡайтыш буласаҡ, имеш, тигәнерәк "күрәҙәләргә" мин ышанмайым. Арышы ла, бойҙайы, арпаһы, башҡалары ла һәйбәт кенә үҫеп ултыра. Быйылғы шарттарҙа химик утау ҙа үткәреп булманы, тигәндәренә лә бошонорға түгел. Был кәрәкмәй ҙә, сөнки ул мотлаҡ агротехник сара түгел. Ҡый үләндәренә ҡаршы тырматыу ысулын ҡулланырға ла була ине.

Йәшелсәләр хаҡында әйтеп киттем инде: картуф, кишер, сөгөлдөр һәйбәт кенә үҫенте ебәреп, нығынып китте. Ҡайһы бер урындарҙа, әйтәйек, грунт һыуҙары яҡын булған ерҙәрҙә артыҡ нык дымлылыҡтан үҫентеләрҙең сирләү ихтималлығы көсәйә: кафтуф бүлбеләре серей, помидорҙар - фитофтороз, ҡыяр антропоноз сиренә бирешеүсән була. Ундай осраҡтарҙа химия ҡулланыу ярамай, ә сирле ҡыяҡтарҙы өҙөп ташлап торорға кәрәк буласаҡ. Дөйөм алғанда, бер ниндәй паникаға урын юҡ, ҡояшлы, аяҙ көндәр алда әле, бына шунда инде дымға туйынған үҫентеләр артабан нығынып, уңышҡа төймәләнер, тигән өмөт бар.

***Ғәлийән ТӨХФӘТУЛЛИН, хаҡлы ялдағы уҡытыусы, Шишмә районы, Түбәнге Хәжәт ауылы:*** Быйылғы йәй һис уйламағанда бер-ике аҙнаға һуңлабыраҡ, ҡырыҫыраҡ башланып китте шул. Ямғырлы, һалҡын көндәр культуралы үҫентеләрҙең тамыр ебәреү осоро өсөн бик яҡшыға булманы, әлбиттә. Тупраҡта дымдың артыҡлығы, ҡояш йылыһының етешмәүе үҫентеләргә нығынып, баш ҡалҡытып китеүгә бик ҡамасауланы. Кемдең сәскәне нисек үҫеп килә торғандыр, әммә үҙемдең ултыртҡан бөтөн йәшелсә үҫентеләре лә теремек кенә күренә. Ҡатыным менән баҡса эшенә күп иғтибар бүләбеҙ. Быйыл да йылы, аяҙ торған көндәрҙе бушҡа үткәрмәйенсә, баҡсабыҙҙа күп итеп картуф, ҡабаҡ, һуған, кишер, сөгөлдөр - барыһын да оптималь сроктарҙа ултыртып ҡалдыҡ. Йылыны яратыусы йәшелсә - ҡыярға инде айырым шарттар кәрәк, шуға ла уны йыл һайын теплицала үҫтерәбеҙ. Ҡайһы бер кешеләрҙең помидор үҫентеләре юҡҡа сығып, әрәм булды быйыл, ҡабаттан ултыртып мәшәҡәтләнергә тура килде уларға. Беҙҙең былай помидорҙарыбыҙ ҙа ирәбе генә үҫеп килгән була. Артабан һауа торошо нисек булыр - киләһе уңыш шуға бәйле хәҙер. Тик яҡшы көндәрҙе көтөп, ҡул ҡаушырып ултырмайһың инде йәшелсә-емеш ашайым, тиһәң. Быйыл бигерәк тә. Йәй башы һалҡын торғанлыҡтан, үҫентеләрҙе ҡарап, тәрбиәләп, ашлап, төнгөлөккә ябып, ышыҡ ҡороп, ныҡ ҡына тир түгергә тура килә. Көн торошона алдан күҙаллауҙар менән хәбәрҙар булыу ҙа мотлаҡ. Алдан белеп торғанда, үҫентеләрҙе ел-дауыл, боҙ-ямғырҙан зыянлатмай алып ҡалырға була.

(Дауамы 2-се биттә).

ӘЙТӘГҮР!

# БАШ ҠАЛАНЫҢ...

## рухты күтәреүсе мәҙәни саралары

**Һауа торошо боҙолоуға ҡарамаҫтан, "Евразия йөрәге" Халыҡ-ара сәнғәт фестиваленең күркәм байрам сараларына Өфө халҡы ихлас йөрөнө. Концертты тамаша ҡылырға тотош ғаиләләре менән килеүселәр булды. Баш ҡаланың "Ватан" этнопаркында йәй дауамында бындай саралар йыш үткәрелә. Унда һәр ваҡыт ихлас йөрөүселәрҙең береһе Динара Аллаярова менән ҡала халҡы өсөн ошондай байрамдарҙың әһәмиәте тураһында һөйләштек.**

(Дауамы 2-се биттә).



12+

ӘЙТӘГҮР!

# БАШ ҠАЛАНЫҢ...

## рухты күтәреүсе мәҙәни саралары

(Башы 1-се биттә).



- Өфө ҡалаһында күптән йолаға әйләнеп киткән байрам саралары байтаҡ. Бөтә ҡала халҡының ял көнөн файҙалы, күңелле итеп үткәреүгә ҡоролған тантаналарға ғаилә менән йөрөргә тырышабыҙ. "Ватан" этнопаркы төҙөлгәнгә тиклем дә ошо урында "Симфония төнө" үткәрелә торғайны, йәй айҙарында өс-дүрт тапҡыр классик музыка тыңларға йөрөнөк. Былтыр бында ҙур ремонт эштәре тамамланғас үткәрелгән концерт сараларының бер нисәүһен килеп ҡарағайныҡ, быйыл йәйге ялды "Евразия йөрәге" Халыҡ-ара сәнғәт фестиваленән башланыҡ.

Фестиваль башкөллә эшкә сумған ҡала халҡын көндәлек мәшәҡәттәрҙән арындырып, хеҙмәт көнөнән һуң ял сәғәттәрен классик музыка, төрлө халыҡтарҙың этник музыкаһы монона сорнап, саф һауала ял итергә форсат бирә. Шуға ла йәй дауамында үткәрелгән төрлө концерт, фестивалдәр, байрамдарға төрлө быуын кешеләре ихлас йөрөй. Өфө урамдарында үткәрелгән тамашаларҙы ҡарарға сыҡһаң, уларҙың һәр ваҡыт бөтәһе өсөн дә ҡыҙыҡлы итеп ойошторолоуына иғтибар итәһең. Балаларға уйнарға, тиҫтерҙәре менән аралашырға форсат тыуа. Йәштәргә төрлө конкурстар, заманса тамашалар ҡуйыла, ололар ҙа иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Ғөмүмән әйткәндә, ғаилә менән бергә ял итергә мөмкин. Ул ғына ла түгел, был саралар йәш быуын балаларын тәрбиәләү өсөн дә әһәмиәтле. Бәләкәйҙән бала күңелендә төрлө халыҡтарҙың йыр-монона, йолаһына ихтирам тәрбиәләүгә, туған башҡорт теленә һәм милли йолаларға, мәҙәниәткә һөйөү уятырға булышлыҡ итә. Рухлы, илһөйәр, туған телен яҡшы белгән балалар үҫтереү тураһында күп һөйләйбеҙ, ҡалала үткәрелгән ҡайһы бер саралар ошо маҡсатҡа булышлыҡ итә ул. Әле "Евразия йөрәге" фестивалендә башҡортса этник музыка көйҙәренә, ҡурай моңона сәхнә тирәләй ихлас бейергә төшкән балаларға ҡарап һоҡланып ултырҙыҡ. Улар араһында Искәндәр улыбыҙ ҙа арып-талғансы бейеп, байрамдан әйтеп бөткөһөҙ тәьҫораттар алып ҡайтты. Бала булғас, милли йыр-мондоң нимә икәнен аңламайҙыр ҙа, ләкин күңеле менән тойоп, үҙенсә башҡортса бейеп, һикереп йөрөгән кескәйҙәргә ҡарап, күп кенә ата-әсәләр уйланғандыр, моғайын. Ҡала шарттарында баланы милли рухта тәрбиәләүе ауыр, тип фекер йөрөтөүселәрҙең ҡарашы үҙгәргәндер. Баш ҡала халҡын берләштергән музыкаль саралар араһында башҡорт мәҙәниәтенә бәйле күркәм тамашалар булыуы бары тик хуплауға ғына лайыҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Йәйге мәшәҡәттәр, ауыл хужалығы һәм баҡса эштәре хаҡында һөйләшеп алайыҡ әле...



(Башы 1-се биттә).

Үлән-бесән бик унған быйыл - билбыуарҙан, тик сапҡанды киптереп йыйып алырға көнө генә унай торһон инде. Баҫыу культураларына килгәндә, беҙҙә күпләп шәкәр сөгөлдөрө үҫтерәләр. Ә был бик әрһеҙ культура. Ул теләһә ниндәй һауа торошона ла бирешмәй. Өҫтәүенә, заманса агротехник саралар күрелә. Элекке кеүек, бөтөн ауыл менән сөгөлдөр утарға йөрөмәйбеҙ хәҙер. Ҡый үләндәренә, һәр төрлө ҡоротҡос бөжәктәргә ағыу ҡулланыла - шуныһы бик хәүефле. Ул ағыу бит сөгөлдөрҙөң үҙендә лә тупланып ҡала, тимәк. Пай ерҙәребеҙҙе "Башагроинвест" акционерҙар йәмғиәтенә ҡуртымға биргәнбеҙ. Көҙ был предприятие беҙгә пайсы башына 5-әр центнерҙан ашлыҡ таратып сыға.

***Вәсилә АБДУЛЛИНА, һәүәҫкәр баҡсасы:*** Яҙҙың бик һүңлап килеүе, көндәрҙең һалҡын тороуы йәйҙең төрҙе айы - ауыл хужалығы эштәре, баҡсасылыҡ өсөн иң яуаплы мәлдәрҙә һаман дауам итә әле. Мин улай бик фанатик баҡсасы булмаһам да, 20 йыллап инде үҙемдең төп эшемдән бушаған араларҙа баҡсала соҡонам. Йәй осорона баҡсаһына башкөлләй күсеп килеп, көн-төн шунда эшләп ятҡан пенсионерҙар менән ярышып булмай, әлбиттә. Уларҙың донъяһына күҙ һалһаң, иҫең китә. Хатта быйылғы ямғырлы, һалҡын көндәр ҙә ҡамасаулай алмай был эшһөйәрҙәргә: баҡсалары гөрләп үҫеп ултыра. Әйтерһең дә, боҙ ҙа яумаған, ҡояшы ла болоттарға йәшеренеп ятмай, ел-дауыл да болармаған быйыл. Ултыртҡан йәшелсә-емештәренең тәбиғәт ҡытлығына бирешмәй үҫеп ултырыуын мин ана шул баҡсасыларҙың унғанлығынан, уларҙы күҙ яҙҙырмай ҡарап-тәрбиәләп, һаҡлап тороуҙарынан күрәм. Уң яҡ күршем Айһылыу апайҙың помидорҙарын ҡырау һуҡҡайны ла, ҡабатлап тағы ултыртырға иренмәне бер ҙә. Уның ҡарауы, хәҙер нығынып үҫеп киткәндәр. Ҡыярын, боросон йыйдың-йыйы теплицала үҫтереп, әллә күпме уңыш ала, баҙарға ла сығарып һата апай. Бабайы менән икәүләп бил бөккәс, бөтәһенә лә өлгөрә улар. Һул яҡтағы күршем Валентина ханым нигеҙҙә сәскәләр үҫтереп һатыуға махсуслашҡан. Ул да минең кеүек яңғыҙ-ярым, шуға күп көс, тәрбиә талап итә торған картуф-йәшелсә культураларын ултыртып мәшәҡәтләнмәй. Мин баҡсамда, йылдағыса, бер аҙ ғына сөгөлдөр, кишер, һуған, ҡабаҡ, шулай уҡ укроп, салат, петрушка кеүек йәшел ҡыяҡтар ултыртҡайным, ғәжәпкә ҡаршы, бөтәһе лә берҙәм шытым бирҙе, тик яй үҫәләр әле. Күрәһең, дым етерлек булһа ла, ҡояш йылыһы юҡлыҡтандыр. Ямғыр яумаған бик һирәк көндәрҙә тупраҡ тиҙ генә кибеп тә өлгөрә, шуға күрә үҫентеләрҙе йәлләп, һыу һибеп ҡайтырға тура килә. Белгән кешеләр шулай аңлатты: ер дымлы булһа ла, ел уның өҫкө ҡатламын цемент кеүек итеп ҡатыра ала икән дә. Шуға күрә рәт араларын бәләкәй тырма менән эләнән-әле йомшартып сығам. Ер еләктәре шау сәскәлә ултыра. Сәскәһе күп булһа, емеше булмай, тип ишетеп, эс бошҡайны, әле былай емешкә төймәләнһә лә, ҡояш нуры етешмәгәнлектән, һаман өлгөрөп етмәйҙәр. Ә бына ҡарағат, сейә ҡыуаҡтары емеш бирмәҫтәр, ахыры, сөнки сәскәләре һабаҡтары менән бергә ҡойолоп бөттө. Һәр йылдың - үҙ емеше, тиҙәр бит. Тегеһе булмаһа, икенсеһе уңыр әле, тип бик бошонмайым - Хоҙай ҡулында бит. Ләкин шуға инанғанмын: тырышҡанда, хәстәрләгәндә генә емеш алырға була баҡсанан. Ниндәй һауа торошо булыуына ҡарамайынса. Алда - тотош ике ай бар әле. Июлдә ысынтылап йәй киләсәк, тип яҙа гәзиттәр. Унан тағы шуныһы ла бар: яҙ ике аҙналап һуң килгәнлектән, йәй ҙә бит көҙ иҫәбенә бер аҙ оҙағыраҡ дауам итер, моғайын. Тәбиғәт барыбер үҙенекен ала ул, бер көнө лә бушҡа юғалмай.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 15 ЙЫЛ

# "ГӘЗИТЕҺЕҘ ЙӘШӘП БУЛМАЙ!"

**Ошо көндәрҙә яҙыусы Зөһрә Фәйзуллинаның тормошона һәм ижадына арналған викторина һорауҙарына яуап бирергә теләп редакцияға Әбйәлил районы Үтәгән ауылынан Нуридә Мөхәмәтйәнова шылтыратты. Уйындың бөтөн һорауҙарына дөрөҫ яуап биреп бөткәс, һүҙ ыңғайында гәзит тураһындағы фекерҙәре менән дә бүлеште.**

- Мин элек "Киске Өфө"нө һатып ала, йә күршемә инеп уҡый торғайным,- тип башлап китте һүҙен Нуридә апай. - Хәҙер яҙҙырып уҡыйым. Инде рәхәт булып ҡалды! Тәүҙә ярты йылға яҙылыу үтә ҡиммәттер, тип уйлағайным. Күршем "Юҡ, осһоҙ ғына", тигәс, почта бүлексәһенә юлландым. Хәҙер гәзитте өйгә үк килтерәләр.

"Киске Өфө" ни яғы менән оҡшаймы? Миңә ул төрлөлөгө менән яҡындыр, күрәһең. Ялҡытмай. Мәҡәләләрҙең беҙгә, өлкәндәргә генә түгел, хатта балаларға ла кәрәк булып киткән мәле була. Үҙемә үләндәр, халыҡ дауаһы тураһында "Шифа" махсус бите, башваҡыстар оҡшай. "Комар" рубрикаһында баҫылған әҙәби әҫәрҙәр йәнгә ял бирә.

Форсаттан файҙаланып, гәзитте ойоштороусыларға, уны ижад итеүселәргә рәхмәтемде еткергем килә. Әле килеп, викторинала ҡатнашып, автографлы китапбүләк отоп ҡыуанып ултырам. Уҡыусылар менән тығыҙ бәйләнештә булыу һәр матбуғат баҫмаһының абруйын арттыра. Ауыл кешеһенең аҡсаһы артып бармай, шуға ҡарамаҫтан, аҡса юҡ тип тормай, үтескә алһаҡ та, артабан да ошо гәзиткә яҙылырбыҙ, тип торабыҙ. Гәзитһеҙ йәшәп булмай!

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов 2019 йылда Өфөлә 53-сө Халыҡ-ара йәйге балалар уйындарына әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, уйындар Башҡортостандың баш ҡалаһында 2019 йылдың июнь-июль айҙарында үтә. Өфө 2013 йылда VI Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындарын ҡабул иткәйне инде. Ярыштарҙа донъяның 20 иленән 60 ҡаланың йыйылма командалары ҡатнашты. Башҡортостандың баш ҡалаһы донъяла Халыҡ-ара балалар уйындары тарихында ҡышҡы һәм йәйге уйындарҙы ҡабул иткән берҙән-бер ҡала буласаҡ.

✓Өфө буйлап эш сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Арт-КВАДРАТ" креатив ҡала киңлеген булдырыу проекты менән танышты. Проект Өфөнөң тарихи үҙәгендә - Чернышевский, Мостай Кәрим, Коммунистик һәм Ленин урамдары менән сикләнгән кварталда ижади кластерҙы барлыҡҡа килтереүҙе күҙ уңында тота. "Арт-КВАДРАТ" креатив йәштәрҙе йәлеп итеү урыны, Өфө халҡы өсөн ысын ял итеү зонаһы һәм ҡаланың тағы ла бер ижади үҙәге буласаҡ тип күҙаллана.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Ҡырымда 7-8 июлдә "Рәсәйгә ант биреп" төбәк-ара фестивален уҙғарыу тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Республиканың Мәҙәниәт министрлығына фестиваль барышында "Рәсәйгә ант биреп: Башҡортостан һәм Ҡырым быуаттар күҙлегенән" тигән темаға ғилми-ғәмәли конференция уҙғарыу, Башҡортостандың һәм Ҡырым Республикаһы Белогорск районының сәнғәт оҫталары концертын, шулай уҡ Айнур Аҫҡаровтың "Өфөнән һөйөү менән!" фильмын күрһәтеүҙе тәьмин итеү бурысы йөкмәтелгән.

✓7-9 июлдә Иглин районында "Урал мираҫы" милләт-ара этнофорумында ҡатнашыусыларҙы көтәләр. Ойоштороусыһы - Башҡортостан Йәш яҡташтар ассоциацияһы. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ҡарамағындағы Йәштәр йәмәғәт палатаһы рәйесе урынбаҫары Даян Солтанғужин иҫәпләүенсә, йәштәрҙе үҙ үҫешенә, үҙ-үҙен күрһәтеүгә дәртләндерергә кәрәк. Быныҡ өсөн белем биреү форум майҙансыҡтары бик тап килә, унда лидерҙарҙы, ҙур потенциалға эйә йәштәрҙе билдәләргә мөмкин. "Былтыр ошо проект "Территория смыслов на Клязьме" Бөтә Рәсәй форумында 200 мең һумлыҡ грантҡа лайыҡ булды", - тине Даян Солтанғужин.

✔ *Уларҙың штраф түләп йә ришүәт биреп ҡотолоуы, таныҡлыҡтарын тартып алыу йәки шартлы яза биреү - ул бик йомшаҡ сара: енәйәтселәрҙең башынан һыйпау ғына ул.*



БЫЛ АЙҘА...

**Йәйҙең үҙәге - июль, йәғни, халыҡ телендәгесә - майай ҙа килеп етте. Үлән-бесән һутҡа тулышып, бешеккәс, мал да утығып, көрәйеп ҡала. Һыйырҙар биҙрә-биҙрә һөт ташый ҡырҙан был айҙа. Хужабикәләр ҡышҡылыҡҡа тәпән-тәпән май туплап ҡала торған мәл. Шуға ла, күрәһең, халҡыбыҙ июлде борондан майай тип атап йөрөткәндәр. Мал аҙығы әҙерләү, бесән эштәре ҡыҙған осор. Емеш-еләк өлгөрә. Хәйер, ауыл халҡының буш ултырған көнө-сәғәте лә юҡтыр. Бер тигәс тә, баҡса емешен эш итергә, йәшелсә-картуфын утап, бер нисә тапҡыр күмеп сығырға кәрәк, шунһыҙ уңышҡа өмөт итмә.**

# ЙӘЙ ҮҘӘГЕНДӘ...

## ай-һай ҡыҙыу эштәр!

Ай календарына килгәндә, Ысынлап та, байрам ҡайғыһы юҡ был мәлдә. Ауыл халҡы эш менән булһа, ҡалаҡыҡылар ҙа дачала бил бөгә. Ере булмағандар ҡаланан ситкә китеп ял итә, диңгеҙ буйында ҡыҙына. 31 көндән торған майайҙа бер генә рәсми байрам булмаһа ла, айҙың ҡап яртыһы төрлө һөнәрҙәргә бағышланған даталарҙан ғибәрәт.

Эш, эшмәкәрлек хаҡында һүҙ алып барғанда, айҙың тәүге көнө - Халыҡ-ара кооперативтар көнө лә **(1)** шул темаға ишаралағандай. Ике быуатҡа яҡын тарихы булған кооперативтар ҡасандыр ҡулланыу, сауҙа, һатып алыу һәм аҙыҡ-түлек етештереү өлкәләрендә ил иҡтисадын үҫтереүгә тос өлөш индерә, ләкин ил етәкселегенең колхоз-совхоздарҙы эрелләштереү сәйәсәтенән һуң кооператив хужалыҡ формалары бөтөрөүгә дусар ителә. Ҡыҙыҡ ғәҙәтле илдә йәшәргә яҙған шул беҙгә - ни хәл итмәк кәрәк...Туҡтауһыҙ реформалар, тәжрибә-эксперименттар... уй, экскрементлар, тип әйтә генә яҙҙым! Йәненә көйгәндә, әллә нимә тип әйтерһең. Йүнле-башлы эш килеп сыҡты тигәндә генә, тоталар ҙа "экспериментировать" итә башлайҙар бит. Әлеге көндә илдә, киреһенсә, колхоз-совхоздар бөтөрөлгәс, тағы ла кооператив формалар кәрәк булып сыҡты бына. Бөгөн кооперация ауылдың социаль инфраструктураһы нигеҙен тәшкил итәсәк, кооператив хужалыҡ ысулы - ауылдың киләсәге, тигән фекер йыш ишетелә башланы. Башҡортостан Башлығы Р. Хәмитов та сығыштарында был хаҡта бер нисә мәртәбә әйтеп китте. Мәсәлән, республика халҡы менән быйылғы "Тура бәйләнеш"тә билдәләүенсә, был хужалыҡ ысулы донъя һәм Европа кимәлендә яҡшы үҫеш алған. Барлығы 250 меңләгән кооперативта 10 миллиондан ашыу кеше мәшғүл. Аҡса эшләргә, эшҡыуар булырға теләгән кешеләргә кооперативтарға йәки халыҡ предприятиеларына берләшеп, уңышҡа өлгәшеү мөмкинлеге ҙур. "Һуңғы ваҡыт беҙҙә лә төрлө йүнәлештәрҙәге кооператив хәрәкәттәр йәнләнә башланы, уларға ярҙам итергә кәрәк. Әле яңыраҡ ҡына минә "Башҡорт бал ҡорто" тигән матур исем менән кооператив ойошторола башлауы хаҡында ишетеүе күңелгә ятышлы булды", - тип һөйләне республика Башлығы Р. Хәмитов. Әйткәндәй, Башҡортостанда умартасылар күбәйҙе хәҙер. Ысынлап та, уларҙы ниндәйҙер ойошмаға берләштереү кәрәклеге көн талабы ине. Хәҙер балдың сифатын тикшереү йәһәтенән дә, тауарҙы фирма һауыттарына тултырыуҙа һәм уны һатыуҙа ла үҙәкләштерелгән кооператив эш алымы умартасылар эшен еңеләйтәсәк, тип ҡарарға кәрәк. Башҡа йүнәлештәге эшҡыуарҙар һәм фермерҙар ҙа ошо өлгөнән һабаҡ алыр, моғайын.

Диңгеҙ һәм йылға флоты хеҙмәткәрҙәре көнө **(2)** лә йәйге мәшәҡәттәр менән үтеп китәләр, ахыры. Диңгеҙселәр йөк һәм пассажирҙар ташыу, балыҡ тотоу менән мәшғүл булһа, беҙҙә йылға флоты эшмәкәрлеге яҡшыраҡ таныш, сөнки республикабыҙҙың иң ҙур йылға артерияһы булған Ағиҙел буйлап йөк ташыусы пароходтар һәм баржаларҙан тыш, "Башҡортостан" туристар теплоходы ла йәй буйы ял итеүселәрҙе хеҙмәтләндерә.

"Башҡортостан юлдарындағы автоаварияларҙа йыл һайын һәләк булғандарҙың һаны тотош бер ауыл халҡын тәшкил итерлек", тип яҙа интернет сығанаҡтары. Аныҡ һандарға килгәндә иһә, был хаҡта статистика менән республика ЮХХДИ етәксеһе Д. Ғилметдиновтың блогында танышырға була. Былтыр, мәсәлән, 4 545 авария булып, унда 516 кеше һәләк булған, 5 849 кеше йәрәхәтләнгән. Автоһәләкәттәрҙең 3 955-е водителдәр ғәйебе менән яһалһа, 598-е йәйәүлеләр хатаһы. Һәр икенсе юл-транспорт осрағы (2 018 тапҡыр) - ике йә бер нисә автомобилдең бәрелешеүе һәм өстән бер өлөшө - йәйәүлеләрҙе бәрҙереү һөҙөмтәһе. 412 авария (унда 81 кеше һәләк була, 561-е йәрәхәт ала) иҫерек водителдәр тарафынан яһала. Күренеүенсә, ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәренә юлдарҙа эш етерлек, тик бына руль артындағыларға



ҡарата ярты-йорто түгел, ә иң ҡәтғи саралар күрелергә тейеш. Уларҙың штраф түләп йә ришүәт биреп ҡотолоуы, таныҡлыҡтарын тартып алыу йәки шартлы яза биреү - ул бик йомшаҡ сара: енәйәтселәрҙең башынан һыйпау ғына ул. Кеше үлтереүҙә ғәйепле икән, уға бер ниндәй аҡлау-яҡлау тейеш түгел - ЮХХДИ мәсьәләне ана шулай ҡуйырға тейеш. Үлем һәм зәғифләнеү бар ерҙә байрамға урын юҡ. Тәртип бар ерҙә генә ЮХХДИ көнөн **(3)** байрам итеп алыу ҙа яҙыҡ булмаҫ ине.

Илебеҙҙә һуңғы йылдарҙа демография мәсьәләһе киҫкен тора. 2008 йылдан алып билдәләнеүсе Бөтә Рәсәй ғаилә, һөйөү һәм тоғролоҡ көнө **(8)** шул мәсьәләне хәл итеүгә үҙ өлөшөн индерерме? Бәғзе берәүҙәр, ғаилә институты бөгөн тарҡалыуға табан бара, тип ғауғалаһа, икенселәр, ул үҙгәреш кисерә һәм көнбайыш моделен ҡабул итә, тип фаразлай. Ә үҙгәрештәр күҙгә күренерлек: айырылышыуҙар артты; ата менән әсә ролдәре алмашына; һуңыраҡ өйләнешеп, һуңыраҡ бала табыу йышайҙы; ғаиләләр үҙҙәрен яҡлаулы итеп тоймай башланы һәм фәҡәт үҙ көсөнә генә иҫәп тота алыуын аңланы. Ҡыҫҡаһы, "йәмғиәтебеҙҙең бер күҙәнәге" булған ғаиләләр мәсьәләһенең дәүләт кимәлендә көйләнеп, яйға һалыныуына өмөт бармы бөгөн?

Рәсәй почтаһы көнө **(9)** йәшәп килә әле, ләкин бына хат ташыусы төшөнсәһе иҫкерҙе. Килеп етте шундай заман: халыҡ хатлашыуҙан туҡтаны, телефондан ғына хәл-әхүәл белешә, проблемаларын хәл итә. Тағы шуныһы үкенесле: гәзит тә таратмай почта, таратҡанда ла элекке көс етеһеҙ сумкаларының эсендә хәҙер өҫ-дүрт гәзит кенә ятыуы мөмкин, улары ла ойошмалар һәм офистарға тәғәйен. Ә шулай ҙа һыу буйы сират көтмәгән һаман да почта бүлексәләрендә: ул түләүҙәр ҡабул итә, посылкалар, аҡса переводтары ебәрә, нисек тә булһа подписканы ла ойоштторорға тырыша, ахыр сиктә, ручка-дәфтәр, китап видеодискылар, түшәк кәрәк-яраҡ, көнкүреш химияһы менән сауҙа итеүҙән дә тартынмай: табыш кәрәк. Тик барыбер Рәсәй почтальондары иң бәләкәй эш хаҡы ала, ә шул уҡ ваҡытта ошо ведомство башлығы Дмитрий Страшнов ниндәйҙер күҙгә күренмәгән уңыштары өсөн 95 млн премия алып, бөтөн илде шаҡ ҡатырҙы. Прокуратура, үҙәк мәғлүмәт саралары тәүҙә был хаҡта шаулай биреп алды ла шып туктаны: Баш почтальондың юғарыла яҡлаусыһы бар, имеш...

Айҙың икенсе яртыһында Металлургтар **(16)**, Сауҙа хеҙмәткәрҙәре **(22)**, Тәфтиш органдары хеҙмәткәрҙәре **(25)** һөнәри көндәрен билдәләр. Шул араларҙағы Янғын һағы **(18)** көнөнөң ифрат көсөргәнешле мәлдәргә тап килеүен әйтергә кәрәк. Йәй осоро янғын һаҡсыларында байрам ҡайғыһы юҡтыр. Был йәһәттән янғын осраҡтарының байтағы кеше факторына бәйле булыуы ошо хеҙмәт эшмәкәрлегенең былай ҙа ауыр һәм яуаплы бурысына икеләтә көс төшөрөүен таныға тура килә.

Халыҡ-ара шахмат көнөндә **(20)** был интеллектуаль спорт төрөн үҙ итеүсе Башҡортостан шахматсылары ла үҙ уңыштары барлай торғандыр. Ә улар байтаҡ. Айырыуса баш ҡалабыҙҙың "Толпар" шахмат-шашка клубы тәрбиәләнеүселәре, шулай уҡ Стәрлетамаҡ, Учалы, Туймазы, Ғафури, Хәйбулла, Тәтешле, Борай ҡала һәм районларының йәш шахматсылары күптән инде Рәсәй кимәленә сыҡты, ә Юлия Григорьева менән Артур Ғәйфуллин Европа һәм донъя беренселегенә Рәсәй йыйылма командаһына инде хатта. Әйткәндәй, Шишмә районы йәш шахматсылары былтыр ауыл мәктәбе уҡыусылары араһында Рәсәй беренселеген яуланы! Өфө гроссмейстеры Денис Хисмәтуллиндың донъя вице-чемпионы Сергей Карякиндың тренерҙар штабына инеүе лә беҙҙең өсөн ғорурлыҡ. Спорт - тыныслыҡ һәм дуҫлыҡ илсеһе, ул сәйәсәттән ситтә торорға тейеш, тиҙәр һәм был ысынлап та шулайҙыр. Илдәр араһында килешеп йәшәү көйө китеп торғанда, Халыҡ-ара дуҫлыҡ көнөндә **(31)** был хаҡта ныҡлап уйланырға урын бар.

**Майай юбилярҙары:**

**4 -** яҙыусы, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Гөлсирә Ғиззәтуллинаға - 60 йәш** (1957).

**8 -** дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 1986-1990 йылдарҙа "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире, 1990-1994 йылдарҙа БР Премьер-министры урынбаҫары, 1994-1998 йылдарҙа БР Дәүләт секретары, РФ 4-се саҡырылыш Дәүләт Думаһы депутаты, БР Фәндәр академияһы вице-президенты, сәйәсәт фәндәре докторы, профессор, "Башҡортостан Республикаһы алдындағы ҡаҙаныштары өсөн" ордены кавалеры **Мансур Әюповҡа - 70 йәш** (1947).

**-** прозаик, БР Яҙыусылар берлеге ағзаһы **Хәлил Һөйөндөковка - 60 йәш** (1957).

**11 -** БДМУ-ның кеше анатомияһы кафедраһы мөдире, медицина фәндәре докторы, профессор, С. Юлаев ордены кавалеры **Вәсилә Ваһаповаға - 75 йәш** (1942).

**19 -** йәмәғәт эшмәкәре, БР Ҡатын-ҡыҙҙары берлеге рәйесе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Рәшиҙә Солтановаға - 70 йәш** (1947)

**31 -** дәүләт эшмәкәре, журналист, 1986-1987, 1997-2001 йылдарҙа БР мәҙәниәт министры, 1990-1996 йылдарҙа "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Тәлғәт Сәғитовҡа - 75 йәш** (1942).

Юбилярҙарҙы "Киске Өфө" гәзите колективы һәм уҡыусылары исеменән дә ихлас ҡотлайбыҙ. Барлыҡ матур теләктәребеҙҙе юллайбыҙ уларға!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Өфө агломерацияһындағы төп магистраль юлда - Салауат Юлаев проспектында асфальттың тәүге ҡатламын түшәү башланды. Юл төҙөүселәр төндә эшләй. План буйынса ремонт июль аҙағына тамамланырға тейеш. "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" программаһын ғәмәлгә ашырыу барышында Өфөлә 29 урамды төҙөкләндереү һәм юл-транспорт ваҡиғаһы йыш теркәлгән 20 урынды бөтөрөү, йәйәүлеләр ҡоймаларын ҡуйыу, светофорҙарҙы һәм юл билдәләрен яңыртыу күҙаллана. Саралар ағымдағы йылда тулыһынса тормошҡа ашырыла.

✔Башҡортостанда республиканың иң көньяҡ нөктәһен билдәләнеләр. Ошо хаҡта мәғлүмәт Ейәнсура районында үткән "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар" байрамында яңғыраны. Нәҡ Ҡужанаҡ Башҡортостандың иң көньяҡ нөктәһе булып тора, тип хәбәр итте байрамда ҡатнашыусы Ейәнсура районы хакимиәтенең эштәр менән идара итеүсеһе Басир Хәбибуллин. "Башинформ" агентлығына Рус география йәмғиәтенең Башҡортостан төбәк бүлексәһендә был мәғлүмәтте раҫланылар. Унда яҡын арала ошоно билдереүсе махсус стела ҡуйыласаҡ.

✔Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышы тәбиғәте Нуриман районында үҙәк менән балыҡсылыҡ кластерын булдырыу мөмкинлеге бирә. Ошо турала ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов республикаһның төньяҡ-көнсығыш районларында инвестиция проекттарын тормошҡа ашырыу мәсьәләләре буйынса кәңәшмәлә белдерҙе. Уның билдәләүенсә, кластерға етештереү, эшкәртеү, балыҡты һәм балыҡ продукцияһын һатыу, шулай уҡ тере балыҡ баҙары селтәрен асыу инергә тейеш.

✔Рәсәй милли умартасылар союзы "Апимондия" бөтә донъя умартасылыҡ ассоциациялары федерацияһы Башҡарма комитетынан 47-се "Апимондия" халыҡ-ара конгресын һәм 2021 йылда "АпиЭКСПО" халыҡ-ара күргәҙмәһен уҙғарыуға Рәсәй Федерацияһы ғаризаһын теркәү тураһында рәсми хат алды. Ошо ҙур сараны уҙғарыу урыны итеп Башҡортостан Республикаһы тәҡдим ителгән. Конгресты һәм күргәҙмәне ҡабул итеү хоҡуғына шулай уҡ Дания, Сербия һәм Словения күрәшә.

**"Башинформ"дан.**

✔ Ирек Ишмөхәмәт улы үҙ сығышында һуңғы 25 йыл эсендә Өфөлә тәүге тапҡыр инженер һөнәренең абруйлылыҡ буйынса иҡтисадсы, юрист, бухгалтер, менеджер һөнәрҙәрен уҙып китеүен белдерҙе.



БАШ ҠАЛАМ

# ТЕАТРМЫ, ЦИРКМЫ БЫЛ ТОРМОШ?

**Йәй - каникулдар мәле. Ҡала балалары ауылдағы олатай-өләсәйҙәренә ҡунаҡҡа ҡайтһа, ауылдыҡылар, киреһенсә, баш ҡалаға килеп, парктарҙа йөрөргә, төрлө аттракциондарҙа ҡатнашырға, циркта булырға хыяллана. Әммә быйыл суд цирк бинаһын файҙаланыуҙы тыйҙы. Өс экспертиза һөҙөмтәһендә бинаның кеше ғүмерҙәре өсөн хәүефле булыуы асыҡланған. Әлеге ваҡытта ундағы хайуандар Магнитогорск ҡалаһындағы Дәүләт циркы учреждениеһына күсерелгән. Башҡорт дәүләт университеты профессоры, философия фәндәре докторы Гүзәл ВИЛДАНОВАға ошо мәғлүмәт айҡанлы өндәштек.**

**➔ Һеҙ, ҡалала йәшәүселәр, балаларығыҙҙы циркка йыш алып бараһығыҙмы? Үҙегеҙ циркта нисә йәшегеҙҙә булдығыҙ?**

- Үҙем - ауыл балаһы, ун йәшемдә, дүртенсе класта уҡыған сағымда, 1984 йылда мәктәптән көҙгө каникулға Өфөгә алып килгәйнеләр. Әммә ул саҡтағы ваҡиғаларҙан бер нәмә лә хәтеремдә ҡалмаған. Ә бына Учалыға килгән циркта стена буйлап мотоциклда йөрөүҙәре иҫемдә ҡалған. Балаларымды Өфөлә йәшәгән осорҙа бер тапҡыр ғына циркка алып барҙым, сөнки билет хаҡы ҡиммәт булғанлыҡтан, йыш йөрөтөү мөмкинлеге юҡ. Бәләкәс малайыма 5 йәш ине. Уға велосипедта йөрөгән айыуҙар ныҡ оҡшаны. Уларҙы айыу булып кейенгән кешеләр, тип уйланы.

**➔ Цирктағы хайуандарға мөнәсәбәтегеҙ ниндәй: йәлләйһегеҙме, әллә улар балаларға үҙ һәләтен үҫтереү өсөн стимул була аламы?**

- Цирктағы йәнлектәрҙең төрлө яҡлап һәләттәрен күрһәтеүе балаларҙың үҫешенә тәьҫир яһаймы, уларҙы нимәләр эшләргә дәртләндерәме икәнен белгестәр генә әйтә алалыр. Миненсә, цирк балаларға ғына түгел, ололарға ла ҡыуаныс, ыңғай эмоциялар бүләк итә. Шуға ла "йәкшәмбе атайҙары" ҡайны ваҡытта, киноларҙағы кеүек, баланы күрмәй тороуҙарын уларҙы циркка алып барыу менән компенсациялайҙыр инде.

**➔ Тормош - театр, тиергә яратһаҡ та, бөгөнгө тормош циркка тартым түгелме?**

- Тормоштоң циркмы, түгелме, уныһы кешенең үҙенә бәйле. Театрҙағы кеүек - битлектәр, цирктағы кеүек дрессировкаға бирелгән йәнлектәр араһындағылай хис итәһеңме үҙеңде, әллә үҙеңдән башҡа һәр кешене - Хоҙайҙың кешеһе, әүлиә тип ҡабул итәһеңме, шунан тора барыһы ла. Тормошҡа ниндәй күҙ менән бағаһың, ул көҙгөләге кеүек, шуны сағылдыра. Әммә тормошта, йәмғиәттә битлек (йәмғиәттәге ролдәр) кеймәй булмай, сөнки йәмғиәттә йәшәп, унан азат була алмайһың. Иң мөһиме - битлегеңә ныҡлап йәбешмәскә, ваҡытында уны сисә белергә кәрәк, яһалмалыҡ түгел, ысын ихласлыҡ мөһим!

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ӨФӨ - ЙӘШТӘР ҠАЛАҺЫ



**27 июнь Бөтә Рәсәй йәштәре көнөндә Өфөнөң Ҡунаҡһарай сауҙа һәм эш комплексы алдында баш ҡала йәштәре һәм ҡунаҡтары өсөн концерт, бейеүселәр "алышы", "Мин Рәсәйҙә тыуғанмын" флешмобы, Театр һәм Ленин скверҙарында халыҡ һөнәрселәре, төрлө уҡыу һәм өҫтәмә белем биреү учреждениелары, тыңәрәктәр күргәҙмәләре һәм башҡа саралар ойошторолдо.**

Йәштәр көнө Рәсәйҙә РФ Президентының 1993 йылғы ҡарарына ярашлы йыл да ойошторола. Өфөлә ул быға тиклем Салауат Юлаев майҙанында үтһә, быйыл уны ҡала үҙәгенә күсерергә ҡарар ителгән. Өфө ҡала округы хакимиәтенең Йәштәр эштәре буйынса комитеты һәм БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы тарафынан ойошторолған байрамдың саранынңың иң төп үҙенсәлеге, моғайын, "Ете ҡыҙ" һәйкәленең ете бейеүсе ҡыҙ ярҙамында "терелеүе" һәм төн уртаһында йорттар диуарҙарында видео-шоу күрһәтелеүе булғандыр. Тағы, ойоштороусылар белдереүенсә, сарала 5 мең туңдырма бушлай таратылды. Былтыр ошо уҡ байрамда йәштәргә 1 мең туңдырма таратылған булған.

Йәнә был көндә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов менән БР йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Андрей Иванюта эшсе йәштәр менән осрашты. Ирек Ишмөхәмәт улы үҙ сығышында Өфөлә 35 йәшкә тиклемге 450 мең йәш кеше йәшәүен, шунлыҡтан, Өфө - йәштәр ҡалаһы булыуын, миллион халҡы булған ҡалаларҙа сифатлы кадрҙарға ҡытлыҡ барлығын, һуңғы 25 йыл эсендә Өфөлә тәүге тапҡыр инженер һөнәренең абруйлылыҡ буйынса иҡтисадсы, юрист, бухгалтер, менеджер һөнәрҙәрен уҙып китеүен белдерҙе.

Ямғыр әлеге сараға ла ҡамасауларға маташты. Шуға ҡарамаҫтан, йәштәр сәхнә эргәһенән китмәне. Йыр һүҙҙәренә ауаздаш итеп әйткәндә, йәштәр сәхнә ҡөйөнә һәм "ямғыр йырына" тыпыр-тыпыр бейене. Бер һүҙ менән әйткәндә, эх, йәшлек!

**Илгизәр БУЛАТОВ.**

# ТЫУЫМДЫ НИСЕК АРТТЫРЫРҒА?



**Владимир Путин менән тура эфирҙа Башҡортостанда яңы тыуған сабыйҙы күрһәттеләр. Был хәл Өфөләге "Әсә һәм бала" госпиталенән тура эфирға сыҡҡан мәлдә булды. Владимир Путинға һораүҙы госпиталдең табип-акушеры Руслан Ғарифуллин бирҙе. Ул дәүләт етәксеһенән тыуымды арттырыу пландары менән ҡыҙыҡһынды.**

"90-сы йылдарҙа беҙ тыуымдың 50 процентҡа кәмеүен кисерҙек, был 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышының шаңдауы булды, уға СССР-ҙың тарҡалыуы эҙемтәләре, халыҡтың йәшәү кимәленең түбәнәйеүе, эшһеҙлек йоғонто яһаны. Тыуымдың кәмеүе 25 йыл һайын ҡабатланып тора. Хәҙер бала табыу йәшендәге йәш ҡатын-ҡыҙҙарҙың аҙайыуын күрәбеҙ. Хәлде яҡшыртыу өсөн дәртләндереүсе программалар кәрәк. Әсәлек капиталын түләү механизмы унышлы эш күрһәтте, уны ете миллиондан ашыу ғаилә алды ла инде, яртыһы аҡса менән файҙаланды. Ҡатмарлы демографик хәл күҙәтелгән ҡайны бер төбәктәрҙә өсөнсө бала өсөн түләү ҡаралған һәм тыуым арта. Шулай уҡ йәш әсәләр - беренсе балаһын, өлкәнерәк әсәләр икенсе һәм артабанғыларын тапһын өсөн дәртләндереү саралары кәрәк, тип иҫәпләйем", - тип яуап бирҙе Владимир Путин.

# БЕРЕНСЕ БАЛА ӨСӨН...



**Башҡортостанда "Минең документтарым" күп функциялы үҙәктең бөтә офистары ла бер тапҡыр бирелә торған 300 мең һумлыҡ социаль түләүгә документтар ҡабул итә башланы. Ошо хаҡта Күп функциялы үҙәктең рәсми порталында хәбәр ителә.**

Алдан йәш ғаиләләрҙән ғаризалар Өфөлә республиканың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетында ғына ҡабул ителә ине. Ул республиканың алыҫ төбәктәрендә йәшәүселәргә өҫтәмә ҡыйынлыҡтар тыуҙырҙы. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Указына ярашлы, торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж ғаиләләр тәүге сабыйҙары өсөн 300 мең һум күләмендә дәүләт ярҙамы алыуға хоҡуҡлы. Мотлаҡ шарт - ҡатын-ҡыҙҙың беренсе балаһы булырға, ир менән ҡатындың йәше 35-тән артмаҫҡа тейеш. Шул уҡ ваҡытта сабыйҙары 2017 йылдың 1 ғинуарынан 2018 йылдың 31 декабренә ҡәҙәр республика биләмәһендә тыуған ғаиләләр генә ошо ярҙамға дәғүә итә ала. Ғаилә тәүге балаһы тыуғандан алып алты ай дауамында социаль түләүгә документтар тапшырыуға хоҡуҡлы.

# ТҮЛӘҮ АРТҺА...



**Башҡортостанда күп балалы ғаиләләргә социаль ярҙам күләмен ике тапҡырға, ай һайын өстән алты меңгә тиклем арттырырға ниәтләйҙәр. Был хаҡта республика башлығы Рөстәм Хәмитов "ТАСС" агентлығына хәбәр итте.**

"Әлеге ваҡытта йәш ярымдан алып өс йәшкәсә балалары булған ишле ғаиләләргә матди ярҙам өсөн республикалағы социаль ярҙам сараларының күләмен арттырыу тураһында мәсьәлә ҡарала. Күп балалы аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә йәш ярымдан

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Республикала ер участкаларына һәм капиталь төҙөлөш объекттарына дөйөм инвентаризация үткәреү башланды. Инвентаризацияның маҡсаты - ер ресурстарын файҙаланыуҙың һөҙөмтәлелеген күтәреү, шулай уҡ ер һәм капиталь төҙөлөш объекттарын файҙаланған өсөн түләүҙәр иҫәбенә туплана бюджеттың килем өлөшөн тулыландырыу. "Росреестр"ҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе урынбаҫары Марат Мирзаянов һүҙҙәренсә, яҡынса алғанда, 5,5 миллиондан ашыу ер участкаларына һәм капиталь төҙөлөш объекттарына дөйөм инвентаризация үткәреү талап ителә.

✔Башҡортостан биләмәһендә көндәрҙең ямғырлы тороуы арҡаһында йылғаларҙа һыуҙың артыуы күҙәтелә. Республиканың гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхит мониторингы мәғлүмәттәренә һылтанма яһап, Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, Йүрүҙән йылғаһында һыу 27 сантиметрға, Әсемдә - 22, Ағиҙелдә - 2, Инйәрҙә - 12, Ҡариҙелдә - 1, Әй йылғаһында 4 сантиметрға артҡан. Синоптиктар фаразлауынса, көслө ямғырҙар арҡаһында 23 июндән 27-нә тиклем төбәк биләмәһендә Әсем, Инйәр, Ләмәҙ тау йылғаларында артабан да һыу кимәленең күтәрелеүе көтөлә. Түбән урындарҙа йылғаларҙың һыубаҫар туғайға сығыуы ихтимал.

✔Башҡортостан биләмәһендә пассажир автобустары водителдәренең юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙарын асыҡлауға йүнәлтелгән иҫкәртеү саралары бара. Был хаҡта республика Дәүләт автоинспекцияһының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Ҡала һәм ҡала-ара әһәмиәтендәге йәмәғәт транспортының техник торошо тикшерелә. Водителдәр араһында уҫал ниәт менән штраф түләмәүселәр асыҡлана.

✔Руслан Әхмәтйәнов - "Салауат Юлаев" хоккей клубының яңы матбуғат секретары. Ул 2015 йылдан клубтың матбуғат хеҙмәтен етәкләгән Андрей Юртаевты алыштырҙы. Алдан Руслан Әхмәтйәнов Башҡортостан Республикаһы Башлығының Матбуғат хеҙмәте һәм мәғлүмәтләштереү идаралығында эшләне, 2016 йылдан дәүләт власы органдары эшмәкәрлеген яҡтыртыу буйынса бүлек мөдире урынбаҫары вазифаһын биләне. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, КХЛ чемпионатының 2017/2018 миҙгеле 21 августа башлана.

✓ *Студент ғаиләләре өсөн яңы социаль ярҙам сараларын индереү мәсьәләһе ҡарала. Атап әйткәндә, ошо ғаиләләрҙә бала тыуғанда 100 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү билдәләргә тәҡдим ителә.*



алып өс йәшкәсә өсөнсө йәки артабанғы һәр балаһы өсөн айлыҡ аҡсалата түләү күҙ уңында тотола. Ошо түләүҙе өстән алты мең һумға тиклем арттырырға тәҡдим ителә", - тине төбәк етәксеһе. Ул шулай уҡ ғаиләнең килеме йәшәү минимумының икеләтә дәүмәленән артмаҫҡа тейешлеген билдәләне. Рөстәм Хәмитов әйтеүенсә, уның указы буйынса демография һәм тыуымды арттырыу мәсьәләләре буйынса эш төркөмө ойошторолған, уға 2020 йылға тиклемге осорға эш планын әҙерләргә ҡушылған. Студент ғаиләләре өсөн яңы социаль ярҙам сараларын индереү мәсьәләһе ҡарала. Атап әйткәндә, ошо ғаиләләрҙә бала тыуғанда 100 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү билдәләргә һәм балалары булған студент һәм аспирант ғаиләләренә айлыҡ махсус социаль пособиеның күләмен 250 һумдан өс меңгә тиклем арттырырға тәҡдим ителә.

# АҠРЫНЛАП АҠСА ЙЫЙ



**Башҡортостан халҡынан торлаҡ өсөн аҡса туплау программаһы буйынса льготалы ипотека кредитын алыуға 300 самаһы ғариза килгән. Шуларҙың 30-ҙан ашыуы хупланған һәм ғариза биреүселәр торлаҡ һатып алырға әҙер, тип хәбәр иттеләр республиканың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәтендә.**

Торлаҡ өсөн аҡса туплау программаһы граждандарҙың 3-6 йыл буйына банктарҙа аҡса йыйып, артабан түбән процент ставкаһы (йылына 6-7%) буйынса торлаҡ һатып алыуға ипотека кредиты алыуҙы күҙ уңында тота.

Өҫтәүенә, программала ҡатнашыусыларға республика ҡаҙнаһынан тупланма иҫәпкә айлыҡ иғәнәләрҙең суммаһынан 30 процентҡа тиклем күләмдә адреслы дәүләт түләүе күсерелә. Аҡса туплау осоро тамамланғас, программала ҡатнашыусы йылына 6-7 процент менән 4,5-9 йылға льготалы кредит алыу мөмкинлегенә эйә була. Торлаҡ өсөн аҡса туплау системаһы тураһында тулыраҡ мәғлүмәтте Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты, Төҙөлөш һаҡламдарын үҫтереү буйынса дирекция һәм Һаҡлыҡ, Уралсиб банктарының ҡыҙыу линия телефондары буйынса алырға мөмкин: 8 (347) 218-08-93; 8 (347) 285-00-97.

*ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ*

**22 июндә Башҡортостан Фәндәр академияһының ултырыштар залында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының киңәйтелгән ултырышы үтте. Көн тәртибенә "Башҡорт телен өйрәнеүҙең әһәмиәте, уны һаҡлауҙың, үҫтереүҙең проблемалары һәм хәл итеү юлдары" темаһы сығарылды. Был мәсьәлә даими рәүештә күтәрелеп тора һәм был юлы ла башҡорт теленең ҡулланылышы, үҫеше һәм уның киләсәге өсөн тәү сиратта башҡорттар үҙебеҙ яуаплы һәм ошо йүнәлештә ең һыҙғанып эшләргә тейеш икәнлегебеҙ тағы бер ҡат раҫланды. Әммә әлегә һүҙ һөйләүҙән ары киткәнебеҙ юҡ.**




# БАШҠОРТ ТЕЛЕМЕ?

## Ул мотлаҡ уҡытылырға тейеш!

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары май айында мәғариф өлкәһендәге норматив документтарҙың үтәлешен өйрәнеү маҡсатында Архангел, Ауырғазы, Дәүләкән, Ейәнсура, Йылайыр, Күгәрсен, Стәрлебаш районтарының 30 мәктәбен тикшерҙе. Шул уҡ айҙа баш ҡалалағы бер төркөм ата-әсәләр "Рус телле уҡыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса" комитет төҙөп, мәктәптәрҙә, аныҡлап әйткәндә, 39-сы гимназияла, йәнәһе лә, башҡорт телен көсләп уҡытыу, ата-әсәләрҙе уҡытыу планын һайлау хоҡуғынан мәхрүм итеү мәсьәләһен күтәрҙе. БР Мәғариф өлкәһен контролләү һәм тикшереү буйынса идаралыҡ менән БР Прокуратураһы улар яҙған хатты сәбәп итеп алып, шулай уҡ Башҡортостандың белем биреү учреждениеларын тикшерҙе. Тәүге тикшереү мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу мәсьәләләренә ҡағылһа, икенсеһе - дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыуҙы үҙ эсенә алды. Әлбиттә, бөгөнгө ысынбарлыҡта ике мәсьәлә лә мөһим. Шул уҡ ваҡытта, әгәр туған тел булараҡ башҡорт телен уҡытыу федераль дәүләт белем биреү стандарттарына индерелеп, ҡанунйәт йәһәтенән нығытылһа, дәүләт теле булараҡ башҡорт теле яҡлаулы ла, яҡлауһыҙ ҙа.

Туған тел булараҡ башҡорт теле уҡытылған мәктәптәрҙә лә башҡа милләт балаларының хоҡуғы боҙолмай, сөнки улар был ваҡытта параллель рәүештә үҙҙәренең туған телен өйрәнә, йәғни татарҙар - татар, рустар - рус теле төркөмөндә уҡый. Ә бына рус мәктәптәрендә башҡорт теле дәүләт теле булараҡ уҡытыла һәм ул уҡыу пландарының вариатив өлөшөндә тормошҡа ашырыла. Ә закон буйынса хәҙер уҡыу планының вариатив өлөшөндә өйрәнеләсәк предметтар ата-әсәләрҙең дә фекерен иҫәпкә алып һайлана һәм, әгәр улар ҡаршы булғанда, башҡорт теле уҡытылмауы ла ихтимал.

Ул мотлаҡ уҡытылһын өсөн уны урындағы Мәғариф министрлығы төбәк уҡытыу предметы статусы биреп, нығытып ҡуйырға тейеш була. Быны 2012 йылда донъя күргән РФ Мәғариф һәм фән министрлығының рекомендацияһы ла рөхсәт итә. Унда: "РФ субъекттары төбәк белем биреү программалары әҙерләргә, әсбаптарға (төбәк) экспертиза үткәрергә, әсбаптар нәшер итергә хоҡуҡлы", - тип яҙылған. "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" Федераль законда "...милли республикаларҙың икенсе дәүләт телдәре был республикаларҙың закондары нигеҙендә өйрәнелә", тигән юлдар бар.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*ҠЫҪҠАСА*

# ТӘҮГЕЛӘР ИҪӘБЕНДӘ

✓ "Эксперт" аналитика үҙәге менән "Русский репортер" журналы берлектә үткәргән "Рәсәй мегаполистары рейтингы - 2017" тикшеренеү проекты һөҙөмтәләре буйынса Өфө тәүге ун ҡала иҫәбенә инде. Унда халҡы 600 мең кешенән күберәк булған мегаполистар ҡатнаша һәм анализ бер нисә критерий буйынса яһала: экология, медицина, юл инфраструктураһы, именлек, төҙөкләндереү һ.б. Шулай уҡ рейтингка SuperJob.ru порталы ойошторған, "Ҡалағыҙ ни өсөн оҡшай йәки оҡшамай?" тигән һорау алыу һөҙөмтәләре лә йоғонто яһай. Тикшеренеүселәр билдәләүенсә, һуңғы йылдарҙа халыҡтың үҙ ҡалаһына ҡарашы ыңғай яҡҡа үҙгәрә. 2014 йылда үткәрелгән тикшеренеүҙәр ваҡытында Өфө беренсе унау иҫәбенә инмәгәйне.

✓ 4-9 июлдә Литваның Каунас ҡалаһында Халыҡ-ара Йәйге Балалар уйындары үтә. Унда Өфөнән еңел атлетика, дзюдо һәм 3х3 баскетбол ярыштарында 13 спортсы ҡатнаша. 2013 йылда Өфө бындай уйындарҙы үткәрҙе инде. Киләһе ярыштарҙы баш ҡала 2019 йылда ҡабул итәсәк. Ошо көндәрҙә Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов ошо хаҡтағы Указға ҡул ҡуйҙы.

✓ Балаларҙың йәйге һауыҡтырыу лагерҙарында туҡланыуҙы тәьмин итеү мәсьәләһе муниципалитеттың Эшҡыуарлыҡ, ҡулланыусылар баҙары һәм туризм идаралығының айырым иғтибар үҙәгендә тора. Быйыл баш ҡала балалары өсөн ҡаланан ситтә - 24, шул иҫәптән 8 муниципаль лагерь ойошторолған. Уларҙың барыһында ла аҙыҡ-түлек блогының санитар нормаларға һәм ҡағиҙәләргә тап килеүе тикшерелгән, өҫтәмә ҡорамалдар һәм йыһаз килтерелгән. Ведомство лагерҙарында бер баланың туҡланыуы 250 - 800 һум тора.

✓ "Ҡашҡаҙан" ҡала паркында йәйгеһен киң күләмле төҙөкләндереү эштәре башҡарыласаҡ. Проектҡа ярашлы, бында йыл әйләнәһенә төрлө саралар үткәреү мөмкинлеге булдырыласаҡ. Үҙгәрештәр парктың үҙәк өлөшөнә ҡағыласаҡ. Үҙәк аллеяны амфитеатр тамамлаясаҡ һәм ул битләүҙә урынлашасаҡ. Унан күл күренеп торасаҡ, ә төрлө саралар барышында яр буйына сәхнә урынлаштырыласаҡ. Башҡа ваҡытта был майҙан яр буйында ял итеү урыны булып торасаҡ.

✓ М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының "Сәлих" социаль-мәғариф үҙәгендә Башҡортостан Республикаһында һәләтле балаларға ярҙам итеү мәсьәләләре буйынса ултырыш үтте. Унда Өфө ҡалаһының да тәжрибәһе ҡаралды. Баш ҡалала һәләтле балалар менән эшләү формаһы булып предмет олимпиадалары, БР уҡыусыларының Кесе фәндәр академияһы сиктәрендәге тикшеренеү эштәре конкурсы, фестивалдәр, ижади, интеллектуаль проекттар, конференциялар тора. Уларҙа уҡыусыларҙың 80 проценты самаһы ҡатнаша. Бөтә Рәсәй кимәлендәге олимпиадаларҙа ҡатнашыусы Өфө уҡыусыларының һаны арта. Йыл һайын 200 еңеүсе һәм призер билдәләнә, ҡаланың иң яҡшы 60 уҡыусыһы Өфө ҡала хакимиәте башлығының стипендияларына лайыҡ була.

✓ Баш ҡалала 11 ял зонаһы - рәсми пляждар эшләй: "Ҡояшлы", "Ағиҙел", "Шарлауыҡ", "Ҡояшлы яр", "Һупайлы Сочиһы", "Ҡомло", "Карьерлы", "Ҡашҡаҙан", "Гольфстрим", "Ожмах яры", "Матур". Бөгөн рекреацион маҡсатта файҙаланылған һыу объекттарының гигиена талаптарына тап килеүе тураһында санитар-эпидемиология һығымтаһын "Ҡашҡаҙан" һәм "Ҡояшлы яр" пляждары ғына алған, "Һупайлы Сочиһы" менән "Карьерлы" тикшереү үтә. Башҡа пляждарҙа, йылы көндәрҙә тейешле саралар үткәрелмәүе һәм һауа шарттарының боҙолоуына бәйле, һыу сифатының насарайыуы күҙәтелә.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тән күгәрһә, бешһә...

❖ Бәрелгән урынға шунда уҡ тигеҙ күләмдә ҡушылған һыу һәм аш һеркәһе иҙелмәһе менән сылатҡыс яһарға. Был ҡан төйөлөүҙән һаҡлар, шешеүҙе бөтөрөр.

❖ Йәрәхәтләнгәндән һуң тән күгәреп сыҡһа, 1 сәғәткә этколаҡ (окопник) үләне төнәтмәһенән сылатҡыс һалырға. Төнәтмә өсөн 30 грамм үләнгә ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, 10-15 төнәтергә, һөҙөргә.

❖ Күгәргән урынға кәбеҫтә япрағы һалалар. Бының өсөн кәбеҫтә япрағын эҫе һыуҙа тоталар, уҡлау менән йәйәләр, тәнгә һалып, бинт менән нығыталар.

❖ Тән бешеүе бик етди йәрәхәт. Бешкән урынды шунда уҡ ағып торған һалҡын һыуҙа тоторға, был ауыртыуҙы баҫа.

❖ Сей картуф та ярҙам итә. Ҡырғыстан үткәреп, бешкән урынға ҡуйырға.

❖ Һыуынған сәй менән шулай уҡ янған урынды дауалайҙар. Йәрәхәтләнгән урынға йоҡа ғына итеп марля һалалар һәм уны сәй менән еүешләп торалар.

❖ Янған урында күпертке барлыҡҡа килһә, 1 сей йомортҡа, 10 грамм үҫемлек майы, 2 ҡалаҡ ҡаймаҡты ҡушып болғатып, күперткегә һөртөргә һәм бәйләп ҡуйырға. Тәүлегенә 1 тапҡыр алыштырырға.

### Йөрәк ауыртҡанда

❖ 1 ус яңы ғына йыйылған гөлйемеш сәскәһенә ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай.

### Күреү һәләтен яҡшыртыу

❖ 100-әр грамм гөлйемеш, аир тамыры, ҡара мышарҙы ҡушып болғатырға. 2 ҡалаҡ ошо ҡатнашманы кистән термосҡа һалып, 2 стакан ҡайнар һыу өҫтәргә. Төнө буйы төнәтергә, иртән һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан 1 сәғәт алда 100-әр мл эсергә.

❖ Йәш кесерткәнде ҡайнар һыу менән бешекләргә, йәшел һуған, ҡаймаҡ өҫтәп, көн һайын ашарға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✔ *Ҡайҙа улар, башҡорт халҡының абруйлы, милләт яҙмышын иң алғы рәттәрҙә тороп хәл итергә тейешле, кәрәк икән, өйҙән-өйгә йөрөп башҡорттарға башҡортлоҡто аңлатырға тейешле вәкилдәре?*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

### Фәрештә менән осрашыуы

Мөхәммәттең күңеле бер аҙ тыныслана, тик был һуҙҙәргә лә тулыһынса ышана алмай. Хәүефләнә. Сөнки фәрештәне яуыз рух тип уйлап, ул әйткән доғаны һанға һуҡмау - ҙур гонаһ. Килгән йән әйәһе яуыз рух булып сығып, ул әйткән һүҙҙәр менән доға ҡылыу - тағы ла ҙурыраҡ гонаһ. Мөхәммәт ни эшләргә лә, ни тип уйларға ла белмәй аптырана.

Оҙаҡламай был йән эйәһе Мөхәммәттәрҙең өйөнә килә башлай. Килеп, өндәшмәй генә ҡарап тора ла, сығып китә. Мөхәммәт унан ҡурҡа һәм тик ҡурҡыу менән бер юлы бик ҙур өмөт бағлай. Был йән эйәһен Мөхәммәт тик үҙе генә күрә. Башҡалар, шул йән эйәһен һиҙһә лә, уны күреү һәләтенә эйә булмай.

Хәҙисә Мөхәммәткә ярҙамға килергә була.

- Йоҡлап китһәм, йән эйәһе килгәс, уятырһың, - ти ул.

Төндә йән эйәһе тағы килә. Мөхәммәт иплəп кенә ҡатынын уята.

- Тор ҙа минең һул яғымдан ултыр, - ти уға Хәҙисә.

Мөхәммәт ҡатынының һул яғына барып ултыра.

- Ул һаман бындамы? - тип һорай Хәҙисә.

- Бында...

- Хәҙер урап үт тә, уң яғымдан ултыр, - ти Хәҙисә.

Мөхәммәт ҡатынының уң яғына барып ултыра ла, йән эйәһенең һаман шул урында тороуын әйтә.

Ошо арала Хәҙисә, иренә һиҙҙермәй генә, юрғанын аса. Мөхәммәт шунда уҡ:

- Ул китте, - ти.

- Ҡыуан! Ул - фәрештә, яуыз рух түгел! - тип шатлығынан ҡысҡырып ебәрә Хәҙисә. Сөнки фәрештә - изге йән - шәрә ҡатын менән бер бүлмәлә ҡала алмай. Яуыз рухтың быға иҫе лә китмәҫ ине.

Күп тә үтмәй, фәрештә Мөхәммәткә яңы асылыштар алып килә лә:

- Мөхәммәт! Мин - Ябраил фәрештә. Ә һин - Алла тарафынан билдәләнгән бәйғәмбәр! - тигән хәбәр килтерә.

### Тәүге мосолмандар

Ябраил фәрештә Мөхәммәт бәйғәмбәргә бик йыш килә башлай. Илаһи Ҡөрьәндә яҙылғандарҙы өлөшләп-өлөшләп уның аңына еткерә. Әйтергә кәрәк, бәйғәмбәрҙәр менән аралашыу һәм уларға Изге яҙмалар биреү Ябраил фәрештәнең һәр ваҡыт төп йөкләмәһе була. Асыҡланыуынса, ул Әҙәмгә ун ике тапҡыр, Ибраһим бәйғәмбәргә ҡырҡ ике тапҡыр, Муса бәйғәмбәргә дүрт йөҙ тапҡыр, Мөхәммәт бәйғәмбәргә егерме дүрт мең тапҡыр килә. Асылыштарҙың байтағын Мөхәммәт бәйғәмбәр йоҡлаған ваҡытта ала. Уянғас, ишетелгән һәр һүҙ хәтеренә уйылып ҡуйылғанын тоя.

Уяу ваҡытта ла асылыштар килә уға. Асылыш килер алдынан ул ҡалтырана башлай, тәнен һалҡын тир баҫа. Мөхәммәт тиҙ генә бөркәнеп ятырға ашыға. Ҡайһы берҙә асылыш ҡабул иткән саҡта аңын юғалта. Аңын юғалтмаған саҡтар ҙа була. Был осраҡта ул һүҙҙәр түгел, ә ҡыңғырау сыңына оҡшаған тауыш ишетә. Был тауыш туҡтағас ҡына Мөхәммәт бәйғәмбәр ебәрелгән һүҙҙәрҙе аңлай.

(Дауамы бар).

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕМЕ?

## Ул мотлаҡ уҡытылырға тейеш!


(Башы 5-се биттә).


Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында" законында башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуға бәйле аныҡ аңлатмалар бирелмәй. Шуғалыр ҙа Башҡортостан Мәғариф министрлығы чиновниктары дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыу планын мәктәп компоненты кимәленә төшөрә. Ошо күҙлектән ҡарағанда, ата-әсәләр ҡаршы булған осраҡта, рус һәм башҡа милли мәктәптәр яңы уҡыу йылынан рәжәғәт иткән Д. Н. Козловтың ялыуын ҡарауҙан баш тарта, сөнки республикаларҙың дәүләт телдәрен белем биреү учреждениеларында мотлаҡ уҡытыу, республикаларҙың дәүләт телен уҡыуҙан бөрөүҙең дә баш тарта алмауы тураһындағы документ (үрҙә атап кителгән 2004 йылдың 16 ноябрендәге 16-П ҡарар) бер тапҡыр ҡабул ителгән һәм ул һаман да көсөндә ҡала. Тимәк, ошондай осраҡтарҙа ла Рәсәй Федерацияһының барлыҡ милли субъекттарында рус ҡорт теле әсбаптары ҡулланыуға яраҡһыҙ тип табылғанда, Татарстандың 21 китабы талаптарға тура килә ине инде. Беҙҙекеләр тағы һуңланы. Ярай, иҫке китаптар менән уҡытыуҙы 2018 йылға тиклем рөхсәт итте-




дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡыуҙан баш тартыуы һәм был белем биреү учреждениеларында дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыу бөтөрөлөүе ихтимал. Шул уҡ ваҡытта, бынан тиҫтә йылдар самаһы элек Татарстан Республикаһында ла шундай инцидент күҙәтелә һәм ата-әсәләрҙең береһе хатта ошо мәсьәләне РФ Конституция Суды кимәленә алып барып еткерә һәм... енелә. Рәсәй Федерацияһының Конституция суды 2004 йылдың 16 ноябрендә 16-П һаны аҫтында Татарстанда башланғыс, дөйөм һәм урта һөнәри белем биреү учреждениеларында дәүләт теле булараҡ татар телен уҡытыу илдең Төп Конституцияһына ҡаршы килмәүе, сөнки татар телен өйрәнеү уҡыусыларға йомғаҡлау аттестациялары үтеүгә, төп дөйөм белем һәм юғары белем алыу тураһында документ алыуға ҡөртә булып тормауы; был Ҡарарҙың һуңғы булыуы, ҡабаттан ҡаралмауы, ҡабул ителеү менән көсөнә инеүе һәм башҡа органдар, вазифалы кешеләрҙән раҫлауын талап итмәүе билдәләнә.

2011 йылдың 27 ғинуарында РФ Конституция Суды 88-0-0 һанлы билдәләмәһендә Сыуашстандан шундай уҡ һорау менән мөтеле менән бер ҡатарҙан икенсе дәүләт телен уҡытыуға юридик нигеҙ бар, тип иҫәпләргә мөмкин.

Ләкин, БР Прокуратураһының республика мәктәптәрен тикшереп, уҡытыу процесындағы етешһеҙлектәрҙе асыҡлап ҡарар сығарыуынан һуң, хатта республика Башлығы Рөстәм Хәмитовтың мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу буйынса сара күреләсәге тураһында белдереүен иҫәпкә лә алмайынса, баш ҡаланың ҡайһы бер мәктәптәрендә уҡытыусыларға 2017/2018 уҡыу йылында уҡыу планы үҙгәреү һәм башҡорт телен өйрәнеүгә бүленгән сәғәттәрҙең кәмеү ихтималлығы тураһында иҫкәртеү (уведомление) таратылған да инде. Ирекһеҙҙән, тағы ла "Афарин!" тиергә генә ҡала. Сөнки башҡорт теленә ҡаршы булыусылар мөғлүмәт булыу менән уны ғәмәлдә ҡуллана, ә башҡорттар, кәмәһенә һыу инә башлағансы, битарафлыҡта йөрөй бирә. Шулай булмаһа, бынан бер нисә йыл элек төбәк компоненты ингән фәндәрҙе, шул иҫәптән башҡорт телен дә, Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығы грифы менән нәшер ителгән дәреслектәр менән уҡытыу мотлаҡ икәнлеге асыҡланып, башлар, әммә мәғариф системаһында йыл 1 ғинуарҙан түгел, ә 1 сентябрҙән башлана икәнен дә онотоға ярамай. Икенсенән, 2014 йылда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ошо мәсьәләгә һәм башҡорт телен (шул иҫәптән дәүләт теле булараҡ та) уҡытыуға бәйле киңәйтелгән ултырыш үткәрҙе. Унда урындағы ҡоролтай рәйестәре, хакимиәт башлыҡтарының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫарҙары, мәғариф идаралыҡтары етәкселәре ҡатнашты. Иң ҡыҙыҡлыһы - ҡатнашыусыларҙың барыһына ла туған телдәрҙе уҡытыуҙы яҡлаған хоҡуҡи норматив-тар тупланмаһы бирелде һәм улар артабан мәктәп директорҙарына, уҡытыусыларға еткерелергә тейеш ине. Ҡоролтай ултырышының һөҙөмтәһе бөгөн килеп асыҡ күренде лә инде: башҡорт теле уҡытыусылары үҙҙәрен яҡлай алырлыҡ хоҡуҡи белемгә эйә түгел. Бында, әлбиттә, БР Мәғариф министрлығынан алып, БДБҠ, башҡа йәмәғәт ойошмалары һәм милли матбуғат сараларының эшләп еткермәүен дә билдәләргә кәрәк. Ләкин таяҡтың иң ауыр башы Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетына һәм уның барлыҡ саҡырылыш делегаттарына, Башҡарма комитет ағзаларына төшә. Өфөлә, башҡа ҡалаларҙа заманында зыялыларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәре асыуы өсөн башҡорт ғаиләләрен ҡала буйлап, өйҙән-өйгә эҙләп йөрөгәне мәғлүм. Бөгөн мәктәптәрҙә (нигеҙҙә, башҡа телле) ата-әсәләр балалары башҡорт телен уҡымаһын өсөн башҡорт теле дәрестәренән баш тартып, үҙҙәрен икенсе милләт итеп күрһәткәндә һәм был башҡорт теле уҡытыусыларының өнһөҙ ризалығы менән башҡарылған мәлдә, ҡайҙа улар, башҡорт халҡының абруйлы, милләт яҙмышын иң алғы рәттәрҙә тороп хәл итергә тейешле, кәрәк икән, өйҙән-өйгә йөрөп башҡорттарға башҡортлоҡто аңлатырға тейешле вәкилдәре? Башҡорттарҙың аумаҡайлығы һәм милләттәштәребеҙҙең үҙ теленә битарафлығында рустар ҙа, татарҙар ҙа, башҡа милләт вәкилдәре лә ғәйепле түгел икәнен һаман аңламайбыҙ...

Ғөмүмән, Башҡортостанда башҡорт теленә иғтибар һәм ихтирам тейешле кимәлдәме? Әгәр етәкселәр башҡорт телен белмәй, эш ҡағыҙҙары нигеҙҙә бер телдә генә алып барыла, ултырыштар-йыйылыштар рус телендә үтә икән, ниндәй ихтирам тураһында һүҙ булыуы мөмкин? Мәҫәлән, 14 июндә Татарстандың Дәүләт Советында Мәғариф, мәҙәниәт, фән һәм милли мәсьәләләр буйынса комитеты милли мәғариф мәсьәләләренә арналған ултырыш үткәрә. Уның эшендә ТР Дәүләт Советы рәйесе урынбаҫары Рима Ратникова, Премьер-министр урынбаҫары, мәғариф һәм фән министры Энгель Фәттәхов, муниципаль белем биреү учреждениеларының вәкәләтле органдарының профиль комиссиялары етәкселәре, комитет ҡарамағындағы эксперт советы ағзалары ҡатнаша. Ә нимә беҙҙең республиканың дәүләт органдары вәкилдәре ҡуҙғалмай? Ни өсөн "ныуға батыусыны ҡотҡарыу - батып барыусының үҙенең ҡулында" булырға тейеш һуң?

Эйе, бөгөн мәғариф өлкәһендә башҡортса уҡытыу, башҡорт телен уҡытыу, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу, дәреслектәр, уҡытыу пландары менән проблемалар булыуы асыҡланды, белем усаҡтарының уставтары ҡайтанан ҡарау талап ителә. Был йүнәлештә Мәғариф министрлығы һәм уға ҡараған учреждениелар, власть органдары, йәмәғәт ойошмалары берҙәм, бер йүнәлештә эш алып барғанда ғына ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәшергә мөмкин. Ҡыҫҡаһы, эшләргә кәрәк, йәмәғәт!

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

✓ *Ленин, татар менән башҡорттоң айырмаһын яҡшы аңлай һәм Өфө губернаһын тулыһынса Татар АССР-ына ҡушыуға ҡаршы була (Минзәлә өйәҙе менән Һамар губернаһының Бөгөлмә өйәҙе генә бирелә).*



ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ТЕМӘС БАШ ҠАЛА БУЛҒАНМЫ?




Әммә милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре автономиянан ситтә ҡалған милләттәштәре өсөн һәр ваҡыт һыҙланып йөрөй. 1921 йылда сығышы менән Бүздәк районы Аҡтау ауылынан булған башҡорт халҡының арҙаҡлы улы Башҡортостан хөкүмәте рәйесе Муллайән Халиҡов Өфө губернаһын Башҡортостан автономияһына ҡушырға тигән инициатива менән Мәскәүгә мөрәжәғәт итә. Йәғни ул 1917 йылдың декабрендә Өсөнсө Дөйөм Башҡорт ҡоролтайында ҡабул ителгән планды тормошҡа ашырырға тотона. М. Халиҡов Мәскәүгә ебәргән мөрәжәғәтендә Өфө губернаһын ғына түгел, хатта Ырымбур ҡалаһын, Татар АССР-ына бирелгән Минзәлә, Бөгөлмә ерҙәрен дә Башҡортостанға ҡушыуҙы һорай. Башҡортостан хөкүмәтенең ҡарарында былай тиелә:

"а) В основу Башкирской Советской Социалистической Республики берется Малая Башкирия в составе ныне существующей Башкирской республики с присоединением Златоустовского горнозаводского района, Архангельского клина (Уфимской губ.) Магнитной горы и минских башкир в составе 19 волостей Белебеевского и Уфимского уездов.

б) включить в состав Башреспублики г. Оренбург;

в) включить целиком ныне существующую Уфимскую губернию с городом Уфой;

г) включить башкирские волости Мензелинского уезда по реке Ик"

Әйткәндәй, 1920 йылда, Татар АССР-ын ойоштороу эше барған мәлдә, татар эшмәкәрҙәре Өфө губернаһын тулыһынса Татар республикаһына биреүҙе һорай. Үҙәк мосолман комиссариаты рәйесе Мирсәйет Солтанғәлиев бер төркөм татар эшмәкәрҙәре менән ошо мәсьәлә буйынса Ленинға инеп сыға. Күпселек башҡорттар йәшәгән Өфө губернаһын тәҙәләсәк Татар республикаһына ҡушыуҙы һорай улар, үҙҙәренең дәлилдәрен дә килтерәләр, нисек тә булһа ил етәксеһе Ленинды күндерергә тырышалар. Әммә Ленин уларҙың дәлилдәрен бер нисә һорау менән кире ҡаға һәм Өфө губернаһын Татар АССР-ына биреү нигеҙһеҙ икән асып һала. Ленин менән осрашыу тураһында Мирсәйет Солтанғәлиев былай тип, яҙа: "Касаясь вопроса о башкирах, которые остались за пределами Малой Башкирии и, по нашему мнению, должны были войти в Татарскую республику, мы храбро старались убедить Ильича в том, что между татарами и башкирами в сущности разницы почти нет. На это Ильич примерно в таком смысле ставил нам ряд вопросов:

- А есть ли разница в языках или наречии татар и башкир?

- Есть, но совсем незначительная, и то среди крестьян, - следовал наш ответ.

Затем мы указывали на то, что вражда к татарам ограничивается лишь узким кругом шовинистически настроенной башкирской интеллигенции.

Тогда Ильич задал нам примерно такой вопрос:

- Ну, а кто же так недавно выгонял с побоями из башкирских деревень татарских учителей и даже мулл, как колонизаторский элемент, башкирская интеллигенция или сами крестьяне?

- Конечно, - ответили мы, - делали это крестьяне, но это было результатом агитации башкирской интеллигенции.

- А кто формировал полки и бригады из башкирских крестьян и сумел их повести в бой против кого угодно?

- Тоже башкирская интеллигенция, - тихо промолвили мы упавшим голосом.

Мы молчали, ибо дальше некуда было ехать. Ильич нас поставил, что называется, лицом в угол".

Шулай итеп, Ленин, татар менән башҡорттоң айырмаһын яҡшы аңлай һәм Өфө губернаһын тулыһынса Татар АССР-ына ҡушыуға ҡаршы була (Өфө губернаһының Минзәлә өйәҙе менән Һамар губернаһының Бөгөлмә өйәҙе генә бирелә). 1922 йылдың июнендә Өфө губернаһының күпселек өлөшө, башҡорттар күпләп йәшәгән территория булараҡ - Башҡортостанға ҡушыла. Шулай итеп, 1917 йылда 3-сө Дөйөм Башҡорт ҡоролтайында уйланған проекттың икенсе этабы биш йылдан һуң тормошҡа аша - Оло Башҡортостан барлыҡҡа килә. Әхмәтзәки Вәлиди 1917 йылдың ноябрендә уҡ һыҙған Башҡортостан автономияһы сиктәре тулыһынса тиерлек тормошҡа аша. Бары тик Минзәлә, Бөгөлмә өйәҙҙәре генә ситтә тороп ҡала.

Темәскә күсәйек. Ни өсөн ул тәүге баш ҡала булып китә? 1917 йылдың көҙөндә Колчак власҡа килгәс, Башҡортостан хөкүмәте Колчактың власын танырға теләмәй, Ырымбурҙан Баймаҡҡа күсә. Был күсеүгә фронттың яҡынлашыуы ла сәбәпсе була. Йәғни, күсенеү мәжбүри рәүештә һәм ваҡытлыса тип иҫәпләнә.

Тәүҙә Башҡортостан хөкүмәте Баймаҡта урынлаша. Темәс ауылына хөкүмәт тик февраль башында күсенә. Тап ошо мәлдә, 1919 йылдың 18 февралендә, Башҡортостан хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре советтар яғына сыға. Бер айҙан, 1919 йылдың 20 мартында, Мәскәүҙә Башҡортостан автономияһын таныу тураһында килешеү төҙөлә. 23 март көндө был хаҡта "Известие ВЦИК" гәзитендә иғлан ителә. Килешеүҙә Башҡорт совет республикаһының баш ҡалаһы тураһында ла телгә алына: "Столицей Башкирской советской республики остается временно местечко Темясово окончательное же решение вопроса предоставляется съезду Советов в Башкирии" тиелә унда.

Колчак армияһының контрһөжүме арҡаһында 24 март көнө Башревком (Башҡортостан хөкүмәте) Темәстән сығып та китә. Йәғни, Темәс ауылы рәсми рәүештә Башҡортостандың ваҡытлы баш ҡала ролен өс көн генә үтәй. Хөкүмәт Темәстән Мораҡҡа (Күгәрсен районы), Мораҡтан Морапталға (Көйөргәҙе районы), унан Иманғолға (Ырымбур өлкәһенең Октябрь районы), унан Тоцкиға, ары Саранскиға эвакуациялана.

Августа эвакуациянан ҡайтҡанда Әхмәтзәки Вәлиди, беҙ ҡабаттан Ырымбурға ҡайтырға теләгәйнек, әммә Совет хөкүмәте рөхсәт бирмәне һәм Стәрлетамаҡҡа билдәләне, тип яҙа: "Мы как и прежде хотели, вместе с казахами расположится в Оренбурге. Однако Советское правительство, Ленин и Сталин под влиянием своих имперски настроенных товарищей решили отделить башкир от казахов. По решению Центра, казахам дали сформировать самостоятельное Казахское правительство со столицей в Актюбинске, нашей столицей определили Стерлитамак".

Темәс тураһында һүҙ ҙә юҡ. Ул бер нисек тә баш ҡала урыны була ла алмаған. Әлбиттә, Темәс ауылы Башҡортостан тарихында тәрән эҙ ҡалдырған ерҙәрҙең береһе. Башҡортостандың ваҡытлыса баш ҡалаһы тип тә иғлан ителгән, унда Бабич эҙҙәре һаҡлана, Башревком урынлашҡан була, әммә уны баш ҡала итеү бер планда ла, уйҙа ла ҡаралмай. Асылда, Башҡортостан хөкүмәтенең, Башҡортостан автономияһының, Совет Башҡортостанының аяҡҡа баҫҡан осоро Стәрлетамаҡ ҡалаһы менән бәйле, 1919-1922 йылдарҙа был ҡала Башҡортостан үҙәге була. Бында Башҡортостан хөкүмәте 4 йыл эшләй (1919-1922 йылдарҙа). Үкенескә күрә, Темәстән айырмалы рәүештә, "Стәрлетамаҡ 1919-1922 йылдарҙа Башҡортостандың баш ҡалаһы булған" тигән яҙыу күрмәйбеҙ. Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығы айҡанлы Стәрлетамаҡта матур бер стела ҡуйылһа, бик шәп булыр ине. Юғиһә, Стәрлетамаҡҡа "купеческий город" тигән исемде ҡушып ҡушалар.

Иң мөһиме шул: автономия өсөн милли хәрәкәттең башынан уҡ башҡорт халҡы үҙенең автономияһының баш ҡалаһы итеп халҡы рәүештә Өфөнө күргән. Ниндәй генә ҡыйынлыҡтарға ҡарамайынса, 1917 йылда ниәтләнгән Оло Башҡортостан идеяһы 1922 йылда тормошҡа ашҡан, гүзәл Өфөбөҙ Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы булып киткән.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА**
**яҙып алды.**
**(Аҙағы. Башы 25-се һанда).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

## БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Ҡыпсаҡтар

**Башҡорт ҡыпсаҡтарҙың хандары һәм бейҙәре:** Ҡыпсаҡ (XII-XIII б.б.); Һушнаҡ (XIII б.), Ҡаҙанҡап (XIII б.); Буҙабей (XIII б.); Көнөш (XIII-XIV б.б.); Найман (XIII-XIV б.б.); Турнаҡ (10-20 й.й.XIV б.); Буға бей (20-30 й.й. XIV б.); Күкләр - 1340 й. үлә; Ҡусҡар бей, Ямғырсы бейҙең ағаһы (XV-XVI б.б.); Ямғырсы бей (XV-XVI б.б.); Иләк бей (XV-XVI б.б.); Бөрйән бей (XV-XVI б.б.); Алсаҡ бей (XV-XVI б.б.); Аҡназар бей (30-40 й.й. XVI б.); Байназар бей (40-50 й.й.XVI б.); Иван Грозныйҙан грамота алған Ҡыҙрас бей (50 й.XVI б.).

Ҡарағай ҡыпсаҡ башҡорттарында хаким булып торған хандар һәм бейҙәр: Дәшт Ҡыпсаҡ, Исмәғил хан (XIII-XIV б.б.в.), уның ата-бабалары Еҙем йылғаһы буйында йәшәгән, шунда ерләнгән; Алмай солтан (XIII-XIV б.б.); Ҡуҙы солтан (XIV-XV б.б.); Боҫҡон солтан (XV б.); Булат бей (XV б.); Бабсаҡ бей (XV б.); Турахан (XVI б. башы); Күсәк бей.

### Бәшәнәк-ҡаңлылар

Бөйөк төрөк ҡағанаты дәүерендә ҡаңғарҙар ерлегендә яңы сәйәси берләшмә - бәшәнәктәр барлыҡҡа килә. Византия императоры Константин VII Багрянородный (905 - 959) яҙыуынса, бәшәнәктәр Атил (Волга) менән Гейх (Яйыҡ) йылғалары араһында йәшәгән. "Ҡанғарҙарҙың да пачинакит (бәшәнәк) тип аталыуҙарын белергә кәрәк..." - тип яҙа Константин. Бәшәнәктәрҙең һигеҙ төркөмөнөң биш берәмеге төрки сығышлы ҡәбилә һанала. Улар берҙәмлек өсөн "бажанак" йәғни "бажа" атамаһын һайлай. X быуаттың ғәрәп авторы әл-Мәсуди бәшәнәктәрҙең көнбайышҡа күсенеү сәбәбе итеп уғыҙҙар, ҡарлуҡтар һәм ҡимаҡтарҙың башҡорттар, нәүкәрҙәр һәм бәшнәләр менән бәрелешен килтерә. Бөрйәндәрҙең дә шулай уҡ IX быуат аҙағында башҡорт-бәшәнәк хәрәкәтендә булыуҙары ихтимал.

Бәшәнәктәр - ҡыпсаҡтарҙың бер атамаһы. 40 өлөштән торған һәр бер урҙаға биш ырыу ингән. Константин Багрянородный көнсығыш Европа далаларын баҫып алыусы тәүге хандарҙың исемдәрен яҙып ҡалдырған: Ваица (Иртим урҙаһы), Ҡорҡот (Гилы), Каидум (Харовои), Гиаци (Хокон), Ҡуйыл (Цур), Ипеоса (Кулпес), Башон (Цокон), Коста (Талмат).

"Бәшәнәк" атамаһының һүҙмә-һүҙ мәғәнәһе "баш бирмәүсене турауҫы (башын киҫеүсе)" тигәндә аңлата. Бәшәнәктәр төрлө сығышлы булып, төрлөсә һөйләшкән. Уларға төрки урҙаларҙан, уғырҙарҙан тыш, башҡалары ла ҡараған. Тәүге йылдарҙа бәшәнәк союзына ҡараған урҙалар Волга аръяғында далаларҙа йәшәгән. Хазар ҡағанатының көсһеҙләнә барыуын һиҙеп ҡалып, улар көнбайышҡа йүнәлгән. Был халыҡ тураһында Н.М. Карамзин: "Бәшәнәктәр бер нисә быуат буйы Европаның ҡотон алған", - тип яҙа. Уларға уҙдар ҙа ҡараған. Бәшәнәктәр Игорь менән килешеү төҙөп, 5 йыл буйына Русты борсомаған. Нестеров 920 йылда улар менән булған һуғыш тураһында яҙа. Шунан һуң Игорь улар менән түләүле килешеү төҙөй. Һуңынан 971 йылда Русь кенәзе Святослав гректарҙың батшаһы менән дуҫлашҡас, бәшәнәктәр 972 йылда Киевҡа дружинаһы менән ҡайтып барған Святославҡа һөжүм итә. Святослав яуҙа һәләк була. Бәшәнәк кенәзе Куря уның башын киҫеп алып, баш һөйәгенән һауыт эшләй.

**(Дауамы бар).**

*✓ Тәү сиратта, компетентлы милли идарасы кадрҙар булыуы кәрәк, сөнки мәҙәниәтте үҫтереүгә бюджеттан аҡса бүленә, әммә уларҙы нисек тотоноу уйлап еткерелмәй. Шуның өсөн үҫеш критерийҙары булыуы зарур.*

**"Шиғриәттә бөтөн нәмә яҙылып, һүрәтләнеп бөткән. Һиңә уларҙы тәржемә итергә генә ҡала. Шуға күрә рус телен уҡы", - тиҙәр уға атаһы менән Рауил Бикбаев бер ваҡыт. Гәзиттә Мәскәүҙәге Әҙәбиәт институтына уҡыусылар йыйыу тураһында иғланды ла күрһәтеп, атаһы улының күңеленә ойотҡо һалып ҡуя. Йылдар үткәс, ошо ваҡытта бөрөләнгән хыялдары тормошҡа аша - егет Мәскәүҙә М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтын тамамлай, "Ватандаш" журналының баш мөхәррире, БР Журналистар союзының рәйесе була. Философия фәндәре кандидаты ғилми дәрәжәһен яҡлай. Шиғырҙар, пьесалар яҙа башлай һәм "Рустең алтын ҡаурыйы" конкурсында еңеү яулай. Башҡорт теленән әҫәрҙәр тәржемә итә. Шулай итеп, рубриканың сираттағы ҡунағы - З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтенең баш мөхәрир урынбаҫары Фәрит Вафа улы ӘХМӘҘИЕВ.**

# ӨФӨЛӘ ТЫУЫУЫМ,

## үҙ фатирыбыҙҙа йәшәүем менән бәхетлемен



**Баш ҡалалағы бала саҡ хәтерегеҙҙә нисек һаҡлана?**

- Мин билдәле шағир һәм әҙәбиәтсе, филология фәндәре кандидаты, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре Вафа Әхмәҙиев менән Фәриҙә Юлтыева-Һөйөндөкова ғаиләһендә тыуғанмын. Әсәйем Дәүләт китап палатаһында, һуңынан Н. Крупская (хәҙер З.Вәлиди исемендәге китапхана) китапханаһында эшләне. Алты йәшемдә СССР Фәндәр академияһының балалар баҡсаһына йөрөгәнемдә "ғалим" тигән һүҙҙе ишеттем. Балалар үҫкәс кем буласаҡтары хаҡында һөйләшеп, берәүһе ғалим булырға теләүен белдерҙе, "сөнки улар бөтөн нәмәне белә һәм эшләй ала", тине ул. Өйҙә атайым борщ бешерергә булғас, мин унан: "Атай, һин ғалиммы ни?" - тип һораным. Ул миңә аптырап ҡараны ла: "Эйе, мин ғалим, фән кандидаты", - тип яуапланы.

Ул ваҡыттағы БАССР-ҙың мәғариф министры Фатима Мостафина башҡорт теле белгестәре өсөн торлаҡ йорт төҙөүҙе ойоштора һәм беҙгә уның беренсе ҡатындағы өс бүлмәле коммуналканан бер бүлмә әләгә. Шуға тиклем, оло апайым Роза менән йәш ғаилә ҡуртымға алынған фатирҙа көн итә. Ошо Әй урамында беҙ Нәркәс һеңлем тыуғанға тиклем алты йыл йәшәнек. Исхаҡ олатайым (атайымдың атаһы) вафат булғас, Миңлекамал өләсәйем бер йыл беҙҙә йәшәне. Иртән уның Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәт иткәнен йыш ишетеп, ҡарт, белемһеҙ, тип, йәлләй торғайным. Хәҙер, бәлки, уның ошо доғалары мине күп бәләләрҙән һаҡлап ҡалғандыр, тип уйлайым. Әсәйем яғынан өләсәйем Сабира математика уҡытыусыһы булды. Өфөлә йәшәне һәм мине уҡырға, яҙырға өйрәтте. Ә мин үҙ сиратымда Миңлекамал өләсәйемә белем бирҙем.

Ҡойма аша ғына 107-се мәктәп урынлашһа ла, Әй урамындағы йортта йәшәүселәрҙең күпселегенең балалары 20-се ҡала башҡорт мәктәбендә уҡыны. Яңы фатир алғас, миңә 108-се мәктәптә уҡырға тура килде. Ғаиләбеҙҙә һәр саҡ башҡортса һөйләштек, урамға сыҡһаҡ, руссаға күсә инек. Ҡыҫҡаһы, миңә Өфөлә тыуыу, ата-әсәйем менән үҙ фатирыбыҙҙа йәшәү бәхете тейҙе.

Бала сағым баш ҡалала ғына үтмәне, йәйгеһен атайымдың тыуған ауылына - Ишембай районының Ғүмәр ауылына ҡайта инек. Йәй дауамында башҡорт телендә тағы ла әллә күпме һүҙҙәр өйрәнеп килә инем. Бала саҡтың иң иҫтәлекле мәле булып тап ауылда үткән ваҡыт ҡалған. Унда беҙ, бала-сағалар, күмәк йыйылышып, ололарға көтөү көтөргә лә, бесән әҙерләргә лә ярҙамлаша, еләк, бәшмәк йыя инек. Кискеһен инде киноға бушлай инәбеҙ, сөнки Ғафир бабайым - киномеханик, Бикә инәй - китапханасы булып эшләне.

**Башҡорт зыялыларының ғаиләһендә үҫеү ябай ғаиләлә тәрбиәләнеүҙән нимәһе менән айырыла?**

- Ул - бала саҡтан туған тел һәм әҙәбиәт, мәҙәниәт тирәләй тыуған хәл-торош тоң бар ауырлығын күреп, тойоп, аңлап йәшәү. Беҙгә йыш булмаһа ла, атайымдың дуҫтары Рауил Бикбаев, Динис Бүләков, Тимер Йосопов, Ирек Кинйәбулатов, Барый Ноғоманов, Сафуан Әлибаев килә ине. Атай-әсәйебеҙ беҙҙе үҙҙәренең әңгәмәһенә ҡатыштырманы. Сәйәсәттә нимә барғанын белмәһәк тә, атайыбыҙҙың башҡортса һөйләшеүебеҙҙе талап итеүенән уның башҡорт теленең киләсәге өсөн хәүефләнеүен, борсолоуын йөрәгебеҙ менән тойҙоҡ. Шулай булһа ла, атайымдың, Роза апайымдың (хәҙер - мәктәп директоры) башҡортса шиғырҙар яҙыуын белгәс, яҙышыуын ташлауын талап итеүен иҫләйем. Бәлки, уны алдан уҡ шағирҙарҙың ауыр яҙмышынан ҡурсаларға тырышҡандыр? Хәйер, Нәркәс һеңлем тыуғас (хәҙер ул тарих фәндәре кандидаты, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләй), атайым бер аҙна эсендә балалар өсөн башҡортса шиғырҙар китабын яҙҙы, ә уның синыфташы Мәрйәм Солтанова ошо шиғырҙарға көйҙәр ижад итте.

Дауыт Юлтыйҙың улы Таң бабайыбыҙ беҙгә йыш килде. Тап ул күп фотолар ҡалдырҙы. 8 археографик экспедицияла булған атайымдың сәфәрҙәренең береһендә НКВД-ла, башҡорт яҙыусыларын, шул иҫәптән Дауыт Юлтыйҙы ла атырға алып киткән Өфө төрмәһендә хеҙмәт иткән бер кеше менән осрашыуын мин һуңынан ғына белдем. Атайымдың "Заманалар аҡҡан һыу икән..." шиғыры тап Дауыт Юлтыйға бағышлана һәм унда мәҙәниәтебеҙҙең бөйөк эшмәкәрҙәренең фажиғәле өҙөлгән яҙмышы, уларҙы аҡлау һәм исемдәрен халыҡҡа кире ҡайтарыу һүрәтләнә. Өлкә комитет идеологтарының атайымдың нәшриәткә әҙер китабын баҫтырыуҙы тыйыуы уға ауыр тәьҫир итте. Ә китап фәнни, башҡорт әҙәбиәте тарихы буйынса ине...

**Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, телгә, мәҙәниәткә, әҙәбиәткә, тарихҡа, сәнғәткә ҡараш үҙгәрҙе. Әммә бөгөнгө ҡаҙаныштар - улар беҙҙең кисәңгебеҙ. Иртәгәһе өсөн нимәләр эшләргә тейешбеҙ? Алда ниндәй проблемалар тора?**

- Һуңғы 20 йылда башҡорт мәҙәниәтендә һәм мәғарифында эшләнгән эштәрҙе күрһә, мәрхүм атайым бик ҡыуаныр ине. Әммә өлгәшелгәндәр менән генә ҡәнәғәтләнеп, туҡтап ҡалырға ярамай. Беҙҙең быуын алдында ниндәй хәл итәһе проблемалар тора? Тәү сиратта, компетентлы милли идарасы кадрҙар булыуы зарур, сөнки мәҙәниәтте үҫтереүгә бюджеттан аҡса бүленә, әммә уларҙы нисек тотоноу уйлап еткерелмәй. Шуның өсөн үҫеш критерийҙары булыуы зарур. Бөгөн "Китап" нәшриәтендә эшләйем, унда тәржемәне үҫтереү кәрәк, тиҙәр. Ә нисек итеп? Ябай ғына: дәүләт заказы буйынса нәшер ителгән әҙәбиәттең 10 проценты тәржемә булырға тейеш. Бәлки, шул ваҡытта минең бынан 20 йыл элек тәржемә иткән "Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев" тигән беренсе китабым да донъя күрер. Бына беренсе критерий: башҡорт теленән нисә китап тәржемә ителгән?

Башҡорт тематикаһы буйынса кино сценарийҙары һәм пьесалар яҙған кеше булараҡ, Мәҙәниәт министрлығында фильм төшөрөү һәм спектаклдәр ҡуйыу өсөн грант бирергә кәрәк икәнен аңламауҙарына төшөндөм. Шуға күрә, тәүҙә иғлан ителгән тема буйынса конкурс үткәреп, еңеүсегә грант бирелһә, яҡшыраҡ буласаҡ. Мәҫәлән: Башҡорт кавалерия дивизияһы тураһындағы сценарийҙарға. Комиссия тәүҙә сценарийҙы уҡырға, һуңынан ғына мәсьәләне хәл итергә тейеш. Юҡһа, беҙҙә хатта сценарийы булмаған фильмға, яҙылмаған романдарға аҡса биреү күренештәре лә юҡ түгел. Икенсе критерий: башҡорттар тураһында күпме фильм төшөрөлгән?

Драматургияла ла алға китеш һиҙелмәй. Театрҙар сит ил авторҙарын ҡуя, ә башҡорт авторҙарын - бик һирәк йә бөтөнләй ҡуймай. Бына өсөнсө критерий: Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре булыр өсөн теге йәки был режиссер нисә башҡорт авторының пьесаһын ҡуйҙы икән? Әгәр тәжрибәле режиссерҙар ҡурҡһа, яңы башҡорт авторҙарының пьесаларын йәш режиссерҙарға сәхнәләштерергә рөхсәт итергә кәрәк.

Йәйгеһен театрҙар ябыла, әйҙә, йәштәр беҙҙең пьесаларҙы ҡуйып, үҙҙәрен дә, яңы әҫәрҙе лә һынап ҡараһын. Әгәр тамашасыға оҡшаһа, яңы миҙгелде ошо тамашаларҙан башларға мөмкин. Бына дүртенсе критерий: йәш режиссерҙар тарафынан нисә яңы пьеса ҡуйылған?

Ижади шәхес булараҡ, көн һайын компьютерҙа эшләргә тура килә. Ә бит һаман да башҡорт клавиатураһы юҡ. Был да артта ҡалыу. Мәсьәләне кем хәл итер? Кемгә ошо клавиатура кәрәк: яҙыусыларға һәм журналистарға ғына. Ә интернет беҙҙән милли клавиатура талап итә, был ысынлап та бик мөһим! Минең ҡарашҡа, беҙҙең һәм киләсәк быуын алдында торған хәл ителергә тейешле мәсьәләләр бына ошо.

**Шәрифә САЛАУАТОВА әңгәмәләште.**

ЙОЛА ТОТҠАН ЯҘЛЫҠМАҪ





# ҺЕҘҘӘ КЕЙЕҘ БАҪАЛАРМЫ?

## Беҙҙә кейеҙ баҫалар!..

**Йыр-бейеү менән ҡаршы алды беҙҙе Әлшәй ағинәйҙәре "Аҡ кейеҙгә баҫһам..." тип исемләнгән йола байрамында. Әле яңыраҡ ҡына Себенлелә "Ҡыҙҙар ҡайтты ауылға" байрамы, Ҡыпсаҡ-Аскарҙа ауылдың 255 йыллығына арналған йыйын үткәрелгәйне, бөгөн иһә Урта Аҡкүлай ауылы кейеҙ байрамына ҡунаҡтар йыйҙы. Сағыу милли кейемдәрендә нур бөркөп торған күрше Миәкә, Бишбүләк, Дәүләкән, Шишмә ағинәйҙәре сараға оло йәм өстәне. Ә инде алыҫ юлды яҡын итеп таңғы 4-тә юлға сығып килеп еткән Учалы ағинәйҙәренең көслө рухы, юғары мәҙәни кимәле барыһын да хайран итте.**

Ихсан хәҙрәт Иҡсанов тарафынан уҡылған изге доға менән башланды Рамаҙан айында үткәрелгән Кейеҙ байрамы. Байрамға килеүселәрҙе Әлшәй муниципаль районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Заҡуан Әхмәтов, Казанка биләмәһе хакимиәте башлығы Вил Йомағужин сәләмләне. Әлшәй районының Почетлы гражданины Солтангәрәй Киреев яҡташтарын тәбрикләп, ейәнсәре, художестволы гимнастика буйынса спорт мастеры, күп тапҡырҙар донъя һәм Европа чемпионы Ләйсән Үтәшеваның да ихлас сәләмдәрен еткерҙе. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты хеҙмәткәре Марат Ғилманов, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Ағинәй" республика йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева байрамды сәләмләп, ойоштороусыларға Ҡоролтайҙың Рәхмәт хаттарын тапшырҙы. Башҡортостандың халыҡ шағиры Гөлфиә Юнысованың шиғри һүҙе лә байрамға йәм өстәне.

Рәсми өлөш тамамланғас, тамашасылар кейеҙ баҫыу йолаһын ҡарарға йыйылды. Биҙәкле көйәнтәләрен индәренә һалып, күнәктәрен сайпылтмай ғына атлаған йәш килендәр һыу алып килде. Кемдәрҙер ҡайсыларын уйнатып, һарыҡ йөнөн туманы. Йөн тетергә ултырған инәйҙәр дөртле йыр һуҙҙы. Йөрәкһеп бейергә төшөп киткәндәр ҙә булды. Тәсләп һалынған аҡ йөн өстөнә ҡара һарыҡ йөнөнән биҙәктәр теҙгән ҡатын-ҡыҙ изге теләктәрен теләне. Бешекләп баҫылған кейеҙ ҡабат баҫҡансы күпмелер ваҡыт ятып торорға тейеш икән. Ул арала икенсе бер кейеҙҙе алып сығып, бала һөйөү йолаһын да күрһәтеп өлгөрҙө әлшәйҙәр.

Артабан ҡул эштәре күргәҙмәһен ҡарарға сират етте. Әлбиттә, күргәҙмәлә иң тәүҙә ошо төбәк башҡорттарға хас шөғөл - аҫалы балаҫтар күҙгә салынды. Беҙ Әлшәй Мәргән варисҫтарының гөрләтеп балаҫ байрамдары үткәргәненә күнеккәнбеҙ инде. Был төбәктең аҫыл балаҫтары Рәсәйҙең ниндәй генә күргәҙмә залдарын биҙәмәй! Затлы фатирҙарын биҙәр өсөн хатта сит илдәрҙән дә килеп һатып алып китәләр икән уларҙы. Балаҫ һуғыу станогы артында ултырған Зәкирә Сиражетдинова апайҙы күҙәтәбеҙ. Уның ҡулдарына күҙ эйәрмәй. Бер ай эсендә балаҫ һуғып бирә алам, ти оҫта ҡуллы апай. Был һөнәргә уны маһирлығы менән тирә-яҡта дан тотҡан әсәһе Нәсиха инәй өйрәткән, ә Зәкирә апай үҙ сиратында улынан балаҫ һуғыу станоктары эшләтеп алып, был һөнәргә ейәнсәрҙәрен дә йәлеп иткән. Шулай уҡ Фәнүрә Ғәниеваның, Рәмзилә Искәндәрова, Мөнирә Кашарскаяның (Раевка ҡасабаһы), Гөлназ Фәхретдинова (Урта Аҡкүлай ауылы), Мәрйәм Зәйдуллина (Иҫке Аҡкүлай ауылы), Гөлсәсәк Вәлиуллинаның (Сурай ауылынан) ҡул эштәре лә күргәҙмәнең бер биҙәге булды.

- 2015 йылдан ошолайтып бергә ойошоп, ағинәйҙәр хәрәкәтен башлап ебәрҙек, - ти Әлшәй районының Ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе Рәйсә Мөфтиева. - 40 йыл мәғариф системаһында эшләп (шунаң 13 йылы - мәктәп директоры вазифаһында!) пенсияға сыҡҡас, өйҙә ни эшләп ятмаҡ кәрәк, тип аптырағайным. Иртәсел булғас, сәғәт 11-гә барлыҡ эштәремде тамамлайым да ҡуям: һыйыр һауылған, һөт сепараторҙан айырылған, өй йыйыштырылған. Артабан ни эшләмәк кәрәк! Былай, исмаһам, ҡатын-ҡыҙҙар бергә ойошоп, ошолайтып халҡыбыҙҙың гөрәф-ғәҙәттәрен тергеҙеү буйынса әүҙем эш алып барырға тырышабыҙ. Ни өсөн бөгөн тап кейеҙ баҫыу йолаһын һайланыҡ? Балаҫ һуғырға беҙ былай ҙа оҫта. Ә кейеҙ баҫыу онотолоп бара. Ҡарап йөрөйөм дә, электән ҡалған боронғо кейеҙ менән кемдер машинаһын ҡаплап ҡуйған, кемдер олтораҡ итеп ҡуллана. Әрһеҙләп, әрәм-шәрәм итеп бөткәндәр. Ә бит кейеҙ иҙәнгә йәйһәң дә аяҡҡа йомшаҡ, ябынып ятһаң да йылы, тәнгә шифаһы ла бар...

Ул арала сәхнә тултырып, таҡмаҡ әйтеп бейеп йөрөгән ағинәйҙәрҙең таҡмағына ҡолаҡ һалам:

*Ал итеп кенә торам,*
*Гөл итеп кенә торам.*
*Үҙем ҡартайған булһам да*
*Тып итеп кенә торам!*

Ағинәйҙәр сығыштарынан һуң Аҡкүлай ауылында оҙаҡ йылдар уҡытыусы булып эшләп киткән мәғариф ветераны Әлфиә Ханнанова ҡасандыр Әсмә инәй Фәхретдинованан яҙып алған мөнәжәтен ишеттерҙе. "Бик аҡыллы, иманлы, көслө шәхес ине. Иман юлында йөрөгән ир-уҙамандар булмаған бер осорҙа хатта йыназа намаҙҙарын да уға үтәргә тура килде", - тип оло хөрмәт менән иҫкә алды 105 йәшкә етеп баҡыйлыҡҡа күскән Әсмә инәйҙе аҡкүлайҙар. Артабан ауыл эшҡыуарҙары Әлфиә һәм Урал Фәхретдиновтар, Әклимә һәм Азат Абыҙгилдиндар ағинәйҙәрҙе бүләктәре менән һөйөндөрҙө.

Башынан аҙағына тиклем сараның уртаһында ҡайнаған Аҡкүлай ауылы ағинәйе Миләүшә Яхина ҡунаҡтарҙы тирмәгә саҡырҙы. Ҡорбан салдырып, буҙа ҡойоп, мул табын ҡороп һыйланы ҡунаҡсыл әлшәйҙәр ҡунаҡтарҙы. Аш-һыу оҫтаһы Гөлли Әлимғолова әҙерләгән һыйҙар ҙа табынды биҙәне. "Үҙем йыуан булғас, бауырһаҡтарҙы ла йыуан итеп бешерәм дә ҡуям!" - тип мәрәкәләгән Ҡыпсаҡ-Аскар ағинәйе Мәрфуға Шәйхетдинова менән дә танышырға насип булды. Мәрфуға апай өс тиҫтә йыл "Октябрҙең 50 йыллығы" колхозында ферма мөдире булып эшләгән. Малсылыҡ өлкәһендәге ҡаҙаныштары өсөн "Башҡортостандың атҡаҙанған малсыһы" исеме бирелгән, Хеҙмәт Ҡыҙыл байраҡ ордены менән бүләкләнгән. Мәрфуға Йәмил ҡыҙы КПСС-тың XXVII съезына делегат итеп тә һайланған. Ә ҡабарып торған бауырһағы, ысынлап та, телеңде йоторлоҡ!

Аҡ кейеҙҙәрен киптерергә элеп, ҡунаҡтарын оҙатҡан Әлшәй ағинәйҙәре өсөн ҡыуанып ҡайттым был сәфәрҙән. Эшендә лә, ғаиләһендә лә өлгөрә улар. Ауыл ерендә эш тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел, тиһәләр ҙә, ҡул эштәре менән булырға ла, йәмәғәт эштәрендә ҡатнашып, үҙҙәре йәшәгән төбәкте йәмләргә, башҡаларҙы ла әүҙемлеккә, айыҡлыҡҡа, иманға саҡырырға ваҡыт табалар. Бына шулай халыҡтың рухын, милли үҙаңын тәрбиәләй аҡ кейеҙгә баҫҡан ағинәйҙәр.

**Зөлфиә ХАННАНОВА.**

КӨНАУАЗ

# ӨҪТӘМӘ БЕЛЕМ...

## өҫтәмә килем сығанағымы?

**Бөтә Рәсәй халыҡ фронты (ОНФ) үткәргән ата-әсәләрҙән һорау алыу һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, бөгөн бик күп уҡыусылар өсөн өҫтәмә белем алыу хыял ғына булып ҡала. Ил буйынса алғанда, түңәрәктәр һәм секциялар ишеге һәр өсөнсө бала өсөн ябыҡ.**

Быйыл Бөтә Рәсәй халыҡ фронтының "Мәғарифтың милли ресурстары" фонды менән берлектә үткәргән мониторингы ваҡытында 22,5 мең ата-әсә ҡатнаша. Уларҙың 10 проценты өс һәм унан күберәк бала тәрбиәләй.

Тикшереүҙәр асыҡлауынса, балаларҙың 34 проценты өҫтәмә белем алмай. Ошо балаларҙың 5 процентының ғына теге йәки был түңәрәккә, секцияға йөрөргә йә ваҡыты юҡ, йә икенсе шөғөлө бар.

Өфө ҡалаһының ғына түгел, башҡа ҡалаларҙың күп балалы ата-әсәләре лә, балаларына өҫтәмә белем биреүҙе тәьмин итә алмауҙың төп сәбәбе итеп финанстар юҡлығын күрһәтә. Ғаиләлә балалар һаны артыу менән уларҙың өҫтәмә белем алыу мөмкинлеге лә кәмей. Ике балалы ғаиләләрҙең 14 процентында бер генә бала ла өҫтәмә белем алмай, өс һәм унан күберәк бала тәрбиәләнгән ғаиләләрҙә 32 процентында ғына балалар түңәрәктәргә һәм секцияларға йөрөй.

Үткәндәр менән йәшәмәгеҙ, тиһәләр ҙә, ирекһеҙҙән, уйҙар мәжбүри рәүештә төп белем генә түгел, өҫтәмә белем алыу ҙа бушлай булған совет осорона урап ҡайта. Ни генә тимә, ул ваҡыттарҙа барлыҡ түңәрәктәр, секциялар гөрләп торҙо, уларҙа шөғөлләнеү өсөн бер тин дә түләнмәй ине. Бөгөн ни өсөн шундай хәл килеп тыуҙы һуң? Сәбәптәре, моғайын, бәрәү генә түгелдер. Шулай ҙа, тәү сиратта, финанс мәсьәләһе торалыр. Баҙар иктисадына күсеү барлыҡ тармаҡтарҙы ла үҙаллы аҡса эшләүгә күсергә мәжбүр итте, сөнки нисек аҡса эшләүҙең башҡа юлдарын етәкселәр ҙә күрһәтмәне, өйрәтеүсе лә булманы. Ул ғына ла түгел, хатта РФ Хөкүмәте башлығы Дмитрий Медведев уҡытыусыларға асыҡтан-асыҡ итеп аҡса эшләргә өйрәнергә ҡушты. Уның тел төбөндә, әлбиттә, икенсе мәғәнә лә ята ине, әммә уҡытыуҙан башҡаны белмәгән мөғәллимдәр нимә эшләһен - белгән шөғөлөнән аҡса эшләргә мәжбүр булды. Элегерәк, уҡытыусы ла ашаймы, тип аптыраһалар, хәҙер иһә уҡытыусының да шундай уҡ кеше, уның да тамағы, ғаиләһе бар икәне һәр кемгә мәғлүм.

Мәғариф системаһында алып барылған сәйәсәт, шулай итеп, уҡытыусыны һайлау алдына ҡуйҙы: балаларға төплө белем бирергәме әллә аҡса эшләргәме? Эйе, нигеҙле белем биргәндә, уҡыусыларҙың өҫтәмә белем алыуға ваҡыты күберәк ҡала, ул ваҡытта инде уҡытыусыға өҫтәмә килем сығанағы ябыла. Ҡысҡаһы, сығып булмай торған ҡулса барлыҡҡа килә.

Бер нисә йыл элек танышым шулай тип һөйләгәйне: "Әхирәтем балаһын мәктәпкә бирмәне, өйҙә уҡыта (моғайын, башланғыс синыф балаһы булғандыр). Уҡытыусы үҙе килә, балаһы ла күҙ алдында, уҡытыусы ла түләнгән хаҡты аҡларға тырыша". Бөгөн өҫтәмә белем биреү түләүлегә әйләнеп бөтөп бара икән, тиҙҙән, дөйөм белем биреү ҙә шуға күсмәҫ, тип әйтеп булмай. Әллә илгә белемле кешеләр кәрәкмәйме икән, әллә белем бары тик айырым ҡаста өсөн генә мөмкин булып ҡалырмы?

Был йәһәттән, Рәсәй Президенты Владимир Путиндың "май указдарына" ярашлы, 2020 йылға тиклем 5-18 йәштәге балаларҙың 32 проценты төрлө өҫтәмә белем алыуға йәлеп ителергә, уларҙың 50 проценты федераль бюджет иҫәбенә уҡырға тейешлегә генә күнелде бер аҙ йылытып тора...

**Земфира ЙӘНТҮРИНА.**

***✓ Әҙәм күрәсәген күрмәй, гүргә инмәй. Минекен - һин, һинекен мин йәшәй алмабыҙ. Ҡыҙ баланың яҙмышы ағастан өҙөлгән япраҡтың хәлендәй, тей торғайны беҙҙең әсәй, уны хәҙер тотоп алып, кире йәбештереп булмай...***



# БЕТЕРӘ ШАРШЫҺЫ

Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА

Повесть



* * *

Диләнке ситендәге дүрт бура йорттоң берсеһендә көн оҙоно ҡаҙан өҫтөндә ул хәҙер. Оло һауыттарҙа аш бешерә, тушенка болғап, макарон-картуфын ҡура, компот ҡайната, дәү самауырҙарҙа сәй тота. Ҡара тандан кескәй кашауайға һоро бейәһен егеп алып сығып китә лә, эшселәрҙе өс ашатып, ҡашығаяғын йыуып-йышып, иртәгәгә кәрәк-ярағын әҙерләп ҡуйып, төнләтеп ҡайтып инә. Йыш ҡына Әнүәр ағай менән бергә йөрөйҙәр. Башта борсолған булһа ла, берәүҙең бер һүҙ әйткәне булманы. Киреһенсә, ир-егет ашханаға ингәнендә утын-һыуын тотоп инеп, "ни кәрәк тә, ни кәрәк" тип кенә торалар. Был йомоҡ башҡорт ҡыҙының йүгермәләп йөрөп тырыштырыуы, ҡарашын күтәреп ҡарамағанда ла, йөҙөндә асыҡ сырай булыуы барыһына ла хуш килә. Олораҡтары "дочка", йәшерәктәре "сестренка" тип өндәшкеләй. Унда ла рәхәт булып китә. Аштарын мулыраҡ, икмәктәрен ҡалыныраҡ итеп тотторол ебәрә. Яҡшы мөнәсәбәткә ни етә инде.

Лесничество хужаһы Борис Федорович та ҡәнәғәт ашнаҡсы менән. "Ай-да красавица! Ай-да, умница!" тип ҡыҙартып та ташлай. Йыш ҡына янына инеп, оҙаҡлап хәбәр һөйләп ултырыуы ғына уңайһыҙландыра, әммә бындай оло хужаға ярайҙыр, күрәһең.

Иҫәплә‌ү-һанауға ла оҫтарҙы. Ул былай ҙа һандарға шәп ине, ҡабул ителгән, тотонолғанды йәһәт кенә сығарып, таблицаларын тултырҙы, отчеттарын да тикшереүселәр бөйләнмәҫлек итеп эшләп өйрәнде. Счет төймәләрен шарт-шорт тартҡылап, ҡағыҙҙарға күмелеп ултырғанында әсәһе: "Йә инде, быны ла аңдар икән кеше", - тип аптыраған булды ла, эстән маһайып йөрөнө. Кем бында былайтып төймә тартып, урыҫса уҡыпяҙып ултыра. Уның ҡыҙы!

Тик бер көн уйламаған хәл булды. Делянкаларҙы ҡыҙырып йөрөп килгән Борис Федорович, ашап алып мейес алдында тәмәке көйрәтеп ултырған ерәнен ҡапыл тороп алып, ынтылып, плитәләге һурпаһын болғап торған Хәтирәне ҡосаҡланы ла алды. Көтөлмәгәнлектән тайшанып өлгөрмәгән ҡатын, уның көслө беләктәре ҡармауында ҡалып, нимәләр уйлап өлгөргәнсе, ир, һаҫыҡ ауыҙы менән уның ирендәрен һурып үпте, бөтә тәне менән мейескә ҡыҫты. Ул арала ҡулдары ашығып түшенә үрелгәйне... иҫенә килеп өлгөргән Хәтирә, уны йән көскә этеп ебәреп, һыҙар ҡулындағы балаунигы менән киҙәнеп тороп яңағына һалды ла ебәрҙе. Алюмин балауник бөгөлөп төштө. Үҙе шул арала йүгереп барып, утын ағасына йәбеште:

- Килеп ҡара! Үлтерә һуғам!

Былдайҙы көтмәгән хужа яңағын һыйпап, һаман һөжүм итте:

- Һин нимә?.. Алйотһоңмы әллә? Кемгә һуҡҡаныңды беләһеңме һин, аңра бисә, ә?

- Килмә! Башыңды иҙә һуғам!

- Бисә икәнеңде белмәй икән, тип уйлайһыңмы? Һинең кеүектәргә ҡайҙа ир, ә? Төрмәлә ултырғаныңды ла беләбеҙ. Һин бында кемде ышандырмаҡсыһың? Ташла утыныңды. Ташла, тиҙәр, һиңә, - ыҫылдап һаман килде.

Хәтирә ярҙам эҙләп, алан-йолан ҡаранды, тик эргәлә, эргәлә генә түгел, был ваҡытта өйҙәрҙә лә йән әҫәре юҡ. Барыһы ла урманда. Хатта урамға сығып ҡысҡырыуҙан да фәтүә булмаҫ... Шул уйының артынан ишеккә ташланды ла. Тик сығып ҡасып өлгөрмәне. Һөжүм итеүсе уны һыңар ҡулынан эләктереп алып, өйөрөлтөп ебәреп, оҙон өҫтәл ыңғайына һуҙылған һикегә сойорғотто. Һаман утынын ташламаған ҡатын, урындыҡҡа менеп баҫып торҙо.

- Борис Федорович! Үтенәм... Нимә эшләйһегеҙ ул һеҙ?

- Шаулама... Һиңә бер зыян булмаҫ, балда-майҙа йөҙөп кенә йәшәрһең...

- Дядя Борис ҡатындарҙы ҡыйырһытмай ул, - тип килеп, мөйөшкә һырынып баҫҡан ҡатындың итәгенән эләктереп һелкетә тарткайны... башына утын ағасы төшөүҙән "лып" итеп йөҙтүбән ауҙы. Шаңҡып ята бирһә лә, иҫен юймаған ине ул. Йәйләп ҡына тороп, сәс араһын һыйпап ҡараны ла, ҡанлы бармаҡтарына текәлә бирел торғас, ҡарашын һаман шул урынында ағасын ҡосаҡлап ҡобараһы осоп торған Хәтирәгә күтәрҙе.

- Все... былай булғас. Крышка һиңә! - Шул һүҙҙәренән һуң ҡыҙыу атлап барып, туны менән кәпәсен кейеп, тупһаға етте лә: - Төрөмшик! - тигәндә теше араһынан ҡыҫып сығарып, ауыр ишекте һелтәп ябып сығып та китте. Ҡатын баҫҡан ерендә шыуып төшөп ултырҙы.

- Ни эшләнем мин... Ай, Аллам! Нишләп һуҡтым? Нишләп...

* * *

Өсөнсө көн ашханаға бер төркөм тикшереүселәр килеп төштө. Ашхананы ябып алып, бөтөн ҡағыҙҙарҙы ҡутарып, склад тауарҙарын теҙеп һалып, һынауҙар башланды. Ике көн барған был мәшхәр ашнаҡсының елкәһенә күпмеләр икмәк, тушенка һәм ит хаҡы сығарып, документ төҙөнө лә, ҡайтып китте. Хәтирә эшенән бушатылып, өйөнә ҡайтарылды. Тик ул инде был ҡайтыуҙың шартлы ғына икәнен аңланы. Шул көндө кис әле бер нәмә белмәгән әсәһе менән икеһе араһында шундай һөйләшеү булды.

- Әсәй, - тине ул әле йоҡламаһа ла, урын йәйеп ятҡан әсәһенә, - мин булмаһам, нишләр инең?

- Ни нәмә? - тегеһе ҡапыл ғына аңламаны, шуға үҙенекен һөйләне. - Нимәһен тәҙрәгә текәлеп утыраһың төн йөҙөндә. Кит, шайтан ҡарар!

- Шайтан ҡурҡыныс түгел ул, әсәй... Эргәнә ятайыммы?

Сәгиҙә, нимәләр булғанын йөрәге менән һиҙһә лә, быны икенсерәккә юраны. Юрған ситен күтәрҙе:

- Ят һуң.

Хәтирә әсәһенең ҡуйынына һыйынды.

- Кейәүҙән берәй хәбәр-хәтер бармы әллә?

Ҡыҙы яуап бирмәне, танауы менән әсәһенең түшенә төртөләп ята бирҙе.

- Киләм, тиһә әллә... киләкитә йөрөһөн әйҙә. Ул һиңә харам түгел дә, үҙ йәмәғәтең...

- Әсәй, мин алыҫҡа китеп барһам... һин түҙә алаһыңмы?

- Әпкитәм, тейме әллә? - Әсәһе, тәҙрәнең өҫкө өлгөһө аша төшкән ай нурында, ҡыҙының йөҙөн күрергә теләп, башын ҡалҡытты.

- Кем алып китһә лә... бер үҙең йәшәп тора алаһыңмы?

- Әпкитәм, тиһә ней... Йәшәремде йәшәйем инде мин, баллар етем ҡалып йәшәп ятҡанды.

Бер аҙ һүҙһеҙ яттылар. Һәр кем үҙенсә уйланы. Унан әсәһе көрһөнә бирҙе, үҙ хәбәрен теҙҙе:

- "Китәйек" тиһә - ҡарышма, минә лә ҡарама. Әҙәм күрәсәген күрмәй, гүргә инмәй. Минекен - һин, һинекен мин йәшәй алмабыҙ. Ҡыҙ баланың яҙмышы ағастан өҙөлгән япраҡтың хәлендәй, тей торғайны беҙҙең әсәй, уны хәҙер тотоп алып, кире йәбештереп булмай...

Икенсе көн килгән УАЗикка сығып ултырғанында әсәһе иламһыраһа ла, күҙ ҡараштарындағы ҡәнәғәтлеген йәшерә алманы. Ябай кейемдәге кешене ул кейәүе ебәргән әҙәмгә һананы. Быны аңлаған Хәтирә ҡыуанды ғына, әйҙә, иренә китә икән, тип тынысланһын да ҡалһын...

Был юлы йылдар уның тәүге киткәнендәге һымаҡ түгел ине, "халыҡ дошманы" тигән төшөнсәгә лә ҡараш бер аҙ йомшарған, уның кеүек "дәүләт милкенә ҡул һуҙыусы"ларҙан һорау алыу ҙа яҙалау формаһынан ситләшкән икән. Хәҙер Хәтирә үҙе лә күпкә аҡыллы. Бында килеп эләккәс, нимәләр иҫбатлап тороуҙың бер фәтүәһе лә юҡлығын яҡшы белә. Бөтөн гәйепләүҙәр менән дә килешеп, "гонаһтарын" танып, оло үкенес белдереүе тураһында бит-бит аңлатмалар яҙҙы. Тәфтишселәрҙең йөнөнә тейерлек һүҙҙәр, фекерҙәр әйтмәҫкә тырышты. Яңылышыуын, шайтан ҡотҡоһона бирелеп, дәүләт милкенә ҡул һуҙыуын һәм был хатаһын тыуған иле алдында хеҙмәт тире менән йыуырға әҙерлеген әйтте. Уны тыңланылар, аңлауын хупланылар һәм икенсе тапҡыр бер үк статья менән килеүен иҫәпкә алып... һигеҙ йылға хөкөм иттеләр.

Тейешле урынға ебәреләһе ҡатын-ҡыҙҙар төркөмө йыйылғансы тип, шул Белореттың ваҡытлы изоляторында ашнаҡсы ярҙамсыһы эшенә ҡуйып торҙолар. Камераларға аш таратырға, һуңынан һауыт-һабаны йыйып алыуға, унан уларҙы йыуыуға, бәзрәфтәрҙе таҙалауға арналды хәҙер уның көнө. Яҙмышы менән килешә алмаған йөрәген баҫыу, баҫа алмағанда ла бер аҙ онотолдороу өсөн уға эш, туктауһыҙ эш кәрәк ине. Үҙен хәлдән тайҙырғансы, түшәгенә етер-етмәҫтән арып йығылырлыҡ хәлгә еткергәнсе ғазапланы. Түшәккә ятып, нимәләрҙер хаҡында уйламаҫ, әсәһен иҫенә төшөрмәҫ өсөн мейеһен эшләтмәҫкә тырышты. Хатта аҡылдан яҙғыһы килде. Хоҙайҙан йә үлтер, йә аҡылдан яҙҙыр, тип ялбарҙы. Тик көн дә шул аҡылында уянды ла, шул хәсрәттәрен кейеп, ҡулына сепрәк алды.

Өс ай тирәһе ваҡыт үткәс, сираттағы төшкө ашты таратып йөрөй ине. Бер камераның тәҙрә өлгөһөн асып, эстәгегә сеүәтә һузғанда, уның танышлығын аңғарып, иғтибар итте һәм саҡ ҡысҡырып ебәрмәне. Теге ир ҙа уны таныны. Таныны ла арты менән бороло. Тик һуң ине инде. Үҙен төрмәгә тыҡҡан әҙәмде - Борис Федорович Серебряковты ҡараңғыла ла янылышмаҫ ине ҡатын. Коридор буйлап ары ҡуҙғалып киткәс, ашнаҡсы булған Захарҙан һораны:

- Был кем ул?

- Бер түрә, кисә алып килделәр.

- Ниндәй статья менән икән?

- Һинеке кеүек үк. Тик ҙур күләмдә. Ә ниңә һорайһың уны?

- Былай ғына... Ул мине ошонда ебәрткәйне, нахаҡ гәйеп тағып.

Захар ярҙамсыһына ышанмайыраҡ ҡарап алды:

- Ниндәй маҡсаттан? Һинең уға, ҡайһындай түрәгә, ни хәжәтең булды?

- Бәйләндә лә... башына утын ағасы менән һуҡтым. Шуны кисерә алманы.

- Ну, һин даешь! - тип коридорҙы яңғыратып көлдө ашнаҡсы. - Шундай ҡурҡыныҫын да бармы ни? Ә мин һине бур ғына икән тиһәм әле.

Көлөрөн көлһә лә, икенсе көн Хәтирәне бөтөнләй аптыратты ул.

- Мин зектар араһына Серебряков тураһында хәбәр ебәрҙем.

- Ниндәй хәбәр? - ҡатын ҡустыһы булғандай егеткә ҡарап ҡатты.

- Көсләүсе, тип...

- Уның көсләүсе икәнлеген минән башҡа кем белә?

- Хәҙер инде барыһы ла белә. Бында ундай дан менән йәшәүҙән йәшәмәү хәйерле. Так что, дошманыңды юҡ иттек, тип уйла.

Әллә нисек булып китте ҡатынға, юҡ, үсе ҡанмаңы уның, тантана ла итмәне, рәхәтлек тә кисермәне. Бары эсендә ҡара бушлыҡ ҡына тойҙо. Ул бушлыҡ эсендә ҙурайғандан-ҙурая барып, уның үҙен дә йота, юҡҡа сығара барғандай ине.

Коридор буйлап алға китеп өлгөргән Захар, боролоп өндәште:

- Ирка! Йоҡлама!

Аяҡтарын иҙәндән саҡ айырып алып, Хәтирә уның артынан эйәрҙе.

* * *

Ярты йылдан, тиҫтәләгән ҡатын-ҡыҙҙы Тула өлкә төрмәһенә алып барып ҡалдырҙылар. Бында уларҙы хәрби кейем тегеү цехтарына таратып сыҡтылар. Көн дә сафтарға теҙеп, һау-һаулап өргән эттәр һағы аҫтында эш урындарына алып баралар ҙа, кискә шул уҡ сүрәттә йоҡлау урындарына оҙаталар. Төрмә тәртиптәрен, ҡағиҙәләрен белгән Хәтирәгә, бер нисә тапҡыр таҫма-тас һуғышып алыуҙы иҫәпкә алмағанда, артыҡ ҡырҡыу хәлдәр тыуманы. Ул, шул бер һоро массаға ягылып, ағым менән ҡуша аҡты.

Иҫәрлек артыҡ нәмә лә булмаҫ ине, әгәр... Бер көн, эштәрен тамамлап сығып, рәткә теҙелә алмай этешеп-төртөшкән ҡатын-ҡыҙҙарҙың көтөп ауалаған овчаркаларҙың береһе, бәйләп ҡуйылған еренән ысҡынып китте лә, төркөмгә ташланды. Шундуҡ иң ыҡындағы ҡатынды ергә бәреп йығып, өҫтөнә баҫты. Ул Хәтирә булды. Дошманды йығып, алҡымынан алыуға өйрәтелгән эт, аҫтындағының бер ҡаршылығын ғына көттө. Саҡ ҡына сәбәләнһә, бөттө! Бөтөн ғүмере күҙ алдынан үткәндәй булды. Ни ғиллә менәндер, теленә көс килде:

- Аҡтырнаҡ... Муйнаҡ... ә? Һәйбә-әт малай... һәйбә-әт... Аҡы-ллы-ы...

Тауышҡа казармала булған һаҡсылар сығып, майҙансыҡ буйлап был яҡҡа йүгерҙе.

- Ыласынмы һин?... Ыласын... Әллә... Шоңҡармы?.. Шоңҡар... Шоңҡар... аҡыллы эт... аҡыллы...

**(Дауамы бар).**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

6

# Шифа

1-7 ИЮЛЬ (майай) 2017 йыл №26 (756)

ТӘБИҒӘТ СЕРҘӘРЕ

# ЕҘТӨЙМӘЛЕК...

## йәки Зәйнулла исемле егеттең мутлығы тураһында хикәйәт



**Геоботаник тикшеренеүҙәр менән Урал аръяғы райондарында экспедицияларҙа йөрөгән саҡ. Бер көн ҡарабойҙай баҫыуы янында урынлашҡан умарталыҡ эргәһенә туҡталдыҡ. Умартасы Динислам ағай беҙҙе кисен яңы ғына һығылған бал менән ихлас һыйланы. Бал ҡорттарының быйылғы эше менән ҡәнәғәтләнеүен һөйләне. Үҙе үсемлектәр менән ҡыҙыҡһыныуын белдереп: "Аҙ ҡалды шул хәҙер тәбиғәттә бал бирерҙәй һәм башҡа файҙалы үсемлектәр. Бөтәһе лә химик ашламаларҙы, гербицидтарҙы самаһыҙ ҡулланыуҙан", - тип борсолоп ҡуйҙы. Ә еҙтөймәлек (пижма) үләне тураһында һүҙ сыҡҡас, ул иҫтә ҡалырлыҡ бер хикәйәт һөйләне.**

- Һуғышҡа тиклем булды был хәл, - тип башланы ул, хәйләкәр йылмайып. - Ошо тирәнең заманында киң билдәле Зәйнулла исемле егете "Минең кеүек изге йәнде бер ниндәй ҙә ҡандала ашамай", тигән хәбәр тарата. Халыҡ ысынлап та ышана. Зәйнулланың абруйы күҙ алдында үҫә. Әммә берҙән-бер көн ҡалала уҡып ҡайтҡан, үләндәр менән ҡыҙыҡһынған ошо ауылдың бер егете серҙе аса. Зәйнулла үҙе йоҡлаған түшәк тирәләй еҙтөймәлек үләнен йәйеп һалған икән...

Ысынлап та, был үсемлек составында бөжәктәр һәм башҡа умыртҡаһыҙҙар өсөн зарарлы матдә - пиретрин тупланыуы фәнгә билдәле. Шул уҡ ваҡытта был матдәнең йылы ҡанлы хайуандарға һәм кешеләргә бөтөнләй зарары юҡ. Ошо пиретринды күпләп алыу маҡсатында был үсемлектең "пижма розовая" тигән төрө плантацияларҙа сәсеп үҫтерелә.

Еҙтөймәлек (пижма обыкновенная - Tanacetum vulgare L.) Башҡортостандың барлыҡ райондарында ла үҫә. Уның асыҡ һары төҫтәге сәскәләре әллә ҡайҙан күренеп тора. Бына ошо һары сәскәләренә ҡарап, уны еҙтөймәлек тип йөрөтәләр ҙә инде. Ул бер төптән 8-10 һабаҡ сығарып, өйкөмләнеп үҫә. Июль-август айҙарында, хатта сентябрҙә лә уны сәскә атҡан килеш осратырға мөмкин. Бейеклеге 1-1,5 метрға етә. Еҙтөймәлек ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ҡарай.

Был үсемлек тәбиғәт шарттарына бик тиҙ яраҡлаша. Уны һыу буйҙарында ла, туғайҙарҙа ла, болондарҙа ла йыш осратырға мөмкин. Ул бигерәк тә Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондарында киң таралған. Илеш, Яңауыл, Дүртөйлө, Борай, Балтас райондарында күпләп үҫә. Көньяҡ Уралдың Инйәр, Һаҡмар, Оло Ҡыҙыл, Кесе Ҡыҙыл йылғалары туғайҙарында еҙтөймәлек өйкөмләнеп үҫә. Уны ҡайһы берҙә ҡыр миләше тип тә атайҙар. Сөнки уның япраҡтарының урынлашыуы бер аҙ миләш ағасын хәтерләтә.

Еҙтөймәлек дарыу үләне булараҡ бик әһәмиәтле. Был маҡсатта уның кәрзинкә булып урынлашҡан, хас еҙ төймәләргә оҡшаған лимондай һары сәскәләрен файҙаланалар. Үсемлектең составында эфир майҙары, флавоноидтар, алкалоидтар, органик кислоталар, ыҫмалалар, буяусы матдәләр, А витамины, каротин бар.

Иҫendә тот. Йәй көнө походтарға сыҡҡанда еҙтөймәлекте ҡулығыҙға ыуығыҙ - камфара еҫен һиҙерһегеҙ. Уны битегеҙгә, муйынығыҙға һөртөгөҙ - һеҙгә серәкәйҙәр, ләпәкәйҙәр яҡын да килмәҫ, сөнки еҙтөймәлек еҫен серәкәй, себен, көйә һәм ҡандалалар яратмай.

Еҙтөймәлектең составында эфир майҙарының күп булыуы уның фитонцид активлығын арттыра. Мәҫәлән, еҙтөймәлектең сәскәләрен яңы һуйылған ит тирәләй һибеп һалһаң, ит оҙаҡ һаҡлана, сөнки себендәр еҙтөймәлектең еҫен яратмай һәм иткә ҡунмай.

**Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН, биология фәндәре докторы.**

БЫЛ ҠЫҘЫҠ!

# ЯРАЛҒЫНЫҢ...

## хәтере бар



**Кеше яралғыһы утыҙ аҙналыҡ сағында хәтергә эйә була. Голландияның Медицина үҙәге тикшеренеүселәре ошондай һығымта яһаған.**

Уларҙың тикшеренеүҙәрендә 93 ауырлы ҡатын ҡатнаша. Авторҙар тикшеренеүҙең этик комитет тарафынан хупланыуын һәм бөтә ҡатындарҙың да тикшеренеүҙә ҡатнашыуға ризалыҡ биреүен һыҙыҡ өҫтөнә алып үтә. Тикшеренеүҙәр алдынан уларҙан сәләмәтлеге, алған белеме, насар ғәҙәттәре, ауырлы саҡта үҙҙәрен нисек тойоуҙары тураһында һорау алына. Ҡатындар бала тапҡандан һуң яңы тыуған сабыйҙарын Апгар (иртә үсеүҙең билдәһе) шкалаһы буйынса тикшерә һәм тикшеренеүҙәрҙең уларға зарар килтермәүе асыҡлана.

Ҡатындарҙың йөклөлөгөн 5 төркөмгә бүләләр: 30, 32, 34, 36 һәм 38 аҙналыҡ. Тикшереүҙең маҡсаты яралғының тышҡы тәьҫирҙәргә нисек яуап биреүе һәм уларҙы хәтерендә һаҡлап ҡала аламы икәнен билдәләүҙән ғибәрәт була. Ҡараңғы һәм тыныс бүлмәләрҙәге кресолоарға уңайлы итеп урынлашҡас, һәр 30 секунд һайын ҡатындарҙың ҡорһағына виброакустик стимул ебәрәләр. Быны өсөн махсус виброакустик стимулятор ҡулланалар. Яралғының был стимулға хәрәкәт менән яуап ҡайтарыуы ультратауышлы сканер аша күҙәтелә. Белгестәр әйтеүенсә, был хәрәкәтте яралғының һәр ваҡыт яһаған ғәҙәти хәрәкәтенән айырыуы еңел булған. Бер нисә тапҡыр ҡабатланып торған стимулға яралғы өйрәнеп китә - ул стимулға ҡарата реакцияһын бөтөрә. Өйрәнеү - ул нервылар системаһы булған бөтә йән эйәләренә хас феномен.

Шулай итеп, тикшеренеүселәр күрһәткән беренсе һөҙөмтә - 30 аҙналыҡ сағында кеше яралғыһы ябай өйрәтеүҙәрҙе ҡабул итеүгә һәләтле. Ул ун минут элек нимә булғанын хәтерләй. Икенсе тесты уҙғары ваҡытында ауырлы ваҡыттың бөтә осоронда ла стимулға өйрәнеү тиҙерәк була икәнлеге күҙәтелә. Ғалимдар быны яралғының стимулды иҫтә ҡалдырыуы һәм ҡабатланған ваҡытта уға әллә ни тәьҫир итмәүен билдәләй. Тимәк, ул кәм тигәндә 10 минутлыҡ ҡыҫҡа хәтергә эйә. Икенсе тикшеренеүҙә ғалимдар 34, 36, 38 аҙналыҡ яралғаның кәм тигәндә 4 аҙнаға мәғлүмәтте һаҡларға һәләтле икәнен асыҡлай.

- Беҙ хәтерҙең әсә ҡарынында уҡ үсешкәнлеген самалап белә инек, - тиҙәр ғалимдар. - Беҙгә тәүге тапҡыр быны тикшеренеүҙәр менән иҫбат итергә мөмкин булды. Бәлки, яралғының хәтере тағы ла иртәрәк үсешәлер, әммә иртә осорҙа был юл менән уны күреп булмай.

Голланд ғалимдарының асышы практик күҙлектән ҡарағанда ла мөһим.

- Әгәр ҙә беҙ үҙәк нервылар системаһы үсешен яҡшы аңлай алһаҡ, үсеү осоронда тайпылыштарҙы асыҡлай алаҫаҡбыҙ, - тип һөйләй авторҙар.

ЙӨШЕЛ ДАУАХАНА

# БАШЛЫ БИЛСӘН

**Күп кенә ҡый үләндәре кеүек уҡ, билсән дә күп дауалау үҙенсәлектәренә эйә. Халыҡ медицинаһында билсәндең төнәтмәһен һәм һарҡындыһын төрлө нервы ауырыуҙарынан, эпилепсиянан, бауыр һәм бөйән эсәге ауырыуҙарынан ҡулланалар. Билсән үләне төнәтмәһенән сылатҡыстарҙы яраларҙы бөтәштерер өсөн ҡулланалар.**

**Эпилепсия.** 1 ҡалаҡ үләнде 1 стакан һыуға һалып, 5 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә, һарҡытырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-2 ҡалаҡ ҡабул итергә. Ошо уҡ төнәтмә нервы ауырыуҙарынан һәм боғаҡтан, бауыр ауырыуҙарынан, ануриянан (һейҙек ҡыуығына бөйәрҙәрҙән һейҙек килмәүе) файҙалы.

**Яралар, сиҡан, тиреләге тимгелдәр.** 3 ҡалаҡ үләнгә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтергә, һарҡытырға. Сылатҡыс рәүешендә оҙайлы ваҡыт ҡулланырға мөмкин. Ҡан киткән осраҡта көнөнә 2-3 тапҡыр 2 ҡалаҡ ҡабул итергә. Ошо уҡ төнәтмәнән конъюнктивит булған саҡта күҙгә сылатҡыс эшләп һалырға мөмкин.

# ҠАТЫН-ҠЫҘҘАРҒА

**Гел генә дарыу эсергә ынтылып тормағыҙ. Тәбиғәт бүләк иткән ысулдар күпкә хәүефһеҙ һәм һөҙөмтәлерәк. Ә үлән сәйҙәре тәмле лә!**

**Календула.** Сәскәһен дә, япраҡтарын да ҡулланабыҙ. Уның микробтарҙы юҡ итеү сифаты бар, шеште ҡайтара. Балаятҡылығы муйынтығы эрозияһы, кандидоз, стоматит мәлендә файҙалы. 30 грамм календулаға 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға, ярты сәғәт төнәтергә. Йылы көйөнә көнөнә 2-3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә.

**Меңъяпраҡ.** Өҫкө өлөшөн йыялар. Яраны йүнәлтә, бала имеҙгән ҡатындарҙа һөт төшөүгә булышлыҡ итә. 1 ҡалаҡ меңъяпраҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнатып сығарырға, 50 минут төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Ҡандала үләне.** Климакс, мастит мәлендә файҙалы. 1 ҡалаҡ үләнгә 10 ҡалаҡ үгәй инә үләне өҫтәргә, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 20 минут төнәтергә, һыуытырға, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

**Аҡ сәскә.** Сәскәләрен ҡулланалар. Гинекологик ауырыуҙар, күрем мәлендәге ауыртыуҙарҙан файҙалы. 1 ҡалаҡ аҡ сәскәгә 250 мл ҡайнар һыу ҡойорға. 20 минут төнәтергә. Көнөнә 4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

✔ Көн дә бер үк ваҡытта ятып, иртәнсәк билдәле сәғәттә торорға тырышығыҙ. Кискелеккә серотонинға бай помидор, һоло йәки дөгө бутҡаһы, балыҡ кеүек аҙыҡ-түлек менән туҡланыу яҡшы.



СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Кеше ғүмеренең өстән бер өлөшөн йоҡлап үткәрә. Унаң сифаты йәш олоғая барған һайын насарлана. Йоҡоһоҙлоҡ йонсота, һөҙөмтәлә организм ял итеп өлгөрмәй. Бындай күренеш 35 йәштән һуң башлана, сөнки мейе яйлап ҡартайған һайын, уның йоҡо өсөн яуап биргән зоналары деградациялана. Бөгөнгө тиҙлек заманында тыныс һәм сәләмәт йоҡо ла кеше өсөн проблема булып тора. Юҡҡа ғына 2008 йылда Халыҡ-ара йоҡо медицинаһы ассоциацияһы инициативаһы менән марттың икенсе аҙна йомаһы Бөтә донъя йоҡо көнө тип иғлан ителмәгәндер инде. Олоғайған һайын йоҡо оса тиһәк тә, йәш балаларҙың йоҡоһоҙлоғон нимә менән аңлатырға мөмкин? Ни өсөн ҡайһы бер сабыйҙар тынғыһыҙ була һәм йоҡламай ыҙалата? Ошоларҙы асыҡлау маҡсатында Әсәлекте профессиональ яҡлау үҙәгенең йоҡо буйынса консультанты Ирина БЕЗРУКОВАға мөрәжәғәт иттек.**

# ЙОҠОНАН ДА ЯҘМА,

## ғүмереңде йоҡлап та уҙғарма



**➔ Медицина өлкәһендә башҡа белгестәрҙе белһәк тә, йоҡо буйынса консультанттар тураһында күптәр белмәйҙер, моғайын. Ундай хеҙмәт ҡасан булдырылды?**

- Рәсәйҙә күптән түгел генә булдырылһа, сит илдәрҙә уның менән күптән файҙаланалар. Беҙ, йоҡо буйынса консультанттар ғына түгел, ғөмүмән, әсә кешенең торошон тотороҡланырыу, уға ярҙам итеү, балаға тыныс һәм унайлы йоҡоһон тәьмин иткән инструменттар табырға ярҙамлашыусылар, йәғни дауаламайбыҙ, ә кәңәштәр бирәбеҙ һәм бары тик йәш балалар, уларҙың ата-әсәһе менән эшләйбеҙ. Хәҙерге әсәйҙәрҙең проблемаһы - улар саманан артыҡ дөрөҫ булырға, китапта нисек яҙылған, шулай эшләргә тырыша. Уҡыйҙар, кемдеңдер тәжрибәһен үҙҙәрендә һынай һәм эске булмышы нимә теләгәнен, уға нимә кәрәк икәнен онота. Шуға күрә, ниндәй генә мәғлүмәт алғанда ла, уларҙы үҙенә "кейеп ҡарарға", үҙенә яраҡлаштырырға кәрәк. Әгәр, киреһенсә, алынған мәғлүмәткә яраҡлашҡанда, ҡатын-ҡыҙҙан әсәлек һиҙгерлеге юғала. Бала тыуғас, әсәй бөтөн сигналдарға иғтибар итеп, баланың нимә теләгәнен аңлар өсөн бөтөн ысулдарҙы ҡулланып ҡарарға тейеш: йүргәген алыштырырғамы, йыуындырырғамы, ашатырғамы, әйләндереп һалырғамы һ.б. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң уның һиҙгерлеге яҡшырасаҡ. Һуңынан инде баланың нимә теләгәнен шунда уҡ аңлап торасаҡ.

**➔ Ябай ғына итеп әйткәндә, кеше өсөн нимә ул йоҡо?**

- Кеше үҙенең ресурстарын тергеҙһен өсөн талап ителгән ял, организмдың нервы, эмоциональ системаһын яныртыу. Бының өсөн йоҡо тулы һәм сәләмәт булырға, йәғни кеше көн һайын бер үк ваҡытта, тыныслыҡта йоҡларға ятырға күнегергә тейеш. Беҙ, йоҡо буйынса консультанттар, нигеҙҙә, ата-әсәләргә балаларҙың йоҡоһоҙлоғо буйынса кәңәштәр бирәбеҙ. Сөнки кешегә бөтөн нәмә тыуғанда, хатта әсә ҡарынында ятҡанда уҡ һалына. Әлбиттә, йоҡо буйынса дөйөм ҡағиҙәләр бар, уларҙы бөгөн төрлө китаптарҙа, интернет селтәрендә табырға мөмкин. Әммә һәр кеше үҙенсәлекле һәм шуға күрә һәр кемгә айырым кәңәштәр талап ителә. Күп нәмә ғаиләнән, уның йолаларынан, эске ҡағиҙәләренән килә. Ҡайһылыр ғаиләлә һуң, хатта төнгө 12-нән аҙаҡ ятырға күнекһәләр, бәғзеләре иртә ята. Һуң ятыу, әлбиттә, балаларҙың ғына түгел, ололарҙың организмында ла үҙ йоғонтоһон, үҙ эҙен ҡалдыра.

**➔ Бала әсә ҡарынында уҡ ниндәйҙер тәртипкә өйрәнә икән, уның йоҡоһона әсә ҡарынында саҡта нимә йоғонто яһай?**

- Нигеҙҙә, әсәнең психоэмоциональ торошо. Ул тынысмы, борсоламы йәки нимәләргә көйәме, стресс кисерәме - былар барыһы ла баланың нервылар системаһы формалашыуында үҙ эҙен ҡалдыра. Артабан инде баланың нисек тыуыуы ҙур роль уйнай: тәбиғи тыуғанмы, стимуллау юлы менән табылғанмы, медикаменттар (наркотиктар, анестезия) ҡулланылғанмы, Кесарев киҫелеше эшләнгәнме. Ошоларҙың барыһынан сығып, тейешле кәңәштәр бирелә. Уларҙы еренә еткереп үтәгәндә, баланың йоҡоһон тергеҙергә мөмкин. Әммә бында шуны иҫәпкә алырға кәрәк: баланың йоҡлай алмауында неврологик симптомдар күренә, уның физик үҫешендә ниндәйҙер тайпылыштар бар икән, ул ваҡытта тәү сиратта ошо тармаҡ белгестәренә күрһәтергә, диагностика үтергә, аныҡ диагноз ҡуйырға кәрәк. Бәлки, балаға дауаланыу талап ителәләр. Әгәр бер ниндәй патология булмаһа, ундай балаларҙың әсәләренә баланың йоҡоһон көйләргә ярҙам итеп була.

**➔ Көйләү процесы нисек башҡарыла?**

- Сәбәптәр һәм әсәнең теләгенән сығып эш итәбеҙ. Әгәр әсә бала төн буйына йоҡлаһын, ти икән, бында сабыйҙың туҡланыуы, йәшен, нисек туҡланыуын иҫәпкә алырға кәрәк. Бала имә икән, уның ярты йәшкә тиклем төн буйына имергә таптарыуы нормаль күренеш. Был әсәне борсорға тейеш түгел, сабый шулай итеп көн дауамында арып, стресс кисереп, уйнап, нимә менәндер танышып, ишетеп, сарыф иткән нервылар системаһын тергеҙә һәм был бик яҡшы. Ҡайһы берҙә әсәйҙәр баланың көндөҙ әҙ йоҡлауына зарлана. Йәғни әле генә тамағын ашатаһың, йоҡлап китә, һалаһың - 20 минуттан ҡабат уяна. Бында ла уның нисек имеүенә, уға ошо туҡланыуҙың етеүетмеүенә, нисек тәрбиәләнеүенә, йоҡлаған урыны ниндәй булыуына иғтибар итергә кәрәк. Ҡайһы берҙә бала эргәһенә әсәһенең әйберен һалып ҡуйыу ҙа ярҙам итә - бала таныш еҫте тойоп, әсәһен эргәһендә тип уйлап, тыныс йоҡлай. Шулай уҡ бүлмәлә сит еҫтәр юҡмы икәнлегенә лә иғтибар итеү зарур. Ҡайһы берҙә йәш балалар аш-һыу бүлмәһенән килгән, сәскә, алкоголь һәм тәмәке еҫенә бик һиҙгер һәм ошо еҫтәр булғанда тыныс йоҡлай алмай.

Баланы йоҡлатҡанда иң ябай кәңәштәр: уны ҡулығыҙҙа бәүелтмәгеҙ. Ҡайһы бер ата-әсәләр баланы ҡулдарында йоҡлатып өйрәтә лә, һуңынан үҙҙәре үк интегә. Бәүелткән хәлдә лә, ул баланың әсә ҡарынындағы торошон хәтерләтергә, талғын булырға тейеш. Йәш балаларҙы өшөтөүгә ҡарағанда яндырыуы еңелерәк. Улар йылыны яҡшы туплай, шуға бүлмәлә унайлы нормаль, 23-25 градус йылы температура булғанда, артыҡ бошонорға ярамай. Ә инде бүлмәлә дымлылыҡ булыуы мотлаҡ, сөнки ҡоро һауала балалар насар йоҡлай.

**➔ Әйтәйек, баланы көн һайын бер ваҡытта йоҡлатырға һалып, бер көн ниндәйҙер сәбәп менән һуңға ҡалырға тура килде икән. Ҡәҙимге режимды тергеҙеү өсөн күпме ваҡыт кәрәк буласаҡ?**

- Ғөмүмән, ундай ваҡыттар булып китә. Быға тыныс ҡарарға кәрәк, сөнки һәр ваҡыт ҡағиҙәнән ситләшеүҙәр була. Ата-әсә быға ни тиклем тыныс ҡараһа, шул тиклем ҡәҙимге режимға инеп китеүе еңелерәк. Бер ни тиклем ҙурайған бала ата-әсәнең ғәҙәттәренә күнегә. Мәҫәлән, шаршауҙы тартыу, утты һүндереү, тауыштарҙы әкренәйтеү йоҡлар алдынан башҡарылған ритуал булып тора. Шулай уҡ бүлмәне еләтеү, диванға пижама һалыу йәки йыуыныу, йыуындырыу, әкиәттәр уҡыу ҙа йоҡлау ваҡыты еткәненә ишара һәм был баланың ҡанына һеңә. Баланы имеҙгәндә әсәй кеше уны бәпелдәтһә, һуңынан уны айырым йоҡларға һалғанда ла бәпелдәтеү йоҡоға китергә сигнал булып ҡабул ителә. Әлбиттә, иң яҡшы дауа - ул ғаиләлә тынyслыҡ, уның ағзаларының нормаль психоэмоциональ торошта булыуы. Бала өсөн әсәй - тотош донъя. Әгәр әсә ниндәйҙер көсөргәнеш кисерә икән, ул балаға ла күсә.

**➔ Ә бына ололарға килгәндә, кемгәлер 2-3 сәғәт йоҡо ла етә, кемдер 7-8 сәғәт йоҡларға тейеш. Ниндәйҙер стандарт нормалар бармы?**

- Һәр кемдең эске ресурстары бар. Ҡайһы ваҡытта улар тотороҡло эшләй, мәҫәлән, йәш саҡта йоҡо туймаһа ла уны еңел үткәрәбеҙ, аҙ ғына йоҡлап та организмды тиҙ арала тергеҙә алабыҙ. Өлкәнәйә бара 2-4 сәғәтлек йоҡо организм өсөн стресс булып тора. Йәш ваҡыт менән сағыштырғанда асыҡ аҡыл, зирәклек юғала. Шуға күрә, оло кешенең йоҡо күләме киске сәғәт 10-11-ҙәрҙә башланып, мотлаҡ 8 сәғәт булырға тейеш. Йоҡлар алдынан нервылар системаһын ҡуҙғытырлыҡ тапшырыуҙар, фильмдар ҡарауҙан тыйылырға, киреһенсә, психиканы тынысландырырға кәрәк. Әгәр иртә ятһағыҙ, иртәнге сәғәт 6-7-лә уяныу норма тип һанала. Бындай режимда эшмәкәрлек күпкә юғарыраҡ, һуң ятып, һуң торousыларҙыҡына ҡарағанда көн дауамында кәйеф тә яҡшыраҡ була. Юҡҡа ғына, иртә торһаң - ит бешә, һуңлап торһаң - бит бешә, тимәгәндәр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡайһы берҙә иртән ял итеп, дәрт ташып түгел, ә, киреһенсә, арып килеп торабыҙ, сөнки йоҡо туранан-тура беҙҙең нервылар системаһы менән - эске киҫерештәребеҙ, борсолоуҙарыбыҙ һ.б. - бәйләнгән. Тәнебеҙҙәге, мейебеҙҙәге импульстар үткәргән көнөбөҙ эҙемтәһе ул. Йәғни, нимә тоябыҙ, шуны кисерәбеҙ. Тимәк, яңы көндө тауҙар аҡтарырлыҡ көс туплап ҡаршы алырға теләһәгеҙ, мәкәләлә яҙылғандарға битараф булмағыҙ. Шул ғына.**

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА әңгәмәләште.**

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ШУНДАЙ САРА БАР

**Билдәле невролог Константин Уманский йоҡоһоҙлоҡтан интеккән кешеләргә махсус шифалы мендәр эшләп алырға тәҡдим итә.**

Бының өсөн ҙур булмаған киндер тоҡсайҙы ҡомалаҡ менән тултырып, уны көн дә яҫтанған ҡәҙимге мендәргә ҡуша тегергә кәрәк. Ҡомалаҡ еҫе нервылар системаһын тынысландыра. Уны башҡа төрлө үләндәр менән алмаштырырға ла була: бөтнөк үләне, аҡ сәскә, ҡандала үләне һ.б.

Йоҡларға ятырҙан ярты сәғәт алда үлән сәйе эсергә лә мөмкин. Уны шулай уҡ бөтнөк үләне, аҡ сәскә, фенхель орлоҡтары һәм бесәй үләндәрен тигеҙ нисбәттә ҡушып әҙерләгеҙ.

Көн дә бер үк ваҡытта ятып, иртәнсәк билдәле сәғәттә торорға тырышығыҙ. Кискелеккә серотонинға бай помидор, һоло йәки дөгө бутҡаһы, балыҡ кеүек аҙыҡ-түлек менән туҡланыу яҡшы.

**Профессор Эккарт кәңәше:** "Йоҡоһоҙлоҡ менән көрәшеү өсөн ошондай ҡағиҙәне күҙәтергә кәрәк: көн һайын бер үк ваҡытта йоҡларға ятырға. Хатта йоҡоң туймағанда ла иртәнсәк иртәрәк торорға. Көндөҙ йоҡламаҫҡа. Йоҡо бүлмәһен бөхтә итеп йыйнаҙландырырға һәм унда тауышы ныҡ шылтыраған будильникты ҡуймаҫҡа. Төнгә ҡарай еңелсә генә ашарға, киске биштән һуң бер ниндәй ҙә ҡәһүә йәки кола эсмәҫкә! Йоҡо алдынан физик әүҙемлек күрһәтмәҫкә. Һәм, иң мөһиме, йоҡлай алмай ҡуйыуҙан ҡурҡмаҫҡа. Йоҡо минең дошманым түгел, киреһенсә, минең яҡшы дуҫым, тип үҙеңде ышандырырға. Йоҡоға "һин" тип өндәш, шул саҡта ул һинең менән дуҫлашыр!"

БӘЙҒӘМБӘР ДАУАҺЫ

# ХОҘАЙ БАР ИТКӘН ҺӘР СИРҘЕҢ

## Хоҙай бар иткән үҙ дауаһы бар

**Мөхәммәт бәйғәмбәр кәңәштәрен баҫыуҙы дауам итәбеҙ. Бик ҡаты булмаған ауырыуҙарҙан шәйехтәр кешеләрҙе ниндәй ҙә булһа диетик сара менән дауаларға тырыша. Был сараларға төрлө үлән һәм тәмләткестәр ҙә инә. Түбәндә килтерелгән ысулдарҙа "Шифа" ҡушымтаһының үткән һанында күрһәтелгән продукттар, үләндәр һәм аҙыҡ тәмләткестәр ҡулланыла. Уларҙы ҡулға төшөрөү ҡыйын түгел. Рецепты ябай булһа ла, тәьҫире бик ҙур.**



### Дарыу әҙерләү

1. Дарыу әҙерләгәндә инструкцияларҙы теүәл үтә.

2. Рецепт буйынса дарыу әҙерләү өсөн порошок кәрәк тиелһә, тимәк, үләнде ваҡ итеп онтарға һәм муслин туҡымаһы йәки иләк аша иләргә кәрәк.

3. Төнәтмә тураһында һүҙ барһа, үлән һалынған һыу ҡайнап сыҡҡас та уттан алырға ла, биш минут һыуытырға. Аҙаҡ һөҙөп, йылы көйөнсә эсергә.

4. Үлән һалып ҡайнатылған һыуҙың яртыһы ҡалғансы ҡайнатырға тиелһә, яй ғына утта һыуҙың яртыһы быуға әйләнгәнсе ҡайнатырға.

5. Рецепт буйынса шәкәр күрһәтелһә, ул, Мексикала етештерелгәне кеүек, таҙа, порошок хәлендәге шәкәр булһын. Ундайы булмаһа, ҡорт балы ҡуллан.

6. Төнәтмәләр яңы ғына әҙерләнгән булһын.

### Анемия

1. 6-шар балғалаҡ онталған фенхель орлоғо һәм ҡыҙыл рауҙаның таж сәскәһен 1,5 сынаяҡ һыуҙа ҡайнатып, һығып ал да, көнөнә 2 тапҡыр эс.

2. 4 балғалаҡ онталған һинд дәрсене менән 8 балғалаҡ ҡорт балын 8 сынаяҡ гранат һутында ирет тә, шуны ярты стакан һыуға 2 балғалаҡ һалып, кәрәгенсә эс.

Еңел диета тот: емешеләк, сөгөлдөр, кишер, шпинат, шамбала аша.

### Стенокардия

1. 1 балғалаҡ шамбаланы 1,5 сынаяҡ һыуҙа ҡайнатып һөҙ ҙә, 2 балғалаҡ ҡорт балы өҫтәп, көнөнә 2 тапҡыр эс.

2. 1 балғалаҡ рауза майы менән 4 балғалаҡ татлы миндаль майын ентекләп бута һәм иртәле-кисле түшеңде ыу.

Һыуыҡтан һаҡлан.

### Артрит

1. 1-әр балғалаҡ ирәүән тамыры порошогын, аптека ромашкаһын, 0,5 ҡалаҡ ҡомалаҡты 3 сынаяҡ һыуға һал да, ҡайнап сығыуға еткәс, уттан ал. Шафран өҫтәп, 20 минутка төнәт тә, һөҙөп ал. Йоҡлар алдынан 0,5-1 сынаяҡ эс.

Әсе, тоҙло ризыҡ ашама. Иртә һайын саф һауала йөрө, һалҡындан һаҡлан.

### Астма

1. 1 балғалаҡ онталған имбирға 1,5 сынаяҡ ҡайнар һыу ҡойоп ултырт. Йоҡлар алдынан 0,5 ҡалаҡ йылымыс дауаны эс.

Һалҡындан һаҡлан. Һыуыҡ һәм тоҙло аҙыҡ ашауҙан тыйыл.

Түште татлы миндаль майы менән ыуырға мөмкин.

### Энурез

1. 1 ҡалаҡ онталған кориандр орлоғон суйын табала ҡыҙарғансы ҡурырға ла, 1-әр балғалаҡ гранат сәскәһе, сезам орлоғо, акация ыҫмалаһы менән ҡушып, ваҡ ҡына итеп онта. Һары шәкәр өҫтә. Йоҡлар алдынан 1 балғалаҡ эс.

2. 3 балғалаҡ киптерелгән һыу каштанын ваҡлап онтап, 3 балғалаҡ эшкәртелмәгән шәкәр менән ҡуш та, көнөнә 2 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эс.

### Эс ҡатҡанда

1. 5-әр балғалаҡ ваҡланып киптерелгән хөрмә менән онталған миндалде ныҡлап бута ла, 10 ҡалаҡ ҡорт балы өҫтә. Көнөнә 2 тапҡыр 3-әр ҡалаҡ эс.

2. 1-әр балғалаҡ александрий япрағын, тарттырылған имбирҙы, фенхель орлоғон, таштоҙҙо ваҡ порошок формаһына килтереп онтап, бута ла, һыу ҡушып, йоҡлар алдынан 1-әр балғалаҡ эс.

Япраҡлы йәшелсә аша, күп итеп емеш-еләк һуты һәм һыу эс. Шәкәр, кәнфит, тәмле-татлы ашамаҫҡа тырыш. Бәҙрәфкә көн дә бер үк ваҡытта йөрөргә тырыш.

### Йүтәлләгәндә

1. 1 сынаяҡ имбир һыуы менән 2 балғалаҡ ҡорт балын бутап, көнөнә 2-3 тап ҡыр эс.

2. 2 балғалаҡ мәк орлоғон һәм 3 балғалаҡ туралған солодка тамырына 1 сынаяҡ һыу һалып, 10 минут ҡайнатып, һөҙөп ал да, көнөнә 2 тапҡыр эс. (Был кәңәште астманан яфаланғандар ҙа ҡуллана ала: көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эс).

### Диабет

8 балғалаҡ тмин орлоғонан порошок эшлә һәм көнөнә 2 тапҡыр 0,5 балғалаҡ ҡуллан.

Тәмле-татлынан, татлы емештән тартыл. Картуф, батат, дөгө кеүек углеводтарҙан да баш тарт. Һәүетемсә генә физкультура менән шөғөлլән.

### Баш ауыртҡанда

1. 3-әр балғалаҡ лаванда сәскәһе менән кориандр орлоғон, 5 бөртөк ҡара боросто порошокка онтап, иртәнсәк яртышар дозаны һыу менән эс тә, ярты сәғәт ятып тор.

2. 1-әр балғалаҡ испан шафранын, мирра ыҫмалаһын, дәрсенде порошокка онтап, әҙерәк һыу ҡушып, паста барлыҡҡа килгәнсе бута. Пастаны таҙа кизе-мамыҡ туҡымаға һөртөп, бер йәки ике сикәңә лә яп.

### Геморрой

Еңелсә физик күнекмәләр менән шөғөлլән. Йәшелсә диетаһы кәрәк. Әсе тәмләткестәр ҡулланма.

1. 1 балғалаҡ ҡына япрағын ваҡлап онтап, бер сынаяҡ һыу менән бута ла, 20 минутҡа ҡуйып тор. Көнөнә 2 тапҡыр яртышар сынаяҡ эс.

2. 1/8 ҡалаҡ кориандр япрағын, 1/8 ҡалаҡ ҡыҙыл балсыҡты паста формаһына килтереп иҙ ҙә, геморройға һөрт.

**(Дауамы. Башы 22-се һандағы "Шифа" битендә баҫылды).**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Тормош сифаты инаныуҙар менән билдәләнә

Һәр атай үҙенең балаһын маҡтарға, уға бүләктәр бирергә тейеш, тип уйларға күнеккәнбеҙ. Ә инде атайыбыҙ был ғәмәлдәрҙе башҡармаһа, үпкәләйбеҙ, уны үҙгәртергә тырышабыҙ. Ләкин беребеҙҙең дә башына альтернатив юл: үҙебеҙҙе үҙгәртеү зарурлығы инеп тә сыҡмай. "Барыһы ла шулай уйлай бит!" - тиерһегеҙ. Юҡ! Күптәрҙең ундай көйләнеше юҡ, һәм улар был тормошта күпкә бәхетлерәк. Бәғзеләребеҙ тирә-яҡтағыларҙан ниндәйҙер аныҡ ғәмәл көтмәй, һөҙөмтәлә уларға йәшәүе лә тынысыраҡ.

Тормошҡа яңыса ҡараш ташлар өсөн ихтыяр көсө, үҙ-үҙеңә ышаныс, нейрохирургтың ярҙамы кәрәкмәй. Бары тик ғәҙәти булмаған уйҙар уйларға өйрәнергә кәрәк. Икенсе тапҡыр кемдер кәйефегеҙҙе ҡыра икән, беҙҙе кешеләр түгел, ә улар тураһындағы уйҙарыбыҙ асыуландыра икәнен онотмағыҙ. Уйҙарыбыҙ ниндәй генә ауырлыҡ килтермәһен, улар бары тик уй. Уларҙы үҙгәртергә мөмкин.

### Бөтөн бәләләрем - эшемдән!

Кеше эшен әрләй икән, проблема унының үҙендә. Мәҫәлән, эшегеҙ бер төрлө, ялҡыткыс, шул уҡ ваҡытта "эш шулай булырға тейеш" тигән инаныуығыҙ бар, ти. Әгәр икенсе, ҡәнәғәтлек килтергән эш эҙләп ҡараһағыҙ, нимә килеп сығыр? Икенең береһе: йә һеҙҙең үтенесте кире ҡағырҙар, йә был эш тә ниндәйҙер ваҡыттан һуң күңелһеҙ һәм ялҡытҡыс була башлар. Әгәр ҡарашығыҙ түбәнгеһенә ҡапма-ҡаршы һәм "эшкә байрамға барған кеүек барырға кәрәк" тиһегеҙ икән, был осраҡта күңелһеҙ, киләсәкkә бер ниндәй перспектива булмаған конторала күпмелер ваҡытҡа тиклем ултырып, үҙ-үҙеңә: "Етте, былдағы бөтөн нәмә минең өсөн түбәнселек һәм рух деградацияһы. Бында бер минутка ла ҡалмайым!" - тиәсәкһең. Сәбәп эштә түгел, ә унының тураһында нисек уйлауыңда.

### Эш хаҡым бик аҙ!

Күптәр үҙенең аҙ аҡса алыуында инаныуҙарын түгел, ә эшенең насарлығын билдәләй. Шулай икән, ни өсөн һаманғаса икенсе эш тапмағанһың? Башҡа бер нәмә лә эшләй белмәйһеңме? Инаныуҙарыңды үҙгәртеү менән яҡшыраҡ эш табыласаҡ, үҙеңдең бизнесыңды асасаҡһың, йәиһә аҡсаңды дөрөҫ тотонорға өйрәнәсәкһең, квалификацияңды арттырып, хеҙмәт буйынса үрләй башлаясаҡһың. Байлыҡты бары тик үҙеңдең аҡылың менән генә туплап була, ә кешеләр йәки күршеләрҙән ишеткән хәбәр нигеҙендә түгел...

### Мин окладта ултырам…

Байығыу һәләте беҙҙең инаныуҙарыбыҙ менән билдәләнә һәм унының хеҙмәткә түләү системаһының эш хаҡы күләменә бер ниндәй мөнәсәбәте юҡ. Мәҫәлән, бер үк компанияла эшләүсе һигеҙ кеше бер үк эш хаҡы ала. Уларҙың яртыһы аҡсаһын уңышлы ҡулланып, бына тигән итеп йәшәй, ә кемдер бутерброд ашағыһы килгән һайын банкка кредит алырға йүгерә. Улар бер-береһенән хеҙмәт хаҡы күләме менән түгел, ә аҡсаға мөнәсәбәте менән айырыла. Әгәр үҙең теләгән күләмдә аҡса алмайһың йәки аҡсаң даими рәүештә ҡайҙалыр юҡ була икән, быңың үҙ сәбәптәре бар. Унының тамыры тирә-яҡ мөхиттә түгел, ә һинең эске донъяңда.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



## Башыңды "ват", мейеңде "бейет", сәсеңде һуғар

Һәр беребеҙ көн һайын матур кейенеп, биҙәнеп-төҙәнеп эшкә, башҡа урынға барырға онотмай, әммә берәү ҙә мейе тураһында уйламай, хәтерһеҙлектән зарланалар ғына. Хәтер нығыныһын өсөн түбәндәгеләрҙе эшләргә кәрәк:

1) доғалар, шиғырҙар ятла, үҙең дә ижад ит;

2) бер нисә сит тел һүҙен тәржемә итеп "яфалан" - башыңды "ват";

3) тарағың көн һайын сәсең төбөнә 300-400 мәртәбә "йүгереп төшһөн", сәсеҙ бабайҙар ҡулын майлап, 5-10 тапҡыр башын һыйпаһын;

4) түбәңә генә тауыҡтың эс майын йәки һары май һал - мейең дә, баш тамыры ла тукланыр, сәсең дә ҡойолмаç;

5) арпаны һап-һары булғансы йыу, ҡайнаған һыу ҡой, һикертеп ҡайнатып ал, һеҙ һәм башыңды йыу - сәсеңдең "һыуһыны ҡаныр", мейең туҡланыр.

## Йүткергәндә ни эшләргә?

Эçе йәй етте, бала-саға көндәр буйы һыуҙан сыҡмай. Оҙаҡ йөҙә торғас, күгәрешеп тә бөтәләр, ҡайһылары йүткерә лә башлай. Был осраҡта былай итергә: 1) бер стакан ҡайнаған һөткә бер балғалаҡ бал ҡушып эсерергә; 2) йомортҡа һарыһына шәкәр ҡушып, ағарғансы туҡырға һәм ас ҡарынға эсергә; 3) ярты стакан һөткә ярты стакан кишер һуты ҡушып эсһәң дә шифаһы тейә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы**
**Байым ауылы.**

## Бесән кәбәгенән ванна

Бер кило бесән кәбәген киндер тоҡҡа һалынған көйө ҙур һауытҡа ултыртып, өçтөнә һалҡын һыу ҡойғас, талғын ғына итеп ярты сәғәт ҡайнатырға. Тоҡто алып ташлағас, һыуын ванналағы 37 градус йылылыҡтағы һыуға өçтәргә. Ваннаны йөрәгә насар кешеләргә көн аша, йөрәге һау булғандарға көн һайын 5-20 минут алырға. Бесән кәбәге эфир майҙарына бай, ваннанан һуң ҡан йөрөшө шәбәйеп, тән тонусы күтәрелә, матдәләр алышыныуы көсәйә. Бесән кәбәге эске ағзаларҙы ла таҙарта, бауырҙағы ҡом, бәләкәй таштар сыға, бөйөрҙә, быуындарҙа йыйылған тоҙҙар ҡыуыла. Былдай ваннаны кәмендә 10 тапҡыр инергә һәм был көндәрҙә күберәк шыйыҡса эсергә кәңәш ителә.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ЕЛӘКТӘРҘӘ...

## һауыҡтырыр дауа бар



### Баҡса еләге менән ҡайын еләге

Был еләктәр С витамины, фолаттар һәм В витаминдары төркөмө һәм төрлө туҡлыҡлы матдәләргә, антиоксиданттарға, мәçәлән, йөрәк өсөн кәрәкле фенолдарға бай, ялҡынһыныуға, яман шешкә ҡаршы көрәшеүсе яҡшы сара булып тора.

Әгәр ҙә көн һайын еләк ашаһаң, иммун системаһы һәм ҡан тамырҙары нығына. Баҡса еләге шулай уҡ шешеү процесын туҡтата, микробтарға ҡаршы сара булараҡ та ҡулланыла ала. Ул киҙеү вирусына ҡаршы көрәшә, тимәк, йылы миҙгелдә еләк менән һыйланып, организмды ҡышҡы ауырыуҙан да һаҡлайһығыҙ.

Баҡса еләге составындағы йод көндәлек аҙыҡ рационын йод менән тулыландыра. Ул ҡандағы шәкәр күләмен төшөрә, шуға ла баҡса еләге шәкәр диабеты менән ауырыусыларға ла файҙалы. Бөйөр һәм һейҙек юлдары ауырыуҙары булғанда баҡса еләген йәй миҙгеле тамамланғансы ҡулланырға кәңәш ителә. Көн һайын 400 грамм еләк ашау ауырыуҙы дауаларға ярҙам итәсәк.

Бынан тыш, баҡса еләге тәбиғи һейҙек ҡыуҙырғыс һәм бауырҙы тынысландырыусы сара иçәпләнә. Шуға ла ревматизм һәм бауыр ауырыуҙары ваҡытында баҡса еләге диетаһын ҡулланыу яҡшы. Быының өсөн аҙна дауамында көн һайын 1,5 килограмм еләк ашарға кәрәк. Бер юлы артыҡ ауырлыҡтан да ҡотолорһоғоҙ. Баҡса еләгендәге салицил кислотаһы быуындар һыҙлауынан ярҙам итә. Был еләкҡә аллергиялары булғандарға уны ҡулланыуҙы кәметергә йәки әсе һөт продукттары менән ҡушып ашарға тәҡдим ителә. Ашҡаҙан һуты артыҡ бүленгәндә, ашҡаҙан һәм бауыр ауырыуҙары ваҡытындағы киçкен сәнсеп ауыртыуҙар мәлендә ҡулланырға ярамай. Бәләкәй балаларға һәм ауырлы ҡатындарға ла һағыраҡ булырға кәрәк.

Баҡса еләге десерттар әҙерләүҙә киң ҡулланыла. Ҡаймаҡлы еләк әҙерләү өсөн, мәçәлән, яҡынса 210 грамм еләк һәм 105 грамм һөт өçтө кәрәк. Ғалимдар фекеренсә, тәмле десерт әҙерләү өсөн был иң идеаль нисбәт. Шул уҡ ваҡытта, ер еләгенә иң яҡшы өçтәмә булып йогурт тора.

100 грамм баҡса еләгендә 34 ккал (ҡайын еләгендә - 30).

### Ҡурай еләге

Һутлы ҡурай еләгендә файҙалы матдәләр бигерәк күп. Уның дауалау һәм косметик һөҙөмтәһе Боронғо Греция ваҡытынан билдәле.

Ҡурай еләгендәге А витамины тырнаҡты, сәс тамырҙарын нығыта, С витамины организмдан артыҡ шыйыҡлыҡты сығара, тоташтырғыс туҡыманы нығыта, организмдағы артыҡ холестерин күләмен, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре хәүефен түбәнәйтә.

Ҡурай еләге веналарҙың варикоз киңәйеүе менән яфаланған кешеләргә файҙалы. Уның составында органик кислоталар, шул иçәптән, салицил кислотаһы бар, шуға ла был еләк һалҡын тейеүгә ҡаршы ҡулланыла, тирҙе ҡыуа, тән температураһын төшөрә. Унда тимер ҙә күп. Ҡурай еләгендәге баҡыр стресс булдырмаçҡа ярҙам итер.

Табиптар бөйөр йәки үт ҡыуығы менән ауырыусыларға ҡурай еләге ҡулланыуҙы тыя. Сөнки уның составындағы оксалаттар тәндәге шыйыҡлыҡты кристаллаштырыу һәләтенә эйә.

Ҡурай еләген оҙаҡ һаҡлап булмай, шул уҡ ваҡытта, ул башҡа еләктәр кеүек, эшкәрткәндән һуң файҙалы сифаттарын юғалтмай.

100 грамм ҡурай еләгендә 38 ккал.

### Ҡара көртмәле

Барлыҡ еләктәр кеүек үк, ҡара көртмәле антиоксиданттарға, В төркөмө витаминдарына, С, Е һәм Л витаминдарына бай. Уның составындағы антоциан мейе эшмәкәрлеген һәм хәтерҙе яҡшырта. Бынан тыш, ҡара көртмәлеләге цинк менән хром организмға көс өçтәй. Был микроэлементтар организмды глюкоза менән тәьмин итеүсе инсулин синтезында ҡатнаша. Шуға ла ҡара көртмәле ауыр физик эш менән шөғөлләнеүселәргә лә, диабет менән яфаланыусыларға ла берҙәй файҙалы. Әммә уның иң яҡшы сифаты - күҙ күреү һәләтен яҡшыртыу. Һирәк осрай торған микроэлемент - марганец һәм үҙенсәлекле матдә - антоцианлар күҙҙең селтәрле ҡабығын кире тергеҙә ала. Ҡара көртмәле ашағандан һуң бигерәк тә төнгө күреү һәләте яҡшыра.

100 грамм ҡара көртмәлелә - 44 ккал.

### Ҡара ҡарағат

Халыҡ медицинаһында дауалау һәм сирҙе иçкәртеү йәһәтенән ҡара ҡарағат та киң ҡулланыла. Ҡара ҡарағатта В, Р витаминдары, А провитамины, пектин матдәләре, фосфор кислотаһы, эфир майы, К витамины төркөмө, каротин, калий тоҙҙары, фосфор һәм тимер тоҙҙары бар. Ҡара ҡарағат япрағы фитонцидтарға, магнийға, марганецҡа, көкөрткә, эфир майҙарына һәм С витаминына бай.

Ҡарағат яман шеш һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмаçҡа ярҙам итә. Оло йәштәгеләргә ул бигерәк файҙалы, ҡарағат уларҙы аҡыл кеүәһе түбәнәйеүҙән һаҡлай. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡара ҡарағат емештәре диабет сиренән һаҡлау һәләтенән лә эйә. Уны бөйөрҙә таштар булғанда, бауыр һәм тын юлдары ауырыуҙары ваҡытында ҡулланалар. Атеросклероз мәлендә лә файҙалы, ғалимдар әйтеүенсә, иммунитетты ла нығыта.

100 грамм ҡара ҡарағатта 44 ккал.

### Ҡыҙыл ҡарағат

Файҙалы булыуы яғынан ҡара ҡарағаттан бер ҙә ҡалышмай. Уның составында С витамины аҙыраҡ булһа ла, Р һәм А витаминдары күберәк. Йод күләме буйынса ҡыҙыл ҡарағат хөрмәнән ҡалышмай. Был емеш составындағы кумарин - ҡан ҡуйырыуынан, тимәк, тромбтар һәм инсульттарҙан һаҡлай.

Ҡыҙыл ҡарағат ашҡаҙан һәм эсәктәр эшмәкәрлеген яҡшырта, яңы ғына өҙөлгән емештәр аппетитты күтәрә, һуты эçе көндә һыуһынды ҡандыра.

Ҡыҙыл ҡарағат емештәре ҡара ҡарағатҡа ҡарағанда әсерәк, шуға ла башлыса джем эшләүгә тотонола. Туңдырылған көйөнә яҡшы һаҡлана.

100 грамм ҡыҙыл ҡарағатта - 38 ккал.

### Крыжовник

Эсәкте һауыҡтырыусы, үт бүленеп сығыуға ярҙам итеүсе еләк. Уның составында калий менән натрийҙың нисбәте 11:1, шуға ла крыжовник организмда артыҡ һыу йыйылыуҙы булдырмауы яҡшы сара иçәпләнә.

Крыжовникта шәкәр (14 процентҡа тиклем), органик кислоталар, пектиндар, тимер, фосфор, В, С, Р витаминдары, каротин бар. Халыҡ медицинаһында башлыса уның һыу менән ҡатыштырылған һуты ҡулланыла. Ул матдәләр әйләнешен яҡшырта, бөйөр, һейҙек юлдары, бауыр сирҙәрен дауалай. Аҙ ҡанлылыҡ, тире сирҙәре мәлендә файҙалы. Организмдан ауыр тоҙҙарҙы сығара. Серотонин яман шешкә ҡаршы көрәшә.

100 грамм крыжовникта - 43 ккал.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ПЕРСИК



**Персикты (шафталы) түбән гемоглобин булғанда, анемия ваҡытында ҡулланыу тәҡдим ителә. Уның составындағы тимер алма, сейә, абрикос, грушаға ҡарағанда күберәк.**

Персик бигерәк тә операция, нур терапияһы үткән ауырыуҙарға файҙалы. Ғөмүмән, уның химик составы организмда барлыҡҡа килеүе мөмкин булған кире үҙгәрештәргә ҡаршы иммунитетты көсәйтә. Токоферол матдәһе иһә, ҡартайыу порцесын әкренәйтә.

Диатез, аллергия булғанда персиктың һөйәктәрен яҡшы итеп ҡыҙҙыраһың, онтайһың, ваҡлайһың, ҡәһүә төйгөс машинала ваҡлайһың. Килеп сыҡҡан ондо бер аҙ һыу менән бутап, аллергия сыбыртмаһы өçтөнә һылайһың.

Һимереү, диабет менән интегеүселәргә персик ашау кәңәш ителмәй. Шулай уҡ ҡалҡан биҙендә гипофункция булғанда персиктан алыç тороу тәҡдим ителә, сөнки ул ҡалҡан биҙе гормондарын барлыҡҡа килтереүгә ҡамасаулай. Аллергиянан яфаланыусылар ҙа персик ашауҙан тыйылырға тейеш.

**Рим ӘХМӘДОВ.**

# "БАБИЧ" - МӘСКӘҮҘӘ



**Мәскәүҙең "Ролан" кинотеатрында Булат Йосоповтың "Бабич" фильмын күрһәттеләр. Фильм башҡорт халҡының бөйөк улы, шағир һәм йәмәғәт эшмәкәре Шәйехзада Бабичҡа арналған.**

Сараны Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы, Республиканың Мәскәүҙәге тулы хоҡуҡлы вәкиллеге һәм "Беҙ берҙәм" күп милләтле проекты ярҙамында Башҡортостандан сенатор Лилиә Ғүмәрова ойошторҙо. Ул Мәскәүҙә башҡорт киноһы көндәре сиктәрендә үтте. Унда Дәүләт Думаһы депутаты Зөһрә Рәхмәтуллина, күп милләтле проект етәксеһе Армен Гюльназаров, фильмдың режиссеры Булат Йосопов, төп ролде башҡарыусы Илгиз Таһиров, ҡатнашты.

Ойоштороусылар фекеренсә, башҡорт фильмдары республикала тыуып-үҫеп, бөгөнгө көндә илебеҙҙең баш ҡалаһында уҡып йәки эшләп йөрөүселәрҙе йыйыу өсөн генә күрһәтелмәй. Уларға кино сәнғәте экспертарын, башҡа милләт вәкилдәрен дә саҡырыу - маҡсаттарҙың береһе булып тора. "Бабич" фильмы - республикабыҙға нигеҙ һалыусыларға бағышланған фильмдар циклының беренсеһе. Уларҙың сюжеттары башҡорт драма, опера театрҙарына нигеҙ һалыусылар, башҡорт профессиональ музыкаһы, фольклоры, хореографияһы башланғысында тороусыларға арналасаҡ", - тине Булат Йосопов.

# ТАҒЫ БЕР ФИЛЬМ...



**Өфөлә режиссер Булат Йосопов яңы проектҡа - "Беренсе Республика" тарихи фильмын төшөрөүгә тотондо. Тарихи драма Башҡортостандың 100 йыллығына арналған һәм республикаға тәүге нигеҙ ташын һалыусылар хаҡында бәйән итә.**

Тарихи персонаждар - башҡорт милли театрын ойоштороусы Вәлиулла Мортазин-Иманский, шағир Ғабдулла Амантай, композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтов, яҙыусылар Дауыт Юлтый, Һәҙиә һәм Ғөбәй Дәүләтшиндар, хореограф Фәйзи Ғәскәров, шағир Мостай Кәрим яңы картинаның геройҙары буласаҡ. Фильмды төшөрөүселәр 1919 йылдан, Октябрь революцияһы һәм граждандар һуғышынан, фән һәм мәҙәниәт үҫешенән, 1930 йылдарҙағы репрессияларҙан алып реабилитациялау һәм Хрущев дәүеренә ҡәҙәр ғәйәт ҙур тарихи осорҙо үҙ эсенә алырға ниәтләй.

Сценарий авторҙары - С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Таңсулпан Бабичева һәм З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты, филология фәндәре кандидаты Гөлсәсәк Саламатова. Композитор - Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Ришат Сәғитов. Продюсер - "Йәнле таҫма" кинокомпанияһы директоры Леонид Филинов. Йәйгеһен проект өсөн актерҙар кастингы үтәсәк, "Бабич" фильмында ҡатнашҡан ҡайһы бер башҡарыусылар ҡаласаҡ. "Беренсе Республика" фильмы 2018 йылда Башҡортостандың 100 йыллығын байрам итеү сиктәрендә тамашасыға тәҡдим ителәсәк.

# "БАЙЫҠ"ҠА КИЛЕГЕҘ!

**"Байыҡ-2017" телевизион балалар бәйгеһенең һайлап алыу турында Башҡортостандың 30 районы һәм 14 ҡалаһынан 200-ҙән ашыу бала ҡатнашты.**

Башҡортостан юлдаш телевидениеһы матбуғат секретары Люциә Дәүлиева белдереүенсә, быйыл "Байыҡ" бәйгеһе 9-сы тапҡыр үткәрелә. Ул Республика Башлығы грантына ойоштора. Конкурстың ижади бағажында меңләгән бейеү йыйылған. Күп сәхнә йондоҙҙары үҙҙәренең ижад юлын тап ошо бәйгенән башлаған, енеүселәр республика исеменән халыҡ-ара фестивалдәрҙә лә ҡатнаша.

Быйылғы бәйгелә иң йәш бейеүсе Алиса Бәхтиеваға 5 йәш. Өфө ҡыҙы башҡорт бейеүенә Бөрйәндә йәшәгән өләсәһенә ҡунаҡҡа барғанда ғашиҡ булған. Ул "Бөрйән ҡыҙы" бейеүен башҡарҙы. "Балалар бәйгеһендә тәбиғи һәләт өҫкә сыға. Әгәр ҙә һәләте бар икән, уның сығышы барыһына ла оҡшай. Хатта хореографтар өйрәткән хәрәкәттәрҙе лә үҙҙәренсә бейей бит ул балалар", - ти конкурстың авторы һәм ойоштороусыһы Рита Өмөтбаева. Енеүселәрҙе "соло", "дуэт", "трио", "ансамбль" номинацияларында билдәләйәсәктәр. Гала-концерт быйыл беренсе тапҡыр Өфөлә, 15 июлдә "Ватан" паркында үтәсәк.

# БЕР САФТА...

**Башҡортостандың халыҡ артисы Азат Айытҡолов Екатеринбург ҡалаһында Ural Music Night фестивалендә ҡатнашты. Урал Музыка Төнө - ҙур музыкаль проект, донъяла берҙән-бер фестиваль, унда бер юлы төрлө музыкаль йүнәлештәрҙә, стиль һәм жанрҙарҙа эшләгән музыканттар йыйыла. Беренсе фестиваль 2015 йылда үтте, унда 70 мең кеше ҡатнашты. 2016 йылда музыканттар сығыш яһай торған майҙандар ике тапҡырға артып, 120 мең кешене йыйҙы. Быйыл был һан 150 меңгә етте. Сара Свердловск өлкәһе Хөкүмәте, Екатеринбург ҡалаһы Хакимиәте ярҙамында үтте.**

Билдәле музыканттар Вадим Самойлов, Мегаполис, Женя Любич, LampЫ Оркестра, Ҡураҫ һәм Харбинск Симфоник оркестры менән бер рәттән Азат Айытҡолов та фестивалдең иң абруйлы ҡунаҡтарынан иҫәпләнде. Ҡурайсы ике сәхнәлә сығыш яһаны. Төп майҙандағы асыҡ һауалағы концертта Азат Айытҡолов "Буранбай", "Сыңрау торна", "Наполеон Бонапарт" халыҡ көйҙәрен уйнаны. Шулай уҡ "Изумруд" халыҡ уйын ҡоралдары ансамбле солисы, баянсы Ринат Яҡупов менән "Ҡолой кантон" һәм башҡорт көйҙәренә теҙмә башҡарҙылар. Азат Миңлеғәле улы был ансамбль менән күптән хеҙмәттәшлек итә, хатта Америка джаз музыканты, алты тапҡыр "Грэмми" премияһына лайыҡ булған Пол Уинтер менән ҡурайҙа джаз уйнаған.

# ТЕРЕ ҺЫУҒА ТИҢ...



**Ошо арала ҡаланың "Баймаҡ" сауҙа комплексында "Башҡорт китабы" исемле сауҙа нөктәһен асыу тантанаһы үтте.**

- Район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ултырышында башҡорт телендә сыҡҡан китаптар һатыуҙы тергеҙергә кәрәклеге тураһында һөйләштек. Әште оҙаҡҡа һуҙмай, З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте менән бәйләнешкә индек. Нәшриәт директоры Илһам Йәндәүләтов ярҙам итергә һүҙ бирҙе. "Баймаҡ" сауҙа комплексы етәксеһе Әҙеһәм Ҡотоевҡа рәхмәт - ошо сауҙа комплексынан урын бүлде, - тип сауҙа нөктәһен асыу тарихын бәйән итте район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Ришат Ишембәтов.

Бына иң тулҡынландырғыс, тантаналы мәл! Ҡыҙыл таҫмалар киҫелә. Һатып алыусылар атлығып тәүге 10 китап һатып алыусы исемлегенә инергә ынтыла. Сөнки улар өсөн Илһам Миңлеғәле улы махсус бүләктәр килтергәйне. Шулай уҡ ул сауҙа нөктәһенә күп функциялы принтер-сканер ҙа бүләк итте.

Башҡорт китаптары рухиәткә сарсаған халыҡ өсөн Урал батыр бөрккән һыуһын ҡандырғыс тере һыуға тиң. Киләсәктә башҡорт китаптарының һатыу нөктәләре тағы ла артыр, ҡала һәм район халҡының яратҡан урынына әүерелер, тип ысын күңелдән ышанабыҙ.

**Айгөл ИҘЕЛБАЕВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Июль (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 3 (9) дүшәмбе | 3:17 | 4:47 | 13:30 | 20:22 | 21:52 | 23:22 |
| 4 (10) шишәмбе | 3:18 | 4:48 | 13:30 | 20:22 | 21:52 | 23:22 |
| 5 (11) шаршамбы | 3:19 | 4:49 | 13:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |
| 6 (12) кесе йома | 3:20 | 4:50 | 13:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |
| 7 (13) йома | 3:21 | 4:51 | 13:30 | 20:20 | 21:50 | 23:20 |
| 8 (14) шәмбе | 3:22 | 4:52 | 13:30 | 20:19 | 21:49 | 23:19 |
| 9 (15) йәкшәмбе | 3:23 | 4:53 | 13:30 | 20:18 | 21:48 | 23:18 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

# ҠОТЛАЙБЫҘ!

Баймаҡ районы Ҡарамалы ауылында йәшәүсе ҡәҙерле әсәйебеҙ, өләсәйебеҙ **ЛАТИПОВА Мәрхәбә Ғәҙелша** ҡыҙын 85 йәшлек оло юбилейы менән ҡотлайбыҙ.



Һинә ныҡлы һаулыҡ, балаларыңдың ҡәҙер-хөрмәтендә бәхетле ҡартлыҡ, тыныс иртәләр, күтәренке күңел, рух ныҡлығы теләйбеҙ. Һин беҙгә һәр ваҡыт оло таяныс, көнөшсе булдың, артабан да яҡындарыңдың хөрмәтен тойоп, бәрәкәтле ғүмер кисерергә насип булһын.

*Йән рәхәте бирһен Хоҙай һиңә,*
*Тән сихәте бирһен ғүмергә.*
*Бәхетле бул, ҡайғы-хәсрәт күрмә,*
*Хоҙай ололаһын үҙеңдә.*

**Изге теләктәр менән, балаларың, ейән-ейәнсәрҙәрең.**

* * *

Июнь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Учалы ҡалаһынан** Риф Мөхәмәтов, Илһөйәр Абдрахманова, **Учалы районы** Уральск ҡасабаһынан Роза Хөсәйенова, **Ишембай районы** Биксән ауылынан Зәлиә Йомағужина, **Мәсетле районы** Әбдрәхим ауылынан Сәжиҙә Фәйзрахманова, **Стәрлебаш районы** Йәлембәт ауылынан Райхан Усманова, **Архангел районы** Архангел ауылынан Гөлназ Фәтҡуллина, **Ауырғазы районы** Төрөмбәт ауылынан Миңлегөл Ибраҡова, **Баймаҡ районы** Ниғәмәт ауылынан Әсмә Мырҙағәлина, Үргә Йәйыҡбай ауылынан С. Суфьянова, **Бишбүләк районы** Ҡаныҡай ауылынан Илдар Солтанов, **Ейәнсура районы** Новопавловка ауылынан Ринат Әлмөхәмәтов һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ҡотлайбыҙ!

Гел шулай көслө рухлы, кешелекле, изге күңелле булығыҙ, ғүмерегеҙ шатлыҡ-ҡыуаныстарға бай булһын.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# УНҺЫҘ УН ЮҠ

"Ун нәмәнән башҡа ун нәмәгә урын юҡ: күңелең пак булмағанда - зиһенгә; ғилемең булмағанда - һәләткә; ҡурҡыу тигәндә белмәгәндә - ҡотолоп ҡалыуға өмөт бағлауыңа; ғәҙеллек булмағанда - әмирлеккә; тәрбиә булмаған ерҙә - күркәм холоҡ һәм намыҫҡа; аманатҡа тоғролоҡ булмаған ерҙә - именлек менән тынғылыҡҡа; йомартлыҡ һәм фәҡирҙәргә ҡарата хәйер-хаҡлыҡ булмаған ерҙә - муллыҡҡа; бары менән байҙарҙа йәшәргә өйрәнмәгән ерҙә - хәйерселектән арыныуға; тыйнаҡлыҡ булмаған ерҙә күркәм холоҡҡа; Аллаһы Тәғәлә ярҙамы булмаған ерҙә Хаҡ диндә таратырға тырышыуға урын да юҡ, мәғәнә лә тапмаҫһың".

**Ғүмәр ибн әл-Хаттабтан ҡалған хикмәт.**

*ИҒЛАН*

Утерянный **студенческий билет,** выданный механическим факультетом Башкирского государственного аграрного университета на имя **Мельчакова Максима Евгеньевича,** считать недействительным.

✓ *Дуҫ күп булһа ла - аҙ, дошманың аҙ булһа ла - күп.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



*БАШ ҠАЛА ҠУНАҒЫ*

# ҠУРАЙҘЫҢ ТЫЛСЫМЛЫ МОҢО...

## халыҡтарҙы берләштерә

**Популяр "Deep Forest" төркөмө музыканты Эрик Муке башҡорт музыка мәҙәниәте менән танышыр өсөн Башҡортостанға килде. Легендар музыкант сәфәре тамамаланыр алдынан журналистарға бындағы осрашыуҙар менән тулыһынса ҡәнәғәт һәм Өфөлә 2020 йылда уҙасаҡ Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерләнеүҙә ҡатнашырға әҙер булыуын хәбәр итте.**



"Башҡортостанға килеп, төйәгегеҙҙең йылыһын, уның музыкаль мираҫын, үҙенсәлекле ҡурай музыка ҡоралының сыңын тойҙом һәм этномузыка башҡарыусы алдынғы музыканттарығыҙ менән эшләй башланым. Берҙәмләп Рәсәй халыҡтарының милли культураларын һаҡлап ҡалыуға һәм киң танылыуға тос өлөш индерә аласаҡбыҙ, тип уйлайым. Бының менән "Deep Forest" төркөмө ЮНЕСКО менән хеҙмәттәшлектә сирек быуат шөғөлләнә инде. Минең уйлауымса, илегеҙ халыҡтарының музыкаһын донъяла ишетеүҙәре мөһим, сөнки Рәсәйҙәге ысын тормош хаҡында донъяла бик аҙ беләләр", - тине Эрик Муке.

Уның һүҙҙәренсә, Европала бөтә халыҡтарҙы ла "урыҫтар" тип әйтергә ғәҙәтләнгәндәр, ә Рәсәй күптәр өсөн - ул тик Мәскәү, Санкт-Петербург һәм "Владивосток менән тамамланған ҙур бушлыҡ. "Алдан Рәсәй минә лә бик таныш булманы һәм бер республикала төрлө халыҡтарҙың йәшәүен күреп, иҫем китте. Өфөлә мин сағыу Милли костюмдар парадын тамаша ҡылдым. Ғәжәпләнеүемдең һәм һоҡланыуымдың сиге булманы! Бындай сараны бөгөнгө Францияла үткәреүҙе күҙ алдына ла килтерә алмайым. Беҙҙең барыһы ла ҡурҡыу тойғоһо менән солғанған, был толерантлыҡҡа килтерә лә инде. Халыҡтар колориты ла юҡ беҙҙә.

Был йәһәттән Рәсәй минең өсөн - илһам! Шуға Фольклориаданың нәҡ ошо урында үтергә тейешлеге аңлашыла ла", - тип фекерен белдерҙе "Deep Forest" төркөмөн ойоштороусы.

Сәфәр йомғаҡтары буйынса музыкант Башҡорт музыка ҡоралдары һәм мотивтары нигеҙендә композиция яҙырға ниәтләнә, уны "Deep Russia" исеме аҫтындағы яңы альбомына бер өлөшө итергә күҙаллай. Ул Өфө Фольклориадаһы өсөн гимн, ә "Deep Forest" төркөмө сараның хедлайнеры булыуы мөмкин. Башҡорт йырсылары өсөн ул донъя музыка сәхнәһенә юл булыр һәм Башҡортостан мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныуҙың ҡапыл артыуына килтерер, моғайын. "Музыканттарҙың милли ҡоралдарҙа уйнау кимәленә хайран ҡалдым. Өфөлә төүге кистә минең өсөн концерт ойошторған башҡарыусылар менән танышҡас та берҙәмлекте тойҙом, тел менән әйтә алмаһаҡ та, беҙ берҙәмләп импровизацияланыҡ. Моғайын, ошо тылсымлы моң беҙҙе берләштергәндер ҙә. "Этнотөн" сәхнәһендә асыҡ һауала башҡорт ҡурайсылары менән сығыш яһауҙан, Өфөләге бөтә майҙан дәртләнеп ҡаршы алғандан мин әле лә тәьҫирләнеп йөрөйөм. Был ҙур музыка идеяһының башланғысы булырына ышанам", - тип тамамланы һүҙен музыкант.

**"БАШИНФОРМ".**

*ИҒТИБАР: АКЦИЯ!*

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туктамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

**69. Ҡолдәүләт "Шиғырҙар, поэмалар" йыйынтығы.** "Ҡолдәүләттең шиғырҙарын һәр кем бер тапҡыр булһа ла уҡып сығырға тейеш, тип уйлап, "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы исемлегенә уның 2008 йылда баҫылған йыйынтығын тәҡдим итәм. Шағирҙың һәр һүҙе уйлы кешегә уй, аҡыл, фәһем бирерлек. Уның ысынбарлыҡҡа ишара яһаған күп шиғырҙары бөгөн дә актуаллеген юғалтмаған. Ҡолдәүләттең тыуған төйәгенә, халҡына арнап яҙылған шиғырҙары илһөйәрлек рухы менән һуғарылған. Шағирҙың "Диалог" тип аталған шиғыры бының асыҡ сағылышы булыр.

Диалог

Ейән: - Нисек йәшәйһең һин, олатайым,
Ҡалғанһың бит ҡоро һөйәккә?!
Олатай: - Мөхәббәтем тота мине, улым,
Мөхәббәтем тыуған төйәккә,
Мөхәббәтем халҡым күңеленә,
Мөхәббәтем ғәзиз әсәмә.
Мөхәббәтһеҙ бер ҙә йәшәмәнем,
Мөхәббәтһеҙ һин дә йәшәмә! - тип яҙа Зәлиә Шәмсетдинова.

**70. Ғаян Лоҡманов "Кояш сығыр алдынан" роман.** "Ғаян Лоҡмановтың "Кояш сығыр алдынан" романында 1912-1918 йылдарҙағы ваҡиғалар һүрәтләнә. Ярлылар һәм байҙар араһындағы үлемесле көрәш әҫәрҙең төп йөкмәткеһен тәшкил итә. Ауыл старостаһы Ҡәйүм, старшина Үрәзмәтов, помещик Красин ярлы халыҡты талап йәшәй. Ауыл ярлылары Әнүәр, Ғилман, Хәйретдин яҡты көн, туҡ тормош өсөн уларға ҡаршы көрәшә. Ғаян Лоҡманов был романды яҙыу өсөн материалдарҙы үҙенең тыуған Ҡариҙел районында туплай. Әҫәрҙәге геройҙар ысын шәхестәрҙең яҙмыштарын берләштергән образдар, авторҙың был хаҡта үҙе әйтеүе романдың баш һүҙендә бирелгән. "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына был әҫәрҙе нәҡ шул тормошсан булыуы өсөн тәҡдим итәм", - тип яҙа Әминә Ғәлиева.

**"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-иңдәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите төркөмөндә махсус булдырылған **"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы"** тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

**Рубриканы Сәриә ҒАРИПОВА алып бара.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КҮП ҺАЙЛАҺАҢ...

## һайландыҡҡа ҡалырһың

Дуҫ күп булһа ла - аҙ, дошманың аҙ булһа ла - күп.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Көнө-төнө баш һыҙлауына зарланып, кисен шул ауыртыуға сәбәпсе булған шарапты эсеүселәргә оҡшағым килмәҫ ине.

**(Иоганн Вольфганг Гете).**

Нимә оҡшай, шуны эшләү - бына нимә ул азатлыҡ.

**(Вольтер).**

Ҡыҫҡараҡ һөйләйек. Донъя былай ҙа һүҙ менән тулған.

**(Станислав Ежи Лец).**

Йәмәғәтселек фекеренә таянма, ул маяҡ түгел, ул алдаштырғыс ут.

**(Андре Моруа).**

Үлгәндәрҙе иң оятһыҙ уғрылар һәм... сәскә атыусы яҙыусылар талай.

**(Остин О,Малли).**

Әлбиттә, аҡсаға һатып ала алмай торған нәмәләр ҙә була, әммә һеҙҙең уларҙы аҡсаһыҙ һатып ала алғанығыҙ булдымы?

**(Огден Нэш).**

Кешеләрҙең үҙҙәрен ҡыҙыҡлы тотоуы тормошто рәхәт итә һәм йәмғиәтте берләштерә.

**(Аристотель).**

Ысын дөрөҫлөк ялған кеүек яңғырай. Улай бик яңғырамаһын өсөн уға әҙерәк алдаҡ ҡушырға кәрәк. Кешеләр гел шулай иткән дә.

**(Федор Достоевский).**

Ахмаҡлыҡ эшләргә ҡурҡмаған кеше һаман йәш әле.

**(Петр Капица).**

Элек ҡайһы берәүҙәр мемуарҙар яҙып, йәшәү өсөн аҡса эшләгән. Хәҙер иһә мемуарҙар яҙып баҫтырыу менән янап, тағы ла күберәк аҡса эшләүселәр бар.

**(Питер Устинов).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡыл эйәһенән һорайҙар икән:**

**-Ни өсөн һин һәр ваҡыт сабыр һәм түҙемле? Һинең иңеңә әллә ниндәй бәләләр ишерелһә лә, асыуланмайһың да, түҙынмайһың да...**

**Аҡыл эйәһе шулай тип яуап биргән:**

**- Ҙур бәхетһеҙлектәр - ҡыҫҡа ғына бер мәл ул, ә бәләкәйҙәре иғтибарға лайыҡ түгел. Шулай булғас, ниңә түҙынырға һәм түҙемһеҙлек күрһәтергә?!"**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 30 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 1312/06